*Ергә күктән берәй метеорит килеп төшмәгәйе йә донъяны һыу баҫмағайы, тип көтмә. Шуны бел: һәр нәмәнең үҙ ваҡыты, һиңә килә торған бәлә барыбер бер киләсәк һәм һине урап үтмәйәсәк. Ә һинең өлөшкә тейешле булмағанын һин барыбер көтөп ала алмаясаҡһың. Ҡурҡма, шикләнмә, юҡ бәләне уйлап сығарма, һәр ауырлыҡты Хоҙай һынауы тип ҡабул ит. Хоҙай бүләкләгән изгелектәрҙе Ул ебәргән һынауҙар менән сағыштырып ҡара әле: юғалтыуҙарға ҡарағанда табыштарың барыбер күберәк бит.*

***Ғабдулла ҠАРНИ.***

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

28 ДЕКАБРЬ - 3 ҒИНУАР
(АҠЪЮЛАЙ - ҺЫУЫҒАЙ)
2013 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№52 (574)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Ҡаҙ өмәһе...**

ауыл тормошонон бер биҙәге



5

**Байрамдар ниңә кәрәк?**

Балаларҙы ҡыуандырыу өсөн, әлбиттә!



6

**Үҙебеҙ ултырған ботаҡҡа...**



8-9 балта сапмайыҡ

**Йәшел йылҡы йылы...**

юртып түгел, сабып килә



12-13

14 ТВ-программа

*ӘЙҘӘ, РӘХМӘТЛЕ БУЛАЙЫҠ!*

# ЙӨКМӘТКЕНЕ КҮТӘРМӘЛӘГӘН...

## авторҙарыбыҙҙы барлайбыҙ

**Йолабыҙ буйынса, һәр йылдың һуңғы 52-се һанында авторҙарыбыҙ тураһында бер кәлимә һүҙ әйтеү фарыз. Эйе, беҙ авторҙарыбыҙ менән бәхетлебеҙ. Уларҙың һәр береһе беҙгә үҙҙәренең әҫәрҙәре, мәҡәләләре, яҙмалары, сәләме менән шатлыҡ килтерә. Ваҡытлы матбуғат баҫмаһындағы ижад ағышының төп ҡағиҙәһе лә шул бит: күпме автор - шул ҡәҙәре фекер, тема. Ә темалар төрлөлөгө ҡыҙыҡлы ла, уҡымлы ла, фәһемле лә итә гәзитебеҙҙе.**

"Киске Өфө"өнөң тәүге һандарынан алып тоғро авторыбыҙ булған Фәүзиә Яхина (Усманова), мәҫәлән, үҙе бер хазина: ул һәр хатында ниндәйҙер бер мөһим күренешкә ишаралай, ябай кешеләр көнитмешендәге проблемаларҙы замандың глобаль хәл-ваҡиғалары юҫығында тасуирлап, әһәмиәтле һығымталар яһай. Милләт, ер, тел яҙмышы өсөн көйөнөүҙәре менән уҡыусы аңына ғәм һала. Мәҫәлән, унын бер мәҡәләһенән шундай юлдар: "...бөгөн күптәр балалары күңеленә башҡорт моңон һеңдермәй, башҡортлоғо менән һоҡланырға, унын өсөн һыҙланырға өйрәтмәй. Йәш кешенең күңелендә ошондай һоҡланыу, һыҙланыу, һағыныу хисе булһа, ул сит-ят илдәрҙә, сит-яттар араһында ла туған илен, телен, моңон һағынып ҙа, ул хистәрҙе "аҙғын теләк"тәрҙән дә, сит милләт вәкиленә булған мөхәббәттән дә өҫтөн ҡуйыр. Сөнки беҙҙең милләт алдындағы бурыс шул уҡ ата-әсә алдындағы бурыс менән типә-тиң. Ә ата-әсәне бер ваҡытта ла икенсегә алыштырып булмай. Шулай ҙа был мәсьәләлә әллә ни бошонорға ла кәрәкмәй: рухһыҙҙар китер, рухлылар ҡалыр. Милләтебеҙ иң ныҡ рухлыларҙан тупланыр..." Ошондайыраҡ фекер-һығымталар яһаусы аңлы авторҙарыбыҙҙы юғары баһалайбыҙ һәм уларҙың һүҙе уҡыусы тарафынан барыбер ҙә шәйләнмәй ҡалмайҙыр, тип ышанабыҙ.

Баймаҡ ҡалаһынан Урал Мостафин тигән авторыбыҙҙы "Ябай кешенең... ҡатмарлы фекерҙәре" тигән яҙмаларынан беләһегеҙ. Унын һығымталары ла уҡыусыларыбыҙ өсөн файҙалы, әһәмиәтле. Әле күптән түгелге бер мәҡәләһендә ул халыҡ йөҙө, халыҡ үҙенсәлеге юғала барыуы тураһында борсолоу белдергәйне. Шул уйланыуҙарынан бер һығымта: "Әҙәбиәт - һүҙһеҙ, мәғрифәт - телһеҙ, сәнғәт - йөҙһөҙ, йәмғиәт өнһөҙ булған һайын, рухиәт төҫһөҙләнә, тормош битһеҙләнә, холоҡ-ҡылыҡтар көндән-көн йәмһеҙләнә барыуы һәр намыҫлы башҡортто уйландырырға тейештер ул..."

**(Дауамы 16-сы биттә).**

*ШИҒРИ ҠОТЛАУ*

## ЙЫЛҠЫ ЙЫЛЫНА

*Уйҙарымда бик йыш осоп киләм*
*Ҡырағай ат-тарпан иленә.*
*Ҡылған тулҡынланған сал далаға,*
*Аҡбуҙаттың сыҡҡан күленә.*

*Меңәр йылдар хозур Уралында*
*Тарпан менән башҡорт йәшәгән.*
*Илен һаҡлап батыр ҡанын ҡойған,*
*Өйөр һаҡлап аҫау кешнәгән...*

*Эйәр һалған Ваҡыт тарпанға ла,*
*Башҡорт атын белә заманым.*
*Әллә шуға һәр саҡ йылҡы йылын*
*Башҡорт йылы, тейеп һананым.*

*Башҡорт аты һымаҡ әрһеҙ, сыҙам*
*Заман йөгөн тартҡан халҡыма,*
*Ошо йылда уңыш юлдаш булһын*
*Яҡты киләсәге хаҡына.*

*Тынып ҡалған дала буйлап елһен*
*Өйөр-өйөр башҡорт аттары.*
*Уңалһындар ерҙең яралары,*
*Юғалһындар илдең "аһ"тары.*

*Йылҡы йылы-Башҡортостан йылы,*
*Рәсәй йылы -быны беләбеҙ.*
*Өмөт, хыял, ҙур ышаныс менән*
*Киләсәккә бергә eләбеҙ.*

**Тимер НИӘТШИН.**



Игорь Кинәпин фотоһы.

"Сулпылар" конкурсы тураһында 11-се биттә уҡығыҙ.

*КЕМ АЛЫҠ!*

## МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Гәзит-журналдарға яҙылыу миҙгеле тамамланды. Яңы 2014 йылдың ғинуарында өйҙәренә "Киске Өфө" килмәгәндәр, бәлки, күп ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәрҙән мәхрүм ҡалыр. Ә шулай ҙа борсолмай тороғоҙ: 17 ғинуарға тиклем яҙылһағыҙ, "Киске Өфө" һеҙгә февралдән килә башлар.**

**Ә инде ноябрҙә гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәреүселәр беҙҙән ошо бүләктәрҙе алып ҡыуаныр, тип ышанабыҙ (декабрҙә яҙылыусылар буйынса ғинуарҙа йомғаҡ яһарбыҙ).**

Әбйәлил районы Аҫҡар ауылынан Зәлифә Шакирова, Көйөргәҙе районы Ермолаево ҡасабаһынан Тамара Малбаева -**"Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре"**;

Баймаҡ районы Үрге Иҙрис ауылынан Юлай Мостафин, Икенсе Этҡол ауылынан Сәлимә Хәсәнова, Бәхтегәрәй ауылынан Р. Нәҙербаев, Хәйбулла районы Татыр-Үҙәк ауылынан Нәғимә Ғәббәсова, Бөрйән районы Байназар ауылынан Гәүһәр Айытҡолова, Өфө районы Дмитриевка ауылынан Г.Зиннурова, Саҡмағош районы Саҡмағош ауылынан Музаяна Ғүмәрова, Дыуан районы Иҫке Хәлил ауылынан Рәшиҙә Ғәйнуллина, Салауат ҡалаһынан Әнисә Солтанморатова - **2014 йылға "Башҡортса дини календарь"**;

Благовар районы Ямаҡай ауылынан Мәрзиә Батыраева, Баймаҡ районы Иҫке Сибай ауылынан Байбуловтар, Ҡыуат ауылынан Гөлнара Иҫәндәүләтова, Өфө ҡалаһынан Нурзиә Заһретдинова, Баймаҡ ҡалаһынан С. Ғөбәйҙуллина, Фазылитдин Сөләймәнов, Ғафури районы Сәйетбаба ауылынан Сәлимә Исламова, Учалы районы Рысай ауылынан Дилбәр Ғәлина, Әбйәлил районы Аслай ауылынан Ғамир Ғайсин, Дыуан районы Мәсәғүт ауылынан Әлфирә Нуриева - **Ноғман Мусиндың "Алдар батыр"**;

Баймаҡ районы Икенсе Этҡол ауылынан Әкрәм Ҡәйепҡолов, Ғафури районы Сәйетбаба ауылынан Вилдан Шәрипов, Учалы районы Истамғол ауылынан Әҙилә Ғәйетҡолова, Күгәрсен районы Мәкс‌үт ауылынан Юлиә Вафина, Ишембай ҡалаһынан Зәйнәп Ғөбәйҙуллина, Бөрйән районы Брәтәк ауылынан А. Ғәбитова, Иҫке Собханғол ауылынан Сәләх Әхмәтов, Әбйәлил районы Байым ауылынан Әнүәрә Хәйбуллина, Ҡырмыҫҡалы районы Иҫке Муса ауылынан Флүрә Ғәлимова,Миәкә районы Илсеғол ауылынан Гүзәл Ниғмәтуллина - **Гөлфиә Янбаеваның "Елле фекерҙәр елгә осмаһын"**;

Әбйәлил районы Буранғол ауылынан Бәширә Усманова, Миәкә районы Ҡырғыҙ-Миәкә ауылынан Х. Шәймәрҙәнова, Октябрьский ҡалаһынан Ә.Хасаев, Шишмә районы Яңы Ябалаҡлы ауылынан З. Райманова, Баймаҡ районы Беренсе Этҡол ауылынан Әнисә Әбделғазина, Йомаш ауылынан Рамазан Байегетов, Учалы районы Ҡоҙаш ауылынан Р. Усманова, Салауат районы Мөрсәлим ауылынан Ҡорбанғәлиева - **Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"** китаптарына лайыҡ булды.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

*ӘЙҘӘ, ОПТИМИСТ БУЛАЙЫҠ!*

# НИМӘ ГЕНӘ ЭШЛӘНМӘҺЕН...

## барыһы ла яҡшыға

**2013 йылда донъяла һәм илебеҙҙә күҙәтелгән сәйәси-ижтимағи ваҡиғаларҙы күҙ уңынан үткәргәндә бер үҙенсәлеккә иғтибар итмәү мөмкин түгелдер: ул да булһа, "Нимә генә эшләнмәһен, барыһы ла яҡшыға", тигән принциптың үтәлеше. Был Яңы йыл байрамы алдынан була торған күңел күтәренкелегенә бәйле оптимизм тойғоһо ғына түгел. Сөнки булып үткән ваҡиғаны, ул яҡшымы-насармы, бер нисек тә үҙгәртеп булмай, унан тик үҙеңә файҙа өсөн һабаҡ алырға ғына була.**

Бар донъяла, бигерәк тә Рәсәйҙең Алыҫ Көнсығышында күҙәтелгән тәбиғәт катаклизмдарының иң аяуһыҙҙарының береһе булған һыу баҫыуҙар беҙҙең республикала ла күҙәтелде. Шундай бәләгә дусар булған райондағы бер ауыл мәктәбе уҡыусылары менән осрашҡанда шундай һорау бирҙем: "Донъялағы хатта иң кире күренештең дә бер ыңғай яғы була, тиҙәр. Мәҫәлән, бар донъяны баҫып алырға теләгән Гитлер фашизмы, Икенсе бөтә донъя һуғышын башлап, донъяның тыныслыҡ яғында торған күпселек халыҡтарҙы һәм дәүләттәрҙе үҙенә ҡаршы бер йоҙроҡҡа туплады. Ул йоҙроҡ фашизмды еңеп сыҡты һәм ул көс, әле булһын, донъя һуғышы ҡубыуҙан Ер шарын аралап тора. Аҙағы фашизмдың ҡыйратылыуы һәм ядро ҡоралын һынау менән тамамланған был һуғыш һабағы ядро ҡоралын ҡабат ҡулланыуҙың кешелек өсөн һәләкәт булыуын аңлауҙа. Әлбиттә, быйылғы һыу баҫыуы менән был һуғыш араһында бер ниндәй ҙә уртаҡлыҡ юҡ, әммә кешелек ауырлыҡ кисергәндә генә сыныға, тигән уйҙан сығып ҡарағанда, беҙ ошондай һыу баҫыуҙарҙан да үҙебеҙгә һабаҡ алырға тейешбеҙҙер. Шул күҙлектән сығып ҡарағанда, һыу баҫыуҙың һығымталарын яһағанда, "ыңғай" яғын нимәлә күрәһегеҙ? Ул беҙгә ниндәй һабаҡ бирә?"

Шунан һуң уҡыусы балалар ниндәй дәлилдәр килтерҙе, тиһегеҙме? Бына улар:

- һыу быға тиклем йыйылып ятҡан барлыҡ сүп-сарҙы ағыҙып алып китте, ауылыбыҙ эргәһе таҙарып ҡалды;

- өйҙәре, һарайҙары емерек, иҫке булған аҡсаһыҙ кешеләргә яңы йорт, һарай һалыр өсөн дәүләт аҡса бирҙе (бәхет юҡ ине, бәхетһеҙлек ярҙам итте, тигән кеүек);

- өйҙәрен йылғаға яҡын итеп һалған кешеләргә бүтән улай итмәҫ өсөн һабаҡ булды;

- кешеләр бәләгә тарығанда кемдең кем икәне беленде, беҙ хәҙер яҡшы беләбеҙ: кемгә ышанырға була, кемгә юҡ һ.б.

Әлбиттә, һуңғы дәлилде бер уҡыусы килтерҙе. Осрашыуға килеүселәргә мин үҙемдең дә фекеремде әйттем:

- ғалимдар әйтеүенсә, алдағы йылдарҙа ла яуым-төшөм күп буласаҡ, һыу баҫыуҙар күҙәтеләсәк, шуға күрә һеҙҙең ауылға сит динле, сит йолағөрөфлө кешеләр күсеп килергә ынтылып тормаясаҡ...

"Тәбиғәттә насар һауа торошо юҡ" тиҙәр. Ысынлап та, кешене рәхәтлек кенә һынамағанын да яҡшы беләбеҙ. Рәхәтлек, уңайлыҡ аңды ойота, рухты йоҡлата. Донъяла барған күп кенә сәйәси ҡатмарлы ваҡиғаларҙа Рәсәйҙең "насар һауа торошо"на ҡарамайынса, үҙ йөҙөн һаҡлап ҡала белеүен, улай ғына ла түгел, ҡайһы бер ҡапма-ҡаршылыҡтарҙы йомшартыуға өлгәшеүен (Яҡын Көнсығыштағы, Украиналағы ваҡиғалар) 2013 йылдың төп сәйәси һығымталарының береһе тип атарға мөмкин булыр ине. Әлбиттә, Рәсәйҙең эске проблемалары бихисап, ҡайһылары, бигерәк тә иҡтисадҡа, граждандарҙың социаль хәленә бәйлеләре, тиҙ арала хәл ителерлек тә түгелдер. Шулай ҙа донъя кимәлендә тыныс тормош һаҡланыуында Рәсәй Федерацияһы төп гаранттарҙың береһе. 2013 йылда илебеҙҙең был позицияһы донъя кимәлендә тағы ла нығына төшкән һымаҡ булды. Һәр хәлдә, был юҫыҡта барыбер ҙә оптимизмға урын бар. Ә уҡыусыларыбыҙ ни ти?

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Михаил Ходорковскийҙың төрмәнән сығыуын йылдың төп сәйәси ваҡиғаһы итеп күрһәтеүсе журналистар ҙа бар илебеҙҙә. Әгәр ҙә Украина Рәсәйгә эйәреп, Юлия Тимошенконы ла төрмәнән азат итһә, был ваҡиғаны төп булмаһа ла, мөһим бер сәйәси ваҡиға тип атай алыр инек.**

**Һөйөндөк АҪЫЛОВ.**

*ӘЙҘӘ, АЙЫҠ БУЛАЙЫҠ!*

# БАЛАҢА ЫҢҒАЙ ӨЛГӨ КҮРҺӘТКЕҢ КИЛӘМЕ?

**Етеп килгән Яңы йыл менән ҡотлар алдынан милләттәштәргә тап ошо ваҡытта әйтә торған һүҙебеҙ бар. Иҫке йылды оҙатҡан, ә яңыһын ҡаршылаған тылсымлы миҙгелде әле һыҙланмай көтөп алғаныбыҙ юҡ. Ниңә? Бер уйлаһаң, ялтырауыҡлы, күңелле, ап-аҡ был миҙгелде ҡырылған күңел менән ҡаршыларлыҡ сәбәп тә юҡ һымаҡ. Икенсе яҡтан ҡараһаң - бар икән шул!**

Белгестәр билдәләүенсә, ошо матур байрамда ҡулланылған алкоголле эсемлек-наркотиктар шауҡымы, шаңдауы арҡаһында төрлө зыян күргән, хатта һәләк булған граждандарҙың һаны йыл да йөҙәр меңгә етә икән. Быға өҫтәп, халыҡтың һаулығына ниндәй зыян янауын, эскелек арҡаһында күпме ғаиләнең ыҙғышыуын һәм башҡа күренештәрҙе иҫәпкә алғанда, яңы йыл байрамдарын айыҡ үткәреү зарурлығы аңлашыла төшә, буғай.

Иғтибар итһәгеҙ, Яңы йыл байрамдарында телевизорҙа күрһәтелгән тапшырыу-фильмдарҙа әүҙем, йәки һиҙҙермәй генә "Яңы йылда шампан шарабы булһа ла эсеү кәрәк" тигән фекер үткәрелә. Шулай булғас, телевизор ҡараусылар, телевизор геройҙарынан күрмәксе, бокал сәкәштереп, эсеп ебәреүҙе әллә ни күрә. Бөтөн тәртипһеҙлектәр ошо беренсе бокалдан башлана ла инде.

Урам тәьҫиренән бигерәк, балаларыбыҙ беҙҙең тәрбиәгә еңелерәк бирелә. Әйҙәгеҙ, балаларыбыҙға ыңғай өлгөнө үҙебеҙ күрһәтәйек, айыҡ тормошто йәшәү нормаһы итеп алайыҡ! Ул ваҡытта бер ниндәй телевизор ҙа, төнгө урам да ғәзиздәребеҙгә ҡурҡыныс-хәүеф менән янамаҫ.

Яңы йылдан һин үҙең нимәләр өмөт итәһең, милләттәш? Моғайын, һаулыҡ, ғаилә, донъялар именлеге һәм бәхеттер. Бәхет өмөт итәһең икән, Яңы йыл байрамын бар ғаиләгеҙ, дуҫтарығыҙ, туғандарығыҙ, хатта күршеләрегеҙ менән айыҡ үткәрегеҙ!

**Марат АБДУЛЛИН,**
**"Айыҡ Башҡортостан" төбәк йәмәғәт хәрәкәте рәйестәше.**

## Н И М Ә ?  Ҡ А Й Ҙ А ?  Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов республика парламенты депутаттары алдында БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға йыллыҡ Мөрәжәғәтнамәһе менән сығыш яһаны. Былтыр 30 ноябрҙә тәҡдим ителгән бынан алдағы Мөрәжәғәтнамәһендә Рөстәм Хәмитов, граждандарҙың көнкүрешен яҡшыртырға һәм улар өсөн лайыҡлы йәшәү шарттары булдырырға ынтылыу яҡын аралағы төп бурыс, тип әйткәйне. Быйылғы Мөрәжәғәтнамәһендә лә кешеләрҙең тормошон яҡшыртырға ынтылыуҙы яҡын киләсәккә бурысты билдәләүсе йүнәлеш тип атаны.

✓Республика парламентының булып үткән ултырышында "Башҡортостан Республикаһы Конституцияһына үҙгәрештәр һәм өҫтәмәләр индереү тураһында"ғы Закон проекты ҡаралды. Закон проекты Башҡортостан Республикаһының иң юғары етәксеһе вазифаһын русса "Глава Республики Башкортостан", башҡортса "Башҡортостан Республикаһы Башлығы" тип үҙгәртергә тәҡдим итә. Проект тәүге уҡыуҙа күпселек тауыш менән ҡабул ителде.

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Рәсәй Федерацияһы Президентының Волга буйы федераль округындағы Тулы хоҡуҡлы вәкиле ҡарамағындағы Совет ултырышында ҡатнашты, ул Ульяновскиҙа үтте. Осрашыуҙа Волга буйы федераль округы төбәктәрендә милләт-ара һәм конфессия-ара мөнәсәбәттәрҙе көйләү буйынса төбәк программаларын тормошҡа ашырыу мәсьәләләре тикшерелде.

✓БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Лилиә Ғүмәрова рәйеслегендә үткән Ведомство-ара комиссия ултырышында Республика хеҙмәт шарттарын яҡшыртыу һәм һаҡлау маҡсатлы программаһын тормошҡа ашырыу мәсьәләһе ҡаралды. Башҡортостанстат мәғлүмәттәренә ярашлы, республика предприятиеларында хеҙмәтте һаҡлау сараларына тотоноуҙар 2012 йылда бер эшләүсегә 8351 һум тәшкил итте. Мониторинг күрһәтеүенсә, муниципалитеттар һәм төбәктең ҡайһы бер министрлыҡтары хеҙмәтте һаҡлау сараларын һанға һуҡмай. 2013 йылдың 11 айында производствола хәүефһеҙлек техникаһы ҡағиҙәләрен боҙоуҙар өсөн 217 вазифалы һәм 16 юридик шәхес административ яуаплылыҡҡа тарттырылды.

*МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ*

# БӘНДӘГӘ БӘНДӘ БУЛМА

**Хәҙерге ваҡытта Африканың халҡы 1 миллиардтан, уның 54 дәүләтенең береһе һаналған Алжирҙың халҡы 38 миллиондан ашып китте. Францияла йәшәүсе 65 миллиондан ашыу кешенең 4-5 миллион самаһын мосолмандар тәшкил итә һәм улар араһында Алжир ғәрәптәре иң күбеһе. Франция бер Алжирҙы ғына үҙенең колонияһына әүерелдермәй. 1883 йылда ул Туниста, 1912 йылда Мароккола үҙенең протекторатын булдыра һәм Төньяҡ Африканы тулыһынса үҙенең колонияһы яһай.**



Аппетит ашаған саҡта килә, тиҙәр. XIX быуаттың аҙағында Франция үҙенең империаль сәйәсәтен Африканың 30 процент территорияһын биләгән Сахара сүллегенең көньяғына йүнәлтә. 1895-1905 йылдарҙа ошо икһеҙ-сикһеҙ ерҙәрҙә йәшәүсе ислам дине тотоусы халыҡтар француз Көнбайыш Африкаһы составына инә. Францияға был территориялар сеймал сығанағы һәм арзан эш көсө өсөн кәрәк була.

Ҡыҙыҡ өсөн Африканың демографик хәленә күҙ һалайыҡ. Беҙҙең эра башында Африкала 16-17 (ҡайһы бер күрһәткестәр буйынса 30-40) миллион кеше йәшәгәне билдәле. Артабан Африка халҡы 1600 йылда - 55, 1600-1900 йылдарҙа -110, 1950 йылда - 220, 1960 йылда - 275, 1970 йылда - 356, 1980 йылда - 475, 1990 йылда - 648, 2000 йылда - 784, 2007 йылда - 965 миллионға барып етә. Тимәк, 1950-2007 йылдар эсендә, 57 йылда, Африка халҡы 4,4 тапҡырға артҡан. Демографик шартлау феномены һаналған бындай күренеш тарихта тәүге һәм берҙән-бер тапҡыр ошо ҡитғала күҙәтелә. Әгәр ҙә алдағы йылдарҙа ошондай уҡ тенденция һаҡлана ҡалһа, йәғни бындағы халыҡтың үрсеү тепмы үҙгәрмәһә, 2050 йылда Африканың халҡы 4 миллардтан ашып китмәҫ тимә. Африка халҡының йылдам артыуына Европа ҡол биләүселәре лә булышлыҡ иткән. Алдараҡ әйтеүебеҙсә, мәҫәлән, Франция колонияһы булған осорҙа Алжир социаль-иҡтисади яҡтан Евразия дәүләттәре араһында алдынғылар рәтенә сыға.

Африканың сүллектә һәм донъяның иң эҫе урынында урынлашыуын иҫәпкә алғанда, ул тиклем халыҡты ашатыу ғына түгел, туйғансы һыу эсереү ҙә мөмкин булмаясаҡ ул саҡта. Шуға күрә Африка халҡының күпләп Европаға һәм Азияға ағылыуы яҡын киләсәктә күҙәтелеүе бар. Шулай буласаҡ та. Африка халҡы йыһанға барып һыйына алмаясаҡ бит инде. Был осраҡта Алжир, Марокко, Тунис халыҡтары инде иң беренсе нәүбәттә үҙҙәрен буйһондороусы таныштарына, диңгеҙ ашаһында иң яҡында ятҡан Францияға киләсәк. Улар былай ҙа әле үк Францияла тотош дәүләтте тәшкил итерлек һанға барып еткән. Демографтар һәм сәйәсмәндәр әйтеүенсә, алдағы йылдарҙа Европала африканлылар һәм азиаттар күпселекте тәшкил итә башлаясаҡ. Европа дәүләттәренең милли дәүләт булараҡ юҡҡа сығыуын ошо фактор ҙа билдәләре көн кеүек асыҡ. Гәзиттең алдағы 43-45-се һандарында "Яҡтылыҡ ҡайҙа, ҡеүәт тә шунда" тигән әйтем хаҡында һүҙ алып барғанда был проблемаға ентекле туҡталып үткәйнек инде. Францияла һәм Италияла булып ҡайтыусылар унда африканлыларҙың үҙҙәрен бик иркен тотоуҙары, урындағы халыҡта ҡыҫырыҡланыуҙан кәмһенеү комплексы-ксенофобия күренеше барлыҡҡа килеүе хаҡында һөйләп аптырата. Әйтәйек, шул уҡ Францияла йә Италияла йәмәғәт транспорттарына алжирҙар йә марокколар килеп инһә, европалылар үҙҙәрен уңайһыҙ хәлдә тоя, мөшкәйә башлай, бер мөйөшкә барып һырлыға.

Миҫал эҙләп алыҫ йөрөргә лә түгел инде. Рәсәй батшалығы ла, шул уҡ Франция кеүек, элек-электән үҙенең йәшәү ареалын киңәйтеү маҡсатында ерҙәр һәм илдәр яулаған. Яулауын яулаған да, тик бәндәгә бәндә булырға ярамағанлығын аңламағанға күрәлерме, хәҙерге Франция кеүек үк, элек яулаған илдәрҙән килеүселәрҙең, мигранттарҙың һәм гастарбайтерҙарҙың һөжүменә дусар булыры хаҡында уйлап та бирмәгән. Миҫалға үҙебеҙҙең Рәсәйҙәге ошоға оҡшаш күренештәрҙе алайыҡ. Урта Азия, Кавказ республикаларынан килеүселәр Рәсәй ҡалаларында үҙҙәрен ана ҡалай тота. Францияла һәм Италияла йәшәүсе африканлыларҙан һис тә кәм ҡыланмай. Арттырһа, арттырып ҡына ебәрәләр. Улар Рәсәйҙең иң эре ҡалаларында үҙ йолалары буйынса һауаға мылтыҡтан ата-ата туй үткәрә, барлыҡ йәмәғәтселек урындарында ла бер кемдән дә оялып та, тартынып та тормайынса, ҡолаҡты яра-яра үҙ телдәрендә аралаша, тотош йорттарҙы, кварталдарҙы, ауылдарҙы, баҫыу ерҙәрен, урмандарҙы, завод-фабрикаларҙы һатып ала.

Үҙҙәрендә тормоштоң ауыр булыуы, эш урыны булмауы, аҡсаһыҙлыҡ, әмәлһеҙлек кенә килтерәме икән уларҙы бында? Ай-һай, шулай микән? Эйе, донъяла "Бумеранг ҡануны" тигән яҙылмаған, әммә һәр ваҡытта ла тайпылышһыҙ үтәлә торған ҡанун бар. Бер генә ғәмәлең дә, ғәмәл генә түгел, әйткән һүҙең дә, һүҙең генә лә түгел, уйлаған уйың да эҙһеҙ үтмәй был донъяла. Бер ни ҙә эҙһеҙ үтмәй. Бындай саҡта урыҫтар "Барыһы өсөн дә түләргә тура килә", тиһә, беҙҙең халыҡта "Бәндәгә бәндә булма!" тиҙәр.

Бәндәгә бәндә булма! Ҡолға ҡол булма, йәғни тик Аллаһы Тәғәләнең ҡоло булырға яратылған кешене ҡол итә күрмә. Әгәр ҙә ошо ҡағиҙәне боҙһаң, киләсәктә ҡасандыр һин ҡол итеп тотҡандың балалары йә ейәндәре йә бүләрҙәре килеп, һинең балаларыңды, йә ейәндәреңде, йә бүләрҙәреңде ҡол итәсәк. Әйтемгә бына ниндәй оло фәлсәфә һәм йәшәү аҡылы һалынған. Үҙҙәрен ҡол итергә, колония яһарға теләүселәрҙең вариҫтарын, шулай итеп, үҙҙәренең ҡолдарының вариҫтары ҡол хәленә ҡалдыра. Беҙ мигрант, гастарбайтер тип атаусыларҙы, әлбиттә, иң беренсе нәүбәттә Аллаһы Тәғәлә йөрөтә. Ошо рәүешле Ул ҡол биләүсенең үҙен ҡол хәленә төшөрөп һынай, күрәһең.

"Ағиҙел" журналының быйылғы 1-се һанындағы "Әҙәп, әҙәбиәт - бер тамырҙан" тигән әңгәмәлә күренекле яҙыусыбыҙ, ил инәһе Мәрйәм Бураҡаева ошо әйтемгә Дауыт Юлтыйҙың "Ҡарағол" драмаһы миҫалына таянып аңлатма бирә: "Дауыт Юлтыйҙың "Ҡарағол" драмаһын алайыҡ. Драманың төп әрәсәһе - Ҡыраубикәнең һүҙҙәрендәлер, тип уйлайым һәм әҙәбиәт дәрестәрендә шулай тип аңлата ла торғайным. "Бәндәне бәндә көнөнә ҡалдырмаһын". Был иҫ китмәле фекер. Кешене кешегә ҡол итмәһен. Башҡорттоң быуаттар буйы ихтилалдарға күтәрелеүенең төп маҡсаты ла шул бит. Кешегә ҡол булмау, рухи азатлыҡ! Бына бит башҡорт әсәйҙәре уландарын ниндәй рухта тәрбиәләгән! Бына нисек тәрбиәләргә тейешбеҙ бөгөн дә. Тар ғына, бәләкәй генә маҡсаттар менән түгел. Ысын йәшәү таты, ысын йәшәү мәғәнәһе, ысын йәшәү бәхете рухи азатлыҡта - әҫәрҙең идеяһы..."

Мәрйәм апайҙың әйткәндәренә өҫтәп, тик шуны ғына әйтергә булалыр: тап ошо хәҡиҡәткә таянып көн иткән халҡыбыҙ бер кемгә лә ҡол булмаған, бер кемде лә ҡол итмәгән, бер кемдең дә ерен яулап алмаған. Аллаһы Тәғәлә тап шуның өсөн беҙҙе донъяла йәшәтә лә...

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

**(Аҙағы. Башы 51-се һанда).**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Мәскәүҙә Дәүләт Советы һәм Президент ҡарамағындағы Рәсәйҙең социаль-иҡтисади үҫешендә маҡсатлы күрһәткестәргә ирешеү мониторингы буйынса комиссияның берлектәге ултырышында ҡатнашты, уны Рәсәй Президенты Владимир Путин үткәрҙе, тип хәбәр иттеләр төбәк башлығының матбуғат хеҙмәтенән. Кәңәшмәнең төп темаһы - илдең социаль-иҡтисади үҫеше тураһында президент указдарын үтәү буйынса сараларҙы тормошҡа ашырыу. Мәғарифты үҫтереү, торлаҡ-коммуналь хужалыҡты модернизациялау һәм хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреү мәсьәләләре тикшерелде.

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов республиканың Баймаҡ районында булды. Эш сәфәре планына ярашлы, республика етәксеһе Баймаҡ ҡалаһына нигеҙ һалыуға 75 йыл тулыу һәм Баймаҡ ҡойоу-механика заводының 100 йыллығы айҡанлы тантаналарҙа ҡатнашты. Артабан республика Президенты Баймаҡ үҙәк ҡала дауаханаһының яңы инфекция корпусы бинаһын ҡараны. Инфекция корпусы бинаһы быйыл Республика адреслы инвестиция программаһы сиктәрендә төҙөлдө, был маҡсатҡа 28,2 миллион һум аҡса йүнәлтелде.

✓Өфө 2021 йылда XI Бөтә донъя уйындарын үткәреү хоҡуғына дәғүә итә. Ошо маҡсатта республика Хөкүмәте ҡарары менән "2021 йылғы XI Бөтә донъя уйындарын Белдереү комитеты" автономиялы коммерция булмаған ойошма төҙөлә. Республика исеменән уны ойоштороусы итеп БР Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министрлығы тәғәйенләнде. Ведомствоға Белдереү комитеты структураһы, штат расписаниеһы, тейешле хеҙмәткәрҙәр һаны буйынса тәҡдимдәр индерергә, шулай уҡ уның эшмәкәрлеген финанслау сығанаҡтарын билдәләргә ҡушылды.

✓БР Президентының ижади проекттарға ярҙамға гранттары күбәйҙе, ә дәғүә итеүселәр исемлеге киңәйҙе. БР Мәҙәниәт министрлығында аңлатыуҙарынса, хәҙер грантҡа театр, музыка, хореография коллективтары һәм киностудиялар ғына түгел, шулай уҡ һынлы сәнғәт вәкилдәре лә иҫәп тота ала. Бынан тыш, берәр миллион һумлыҡ дүрт грант өҫтәлде. Йәмғеһе 2014 йылда: 2 грант - 15-әр миллион һумлыҡ; 5 грант - 10-ар миллион һумлыҡ; 2 грант - 5-әр миллион һумлыҡ; 3 грант - 2-шәр миллион һумлыҡ; 4 грант - 1-әр миллион һумлыҡ буласаҡ.

**“Башинформ”дан.**

*ӘЙҘӘ, ЕҢЕҮСЕ БУЛАЙЫҠ!*

# ҮҘ-ҮҘЕҢ МЕНӘН КӨРӘШ - ИҢ АУЫРЫ

**Әйҙәгеҙ, тип еңеүсе булырға саҡырыу ташланым да, һиҫкәнеп ҡуйҙым: кемгәлер зыян эшләмәҫменме? Мине дөрөҫ аңларҙармы? Ғөмүмән, еңеү тигән һүҙҙең төп мәғәнәһен теүәл генә асып, аңлатып биреүсе табылырмы? Был тормошта иң ҙур еңеү нимә ул? Ошо һорауҙар менән кемгә мөрәжәғәт итәһең инде: еңеү тигән нәмәне үҙе татып ҡараған, өс тиҫтә йыл буйы еңеүҙе үҙ ҡулынан ысҡындырмаған шәхескә -Башҡортостан Республикаһының Милли көрәш һәм билбау көрәше федерациялары рәйесе, республиканың атҡаҙанған физик культура хеҙмәткәре, РФ спорт мастеры, көрәшсе Вәкил Искәндәр улы Ильясовҡа, әлбиттә! Һүҙ - еңеүсегә!**

- Баштан башлайыҡ. Мин йәшлегем сәскә атҡан ғына ваҡытта бер сәнәғәт предприятиеһына эшкә урынлаштым. Эш ауыр ғына - кискә ҡарай арып, арманһыҙ булып, ҡыл да ҡыбырҙатҡы килмәй ҡайтаһың. Ундай саҡта арлы-бирле тамаҡ ашап, йә өйҙә ятып, телевизор ҡарағы, йә, иптәш егеттәр, дуҫтар менән йәштәр өсөн ойошторолған берәй сарағa, йә төнгө клубҡа күңел асырға барғы килә. Ләкин мин үҙемдең бар көсөмдө бергә туплап, спорт залына юлланам. Бында ла еңел түгел - арыған, ауыртынған тәнде йүгертер, тимер-томор күтәртер өсөн аңың менән көрәшергә, уның логик яҡтан дөрөҫ тә һымаҡ күренгән дәғүәләрен кире ҡағырға тура килә. Шулай ҙа, күпмелер ваҡыт шулай көрәшә торғас, тәнгә ҡабаттан еңеллек килгәне һиҙелә: был тойғоно спортсылар һәм ауыл кешеләре генә беләлер, моғайын. Спортта ла, ауылда ла үҙеңде мәжбүр итеп эшләтергә тура килә, шунһыҙ, хәл юҡ...

Шулай итеп, көн дә эшемдән һуң үҙем өсөн генә тип көрәш менән шөғөлләнә торғас, Башҡортостан, Рәсәй кимәлендәге ярыштарҙа еңеүҙәр яулай башланым. Эшемдә күптәр минең спорт менән дуҫ булыуымды гәзиттәрҙән генә уҡып белгән икән. Ниндәйҙер кимәлдә танылыу яулаһам, ҙур ярыштарҙа беренсе урындар яулаһам да, хәҙерге ҡайһы бер егеттәр һымаҡ танауҙы юғарыға сөймәнем, элеккесә шөғөлләнеүемде дауам иттем. Шуға хәҙер ныҡлы итеп әйтә алам: дәғүәсене еңеү, ауырлыҡтарҙы аша атлауы анһат ул - үҙ-үҙеңде еңеүе, ихтыяр көсө тәрбиәләүе һәм рәхәтлектәр ҡамауында ирәймәй ары атлауы - тәүгеһенән ике-өс тапҡырға ҡыйыныраҡ. Был донъяла иң ҙур еңеүең - үҙ-үҙең менән көрәштә беренселек яулауың.

*АФАРИН!*

# АЛДЫНҒЫЛЫҠ - ӨФӨЛӘ!



**Өфө ҡала округы хакимиәтендә үткән оператив кәңәшмәлә Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Марат Мәһәҙиев хакимиәт башлығы Ирек Ялаловҡа бер нисә маҡтаулы бүләк - ике диплом һәм кубок тапшырҙы.**

2013 йылда Волга буйы федераль округында "Халыҡтың йәшәү эшмәкәрлеге хәүефһеҙлеген тәьмин итеү өлкәһендә иң яҡшы үҙидаралыҡ муниципаль берәмек органы" исеменә смотр-конкурс үткәрелгәйне. Шуның һөҙөмтәләре буйынса ҡырҡтан ашыу ҡала округтары араһында Өфө ҡалаһы лайыҡлы рәүештә беренсе урын яуланы.

Бөгөн баш ҡалабыҙҙа был йүнәлештә тотош саралар комплексы бойомға ашырыла. "Сипайлово" микрорайонында һыу баҫыуға ҡаршы дамба төҙөлөшө тамамланып килә, ғәҙәттән тыш хәлдәр тураһында халыҡҡа хәбәр итеү системаһы киңәйтелә һәм ҡайтанан төҙөлә, ҡойма ямғыр канализацияһы селтәре яңыртыла, алыҫ ятҡан биләмәләрҙә янғынға ҡаршы яңы часлар асыла.

Үтеп барған йылдың көҙөндә Өфөнөң "Коткарыу хеҙмәте 112" Мәғлүмәт-диспетчер хеҙмәте "Волга буйы федераль округында иң яҡшы ҡала округы берҙәм дежур-диспетчер хеҙмәте" конкурсында ҡатнашып, номинация еңеүсеһе булды. Был ваҡиға Мәғлүмәт-диспетчер үҙәге үҙенең 15 йыллығын билдәләгән осорҙа айырыуса ҡыуанаслы булды. Бәләкәй генә, аҙ билдәле структуранан көнөнә граждандарҙан 20-ләгән мөрәжәғәт ҡабул итеүсе тулы ҡеүәтле подразделениеға әүерелде. Уның дежур операторҙары 6 миллиондан ашыу шылтыратыу ҡабул итте.

Бынан тыш, Марат Мәһәҙиев Башҡортостан һәм Өфө ҡалаһының ижтимағи-сәйәси тормошонда һәм уның иҡтисади үҫешендә әүҙем ҡатнашлығы өсөн Ирек Ялаловҡа БР Президентының Рәхмәт хатын тапшырҙы.

*...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ*

# ШЫРШЫ ҠУПШЫ КЕЙЕНГӘН,

## беҙгә ҡунаҡҡа килгән...

**Өфө ҡалаһы был көндәрҙә мөғжизәле әкиәт иленә оҡшап тора: көрт баҫҡан урамдары йәйғор төҫөндәге уттар балҡыуынан тағы ла серлерәк, яҡтыраҡ, матурыраҡ күренә. Баш ҡала майҙандарында шыршы ҡаласыҡтары ҡалҡып сыҡты.**

Баш ҡала балалары өсөн Яңы йыл байрамдары ҡала Советында "Ҡыш бабайға хат" хәйриә конкурсында ҡатнашҡандарҙы бүләкләү тантанаһынан башланды. Унда 100 бала ҡатнашты һәм төрлө бүләктәргә лайыҡ булды.

Шунан һуң, 23 декабрҙә баш ҡалабыҙҙың Химиктар мәҙәниәт һарайында республикабыҙҙың 800-гә яҡын уҡыусыһы өсөн Президент шыршыһы байрамы гөрләп үтте. Унда район, республика, Рәсәй конкурстарында, олимпиадаларҙа, фестивалдәрҙә, спорт ярыштарында еңеүсе булған уҡыусылар, шулай уҡ күп балалы һәм социаль яҡтан аҙ тәьмин ителгән ғаиләләрҙә тәрбиәләнеүселәр, хәрби бурыстарын үтәгәндә һәләк булған эске эштәр органдары хеҙмәткәрҙәренең балалары ҡатнашты.Президент исеменән ҡотлау һүҙҙәрен уларға Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Лилиә Ғүмәрова еткерҙе."Һеҙҙең тырышып, тик яҡшы билдәләргә генә уҡыуығыҙ киләсәктә яраҡтан республикабыҙҙың тағы ла матурыраҡ һәм ҡеүәтлерәк булыуына ярҙам итәсәк", тине ул һәм Яңы йылдың һәр бер балаға, һәр йортҡа бәхет алып килеүен теләне. Ҡотлау һүҙҙәренән һуң балалар әкиәт иленә сәйәхәт ҡылды, Ҡыш бабайҙы ҡаршыланы, уның менән бергәләшеп йырланы, бейене. Байрам һуңында һәр балаға бүләккә йомшаҡ уйынсыҡтар, тәмлекәстәр, китаптар таратылды.

24 декабрҙә булып үткән Баш ҡала шыршыһында меңдән ашыу уҡыу алдынғыһы, олимпиада һәм конкурстар еңеүселәре, йәш спортсылар ҡатнашһа, Социаль шыршыға меңдән ашыу етем һәм ата-әсә ҡарауынан мәхрүм балалар саҡырылғайны. Уларҙы бында Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов ҡотланы.

Ҡыш бабай сәләмәтлек мөмкинлектәре сикләнгән балаларҙы ла онотманы. Улар өсөн ҙур уйын һәм әкиәт итеп сәхнәләштергән был байрамда балалар үҙҙәре лә әүҙем ҡатнашты, бүләктәр алды һәм ҡыуанышып таралышты.

Яңы йыл алды байрамдары ошо көндәрҙә Бөрө ҡалаһында "Керәшен һыуыҡтары" фестивале тулҡынында дауам итә.



# Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✔Фәйзи Ғәскәров исемендәге Дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле республика Президенты грантына лайыҡ булған программаны күрһәтте. "Ғәскәров мираҫы" концертына Фәйзи Ғәскәров ижад иткән, һирәк башҡарылған һәм хәҙерге тамашасыға билдәһеҙ хореографик номерҙар индерелгән. Программаға "Өс туған", "Кейәү егете", "Төньяҡ амурҙары", шулай уҡ Ф.Ғәскәров Башҡортостандың Урал аръяғы төбәге үҙешмәкәр коллективтары өсөн ҡуйған композициялар - "Тәпән" һәм "Беҙҙең байрам" ингән. Был номерҙар академия ансамбле бейеүселәре өсөн реконструкцияланған.

✔Башҡорт дәүләт аграр университетында инженер профилендәге кафедралар мөдирҙәренең Бөтә Рәсәй семинар-кәңәшмәһе үтте. Семинарҙа Рәсәйҙең төрлө төбәктәрендәге юғары уҡыу йорттарынан 40-тан ашыу кафедра мөдирҙәре һәм инженер дисциплиналары уҡытыусылары килде. Кәңәшмә барышында Башҡорт агроуниверситетында, шулай уҡ Мәскәү, Ҡаҙан, Новосибирск, Пенза һәм Томск аграр вуздарында уҡыу процесына инновацион белем биреү технологияларын һәм студенттарҙы уҡытыуҙың яңы методикаларын индереүҙең ыңғай тәжрибәһе билдәләнде.

✔Яңы йыл байрамдары һәм раштыуа каникулдары осоронда Куйбышев тимер юлы станцияларынан "Федераль пассажирҙар компанияһы" асыҡ акционерҙар йәмғиәте поездарының өҫтәмә рәүештә 130-ҙан ашыу рейсы тәғәйенләнәсәк, тип хәбәр итә тимер юл ведомствоһы матбуғат хеҙмәте. Улар 2013 йылдың 25 декабренән 2014 йылдың 13 ғинуарына тиклем осорҙа йөрөйәсәк. Мәскәү йүнәлешендә 125 рейсҡа 23 поезд тәғәйенләнде, Санкт-Петербург йүнәлешендә - 9 рейсҡа дүрт поезд.

✔Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Рәмил Исҡужинды БР Ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре министры вазифаһынан бушатып, республика Йәмәғәт именлеге ведомство-ара советы секретары итеп тәғәйенләү тураһында указға ҡул ҡуйҙы. БР Ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре министрлығы башлығы вазифаһын башҡарыу элек был ведомство министрының урынбаҫары вазифаһын биләгән Рәфит Йәғәфәровҡа йөкмәтелде.

*ӘЙҘӘ, ЙОЛА ТОТАЙЫҠ!*

# ҠАҘ ӨМӘҺЕ...

## ауыл тормошоноң бер биҙәге

**Ҡаҙ көтөүҙең отошло яҡтары бик күп: уның мамығынан күпереп торған мендәрҙәр, йомшаҡ түшәктәр яһап һөйөнәһең, ҡыш буйы татлы итенән күп төрлө аш-һыу әҙерләп, ғаиләңде ҡыуандыраһың. Етмәһә, ҡаҙҙың майын дауа булараҡ та ҡулланырға була: ҡышҡы һыуыҡтарҙа бит, ҡолаҡ өшөһә, ҡаҙ майын һөртөү, һалҡын тейгәндә компресс яһау бик файҙалы.**

Ауыл кешеһе өсөн ҡыш - ул һынау ғына түгел, ә йәй буйы бил бөгөп, әсе тирендә түккән хеҙмәтеңдең татлы емештәрен тирер мәл - һуғым байрамдары, ҡаҙ өмәләре һәм туйҙар мәле. Күңелле мәшәҡәттәргә тулы был осорҙо һәр кем түҙемһеҙлек менән көтөп ала. Һалҡын ҡыштың тәүге ҡары яуыу менән ауылда байлыҡ, муллыҡ һәм яҡты өмөттәр алып килгән ҡаҙ өмәләре башлана.

Был өмә эш кенә түгел, ә йәштәр өсөн үҙенә күрә тормош һабағы ла - йоланы еренә еткереп башҡара белеү, ололарҙан хеҙмәт нескәлектәрен өйрәнеү, үҙеңде күрһәтеү, матур итеп аралашыу сараһы ла.

Халҡыбыҙҙың ошо күркәм йола байрамын үҫеп килгән йәш быуынға өйрәтеп ҡалдырыу маҡсатында Темәс ауылының тарихи-мәҙәни үҙәге коллективы уңған ғаиләләрҙең береһе Илгиз һәм Миңһылыу Әхмәровтарҙың ихатаһында "Ҡаҙ өмәһе" байрамы ойоштороҙо. Матурлыҡҡа ғашиҡ, йәнтөйәген биҙәп йәшәргә тырышҡан егәрле хужаларҙың әллә ҡайҙан балҡып ултырған күркәм йортона байрамса кейенгән килендәр, хужабикәнең әхирәттәре иртә менән килеп тә етте. Улар ҡыштың беренсе байрамы менән ҡотлап, ҡаҙҙарҙың күп булыуын, йыл да уңып тороуын, хәләл малдарының ризыҡҡа яҙыуын теләп, изге теләктәр әйтеп, өлкәндәрҙең фатихаһын алып, берҙәм эшкә лә тотондолар.

- Һәр бер эштең үҙенә күрә тәртибе була, еренә еткереп башҡара белеү - уңғанлыҡтың билдәһе ул, - тиеп ҡаҙ йолҡоу серҙәре менән бүлеште Фәүзиә Бәхтийәр ҡыҙы. Гөлнара Кәрим ҡыҙы балаларҙы ҡаҙға бәйле һынамыштар менән таныштырып үтте:

- Ҡаҙҙы көтөү ҡайтҡанда баҫырға ултыртһаң, себеше күп була.
- Себештәр бергә йыйылһа, ямғыр яуа.
- Ҡаҙ һыңар аяҡта торһа - һалҡынға.
- Ҡаҙ ҡаңғылдаһа- йылы килә, ҡарға ҡаңғылдаһа - ҡайғы килә.
- Ҡаҙ һыңар аяғын ҡанат аҫтына тыҡһа, көн һыуытыр.
- Ҡаҙ томшоғон шаҡылдатһа, һыуыта.

Ҡаҙандағы эҫе һыуға сумдырып алынған ҡаҙҙар таҙарып, боҫрап, өҫтәлгә - өмәселәр алдына һалынды. Гармун моңона эйәреп, йырлай-йырлай күмәкләп ҡаҙ йолҡҡанда ваҡыттың үткәне лә, эштең күплеге лә һиҙелмәй ул. Өмәле эш — ырамлы эш шул, күмәкләгәс, һә тигәнсе атҡарып та сыҡтылар. Эш араһында өлкән апайҙар төрлө һынамыш, ырымдар тураһында ла иҫкә төшөрөп үтте. Етеҙ, сос килендәрҙең тилбер ҡулдарына күҙ теймәһен өсөн башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарына көмөш йөҙөк, ҡуш беләҙектәр тағыу фарыз һаналған, тип билдәләнә береһе. Икенсеһе иһә, аяҡ-ҡулдары, быуындары һыҙламаһын өсөн борон ҡулдарҙы ҡаҙ мамығына тыҡҡандар, тине һәм һамаҡлап та күрһәтте:

*Күңелегеҙ аҡ мамыҡтай,*
*аҡтан-аҡ та, саф булһын.*
*Аяҡ-ҡулың һыҙламаһын,*
*өй шатлыҡ менән тулһын.*

Өмәгә килгән күрше ҡыҙҙар Вилиә һәм Линара өлкәндәрҙән ҡаурый һыҙырырға, тәпәй таҙартырға ихлас өйрәнде.

Ҡатын-ҡыҙҙар таҙа, матур итеп йолҡолған ҡаҙҙарҙы көйәнтәләренә элеп, ағын һыуҙа сайырға тип, йырлай-йырлай Һаҡмар буйына юлландылар. Юл буйына ла, ағын һыуға ла ҡаҙ ҡаурыйы һибеп:

*Киләһе йылда ла уңығыҙ,*
*ап- аҡ булып йөҙөгөҙ!*
*Йылға буйлап күмәкләшеп,*
*һирпелешеп йөрөгөҙ!* -

тиеп матур теләктәр әйтелде. Ҡаҙҙар кеүек сылбырҙай теҙелешеп һыу буйынан йырлап ҡайтып килгән килендәрҙе күреү - үҙе бер күркәм тамаша ине.

Өйҙә инде өмә хөрмәтенә әҙерләнгән байрам табыны көтә ине барыһын да.

**Лилиә ИШБАЕВА.**
**Баймаҡ районы.**

*ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!*

# ХАҠЛЫ ЯЛДА ЛА...

## ҡулдар буш тормай

**Бөгөнгө көндә студенттар ҙа, хаҡлы ялда булыусылар ҙа стипендияларына һәм пенсияларына өҫтәп аҡса эшләргә тырыша. Мин дә төрлө ысулдарҙы уйлап ҡараным, төрлө юлдарҙы һынаным, ләкин күңелемә оҡшағаны булманы. Ләкин эҙләгән - таба, тигәндәй, үҙемдең яйыма ла тура килгән, пенсияма ҡуш булырлыҡ табыш та килтергән әмәлде таптым.**

Уңған хужабикәләр буш ваҡыттарында бейәләй-ойоҡ, кофта һәм башҡа төрлө бәйләмдәр менән була. Мин үҙем дә ҡул эше менән булышырға яратам һәм шуға күрә әлеге шөғөлөмдең бер ауырлығы ла юҡ. Ҡала ерендә йәшәгәс һәм хаҡлы ялда булғас, ваҡыт яғынан да ҡыйынлыҡ кисермәйем.

Өҫтәмә аҡсаны мин йыуғыс бәйләп эшләйем. Ҡала баҙарҙарында, ғөмүмән, урамда төрлө төҫтәге һәм ҙурлыҡтағы йыуғыстар күп һатыла. Кемдер хатта һатҡан ерендә лә бәйләп ултыра. Электән уларҙың хеҙмәтен күреп йөрөһәм дә, үҙем йыуғыс бәйләп һатыуға сығарырға йөрьәт итмәнем. Ләкин бер көндө интернет селтәрендә эш эҙләгән саҡта йыуғыс бәйләүселәр эҙләгән фирманың иғланына юлыҡтым. Фирма вәкилдәре менән осрашып, килешеү төҙөнөм. Уға ярашлы, мин бәйләгән бер йыуғысты фирма, ҙурлығына, формаһына, ҡулланылған төҫтәренә ҡарап, 25-40 һумға һатып ала. Шулай итеп, айлыҡ килемем уртаса 4-6 мең һум тәшкил итә. Был сумманы алыу өсөн күп кенә бәйләргә кәрәк. Әлбиттә, күҙҙәр ҙә тала, ҡулдар ҙа арый, бил дә ауыртып китә, ләкин ҡулға аҡса алған саҡта бар ауырлыҡтар ҙа онотола. Мәҫәлән, ошо юл менән аҡса эшләп, күптән түгел ял йортонда рәхәтләнеп ял иттем. Элек иһә минең 5600 пенсияма ял йортона барыу хаҡында хыялланып та булмай ине.

Бына ошо минең бәләкәй генә "бизнесым". Бәлки, кемдер был ысулды ҡолағына һалыр, күҙенә элер һәм бер аҙ аҡса эшләү өсөн ваҡыт табыр. Йыуғыс бәйләү серҙәрен иһә интернет селтәре ярҙамында төшөнөргә мөмкин.

**Сәлимә ЙӘНБИРҘИНА.**
**Өфө ҡалаһы.**




## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Баш ауыртыуынан

❖ Күкбаш (синеголовник). 2 ҡалаҡ ваҡланған үләнгә ярты литр ҡайнар һыу ҡойоғоҙ, ярты сәғәт төнәтегеҙ, һөҙөгөҙ. Көнөнә өс тапҡыр - ашарҙан ярты сәғәт алда, стакандың биштән бер өлөшө күләмендә йылытып эсергә кәрәк.

❖ Баш ауыртыуының сәбәбен белмәһәгеҙ, түбәндәге процедураны эшләгеҙ. Ике ҡулығыҙҙы ла терһәгегеҙгә тиклем ҡайнар һыуға тығығыҙ. Һыуҙың эҫелеге үҙегеҙ түҙә алғанға тиклем булырға тейеш. Ауыртыу ебәргәнсе ҡулдарҙы һыуҙа тотоғоҙ. Кәрәк булһа, тағы ла ҡайнар һыу өҫтәп тороғоҙ. Маңлайға сей картуф киҫәктәре бәйләү ҙә яҡшы һөҙөмтә бирә. Баш гел ауыртып торһа, картуф һуты һығып эсергә була. Уны көнөнә 1 тапҡыр, стакандың дүрттән бер өлөшө күләмендә эсергә.

❖ Кәбеҫтә япраҡтарын сикәләргә, елкәгә, маңлайға һалырға. Был дауаны эске йәрәхәт алғанда, имгәнгәндә, тире янғанда ҡулланырға була.

❖ 1 ҡалаҡ һары мәтрүшкә үләненә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 15 минут ҡайнатырға, һөҙөргә, көнөнә 3 тапҡыр стакандың дүрттән бер өлөшө күләмендә эсергә.

❖ Баш ауыртыуы гел ҡабатланып торһа, стакандың дүрттән бер өлөшө күләмендә яңы һығылған картуф һуты эсергә була.

❖ 1 балғалаҡ ваҡланған андыҙ тамырына 1 стакан һалҡын һыу ҡойоп, 10 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә, көнөнә 4 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда стакандың дүрттән бөр өлөшө күләмендә ҡабул итергә.

❖ Яңы һығылған ҡара ҡарағат һуты ла ярҙам итә. Уны көнөнә 3 тапҡыр стакандың дүрттән бер өлөшө күләмендә эсергә.

❖ 1 ҡалаҡ клевер үләнен бер стакан ҡайнар һыуҙа төнәтергә, яртышар стаканлап көнөнә 3 тапҡыр эсергә.

❖ Ер еләге, мүк еләге йәки балан ашау файҙалы.

❖ Лимон ҡабығын аҡ өлөшөнән таҙартып, эске яғы менән сикәләргә һалырға.

**Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.**

БАҠЫЙ БЫУАТ ЙОЛАҺЫ

## БАШҠОРТТАРҘЫҢ... дауалау һәм ҡурсалау магияһы

### Өҙләк имләү

Башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлек картотекаһында Бөрйән районында яҙып алынған өҙләк имләү һамағы бар. Унда берәй ҡатын баланан һуң өҙләк булып ауырыһа, бер баш, бер кинйә бала икәүләп:

*- Инәй, ни алаһың?*
*- Өҙләк алам.*
*- Инәй, ни эсәһең?*
*- Өҙләк эсәм,*

- тип өсәр мәртәбә һорап сығалар.

Мәләүез районында ла "өҙләк төйөү"енә бәйле махсус һамаҡ яҙып алынды. Был һамаҡтың йөкмәткеһе буйынса өҙләк осоп йөрөй. Уны башҡа ауырыу эйәләре кеүек һыуға, елгә, тупраҡҡа ҡыуалар икән. Сағыштырығыҙ:

*1, 2, 3, 4, 5, 6, 7, 8, 9 - тупраҡҡа,*
*1, 2, 3, 4, 5, 6, 7 - елгә, һыуға,*
*1, 2, 3, 4, 5 - бөтһөн, китһен,*
*1, 2, 3 - осһон, китһен,*
*1 - бер ҙә ҡалмаһын.*

Көл менән бергә, һамаҡтан күреүебеҙсә, "өҙләк төйөү" процедураһында һандар магияһы ла ҡулланыла.

Шулай итеп, им-том итеүҙә бер генә ысул ҡулланылмаған. Ҡорот әсереү, банка һалыу менән бер рәттән, көл төйөү, махсус һамаҡ әйтеү, һандар магияһына, баш бала менән кинйә бала көсөнә мөрәжәғәт итеү ҙә өҙләк имләгәндә һәр ауылда тип әйтерлек ҡулланылған.

Үрҙә әйтеп киткәнсә, баланан һуң ҡырҡ көнгә тиклем һаҡланмаған ҡатын-ҡыҙ енләнеп тә ауырый. Шуның өсөн ҡырҡы үткәнсе баланы ғына түгел, әсәнең үҙен дә һаҡлау мотлаҡ.

Хәҙерге башҡорт телендә өҙләк һүҙе ике мәғәнәлә ҡулланыла: 1) бала артынан ҡабаттан ауырыу; 2) йүнәлеп барғанда берәй сәбәп менән ҡабаттан ауырыу. Әгәр ҙә икенсе мәғәнәлә ҡабат ауырыу сәбәбе булып һалҡын тейҙереү, ауыр эш башҡарыу торһа, беренсеһендә - ауырыу эйәһе Өҙләктән тотоуы тора. Ошонан сығып, беренсе мәғәнәлә әйтелгән өҙләгеүҙе боронғораҡ тип әйтеп була.

**Өҙләк мунсаһы.** Бала-саға ауырып киткәндә, өҙләккәндә мунсала махсус им-том ысулдары ҡулланылған. Бындай мунса "өҙләк мунса" тип аталған. Был мунсаға барғанда әбейҙәр "өҙләк сабырға барам" тип әйтә торған булғандар.

Бына әпсен таҡмағы (ул бала сапҡанда әйтелә):

*(Фәлән-фәләндең) улы (ҡыҙы) өҙләккән,*
*Өс йөҙ алтмыш тамырҙары өҙләккән,*
*Өс йөҙ ҡыр(ы)ҡ һөйәктәре айырылған.*
*Шуларҙы бергә йыям,*
*Шифа булһын, им булһын!*
*Иртәнге өҙләктәрҙе сабам,*
*Көндөҙгө өҙләктәрҙе сабам,*
*Яңы өҙләктәрҙе сабам,*
*Ит өҙләктәрен сабам,*
*Һеңер өҙләктәрен сабам!*
*Айҙар ҡайтты - ҡайт,*
*Көндәр ҡайтты - ҡайт,*
*Минең ҡулдарым түгел,*
*Имсе-йомсо ҡулдары,*
*(Ғәйшә, Фатима ҡулдары),*
*Имсе-йомсо, Бер Хоҙайым яҙҙамсы...*

Яңы ғына бала тыуҙырған ҡатын, көн элек ҡуҙғалып донъя мәшәҡәттәренә тотонһа, өҙләгә. Уны шулай имләйҙәр:

- Нимә эшләйһең? - тип һорай бәреү имсенән.
- Өҙләк өҙләкләйем, - ти имсе. Шулай өс тапҡыр ҡабатлана.

Шунан имсе өҙләккән ҡатындың күлдәк итәгенең ос ягына көл төйнәп бәйләй. Ҡатын аяғына баҫмайынса, көлдө сисергә ярамай.

**Фирҙәүес ХИСАМИТДИНОВА.**
**(Дауамы бар).**

БАЛАЛАР ҠОРО

# БАЙРАМДАР НИҢӘ КӘРӘК?

## Балаларҙы ҡыуандырыу өсөн, әлбиттә!

**Беҙ, ололар, һәр йылды Яңы йыл байрамы алдынан бала сағыбыҙҙы хәтеребеҙгә төшөрөп, ул ваҡытта байрам килеүен көтөүҙең үҙе бер оло ваҡиғаға әүерелеүен һағынып бер булабыҙ. Ни өсөн байрам бала саҡта ғына килә кеүек икән? Бөгөнгө балалар байрам көтөү шатлығын тоямы? Ошо һәм Яңы йыл байрамына ҡағылышлы башҡа һорауҙарға Өфө ҡалаһының 249-сы балалар баҡсаһы тәрбиәләнеүселәре Ильяс Илбәков, Алтынай Юлдашбаева, Ләйсән Таймасова, Байрас Сәлихов яуап бирә.**



**➔ Балалар баҡсаһы коридорын шаулатып, нимәгә әҙерләнеп йөрөйһөгөҙ ул? Берәй төрлө байрам буламы әллә?**

**Алтынай:** Ҡар яуғас, Яңы йыл килә. Беҙ шуға йырҙар йырларға өйрәнәбеҙ.

**Ләйсән:** Беҙгә Ҡыш бабай, Ҡарһылыу киләсәк. Арыҫлан ағайымдарҙың мәктәбенә улар күптән килде инде. Ағайымдар улар алдында сығыш яһаны.

**Ильяс:** Ҡыш бабай менән Ҡарһылыу кем ул, тиһегеҙме? Уларһыҙ Яңы йыл булмай, улар беҙгә бүләк тарата. Кәнфиттәр, тағы тәмле нәмәләр. Шул кәнфиттәрҙе өйгә алып ҡайтаһың да, бөтәһен дә һыйлайһың.

**Байрас:** Ҡыш бабайҙың туны аҡ була. Ҡарһылыуыныҡын белмәйем.

**➔ Байрамдар беҙгә нимә өсөн кәрәк ул?**

**Байрас:** Ҡыш бабай беҙгә бүләк бирһен өсөн кәрәк!

**Ләйсән:** Балаларҙы ҡыуандырыр өсөн байрамдар кәрәк. Беҙ былай ҙа гел шатланып ҡына йөрөйбөҙ инде ул. Байрам булһа, тағы ла ҡыуанып китәбеҙ, йырлайбыҙ, көләбеҙ, хатта ҡотороп алабыҙ.

**Алтынай:** Әсәйҙәр байрамда өйҙә генә була, эшкә бармай.

**Ильяс:** Мин байрамдар мәлендә өләсәйгә ҡайтып китәм дә, сана шыуам. Бында ла ҙур-ҙур, оҙон-оҙон тауҙарҙан шыуырға була, тик ауылда тышта уйнауы ҡыҙығыраҡ. Ә минең атайым боҙҙан төрлө йәнлектәр, Ҡыш бабайҙар эшләй белә!

**Алтынай:** Минең атайым утын яра ғына белә шул.

**Ләйсән:** Байрамда кешеләрҙе телевизорҙан президент ҡотлай.

**➔ Кем һуң ул президент? Ни эшләп ул барыһын да Яңы йыл менән ҡотлай икән?**

**Ләйсән:** Ни эшләп тип, байрам булғанға ҡотлай. Ул бит беҙҙә иң төп кеше! Юҡ, балалар баҡсаһында түгел, ә ҡалала! Беҙгә, дуҫтарым, тип өндәшә.

**Ильяс:** Мин уны күргәнем бар, бер ағай ул.

**Алтынай:** Бүләктәр бирмәйме икән ул?

**➔ Бүләктәр ҙә биргәс, байрам менән дә ҡотлағас, президент Ҡыш бабай кеүекме икән? Улар бер-береһенән нисек айырыла тип уйлайһығыҙ?**

**Алтынай:** Президент - Ҡыш бабайҙың ярҙамсыһы. Ул беҙгә бүләктәр тарата.

**Байрас:** Гәзиттәрҙе бит президент сығара. Ул шунда эшләй.

**Ләйсән:** Улай булғас, улар берберенһенә оҡшамаған инде. Берәүһе гәзит эшләй, икенсеһе бүләктәр тарата.

**Ильяс:** Юҡ, улар бөтөнләй оҡшаш түгел. Костюмдары ла төрлө бит уларҙың. Президент Өфөлә йәшәйҙәр ул.

**➔ Ҡыш бабай ҡайҙан килә һуң улай булғас?**

**Ильяс:** Алыҫтан. Йәй буйы килә лә килә. Ҡар яуғас, килеп етә.

**Алтынай:** Юҡ, ул санаға ултырып килә.

**Ләйсән:** Санала бүләктәр ятһа, уға урын да ҡалмайҙыр инде... Ҡарт ҡына, һыуыҡ ҡына бабайҙы! Ни эшләп уны Ҡыш бабай тип атайҙар икән? Ни өсөн ҡар яуа икән? Быны үҙенән һорармын әле.

**➔ Яңы йыл байрамы бүләктәрһеҙ үтмәгәнлеген аңланым инде. Һеҙ Ҡыш бабайҙан ниндәй бүләктәр көтәһегеҙ?**

**Алтынай:** Миңә Ҡыш бабай Рапунцель алып килә. Нисек Рапунцелдың кем икәнен белмәйһегеҙ? Бөтөнләй йәнһүрәттәр ҡарамайһығыҙмы әллә? Ул - оҙон сәсле ҡыҙыҡай! Шундай уйынсыҡ һорағайным.

**Ильяс:** Мин машина һораным. Ҡыҙыл машиналарҙы яратам, шуға ул ҡыҙыл төҫтә булһын.

**Байрас:** Миңә роботтар оҡшай. Быйыл байрамға әсәйем робот костюмы әҙерләй миңә, мин шуны кейәм.

**Ләйсән:** Мин уға хат яҙғанда ҡанатлы пони һәм йәнһүрәттә күрһәтелгән ҡурсаҡ һораным. Ҡыш бабай йәнһүрәт ҡарамай, ә бына бүләктең ниндәйен алырға икәнлеген белә, сөнки беҙ уны үҙебеҙҙең хатыбыҙҙа һәйбәтләп һүрәтләйбеҙ, аңлатабыҙ.

**Алтынай:** Ҡарт бабай йәнһүрәт ҡарап ултырмай инде.

**Байрас:** Өлкәндәр кино ғына ҡарай. Минең атайым менән әсәйем дә. Мин дә кино ҡарарға яратам, мин дә ҙур шул хәҙер.

**Ильяс:** Бөтөн малайҙар ҙа хоккей ҡарай, ҡысҡырып тороп ҡарайһың, миңә бик оҡшай былай. Атайым да, ағайым да ярата хоккейҙы.

**Байрас:** Үҫкәс, мин хоккейсы булам. Ә һин, Ильяс, хоккей уйнағың килмәйме?

**Ильяс:** Юҡ. Мин футболсы булам.

**Байрас:** Улай булғас, мин ике көн хоккейсы, ике көн футболсы булам. Ҡалған көндәрен ял итермен.

**➔ Яңы йылда өлкәндәргә һәм балаларға нимә теләр инегеҙ?**

**Алтынай:** Хыялдар тормошҡа ашһын, тип әйтәләр бит.

**Ләйсән:** Сөнки ул теләктәрҙе Ҡыш бабай тормошҡа ашыра. Ә Ҡыш бабай Яңы йылда ғына килә, шуға ла теләктәрҙе ошо ваҡытта теләргә кәрәк.

**Байрас:** Бәләкәс кенә гномдар ярҙам итәләр инде Ҡыш бабайға был ваҡытта. Әтеү башы әйләнеп китер ине.

**Ильяс:** Балалар һәр ваҡыт тыңлаусан булһын, өлкәндәр ҙә!

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Илебеҙ тыныс, башлыҡтарыбыҙ, дуҫтар, тип, байрам менән ҡотлап тора - байрам кәйефе өсөн тағы нимә кәрәк һуң?! Бәләкәс әңгәмәселәребеҙ әйтеүенсә, Яңы йылда бар теләктәр ҙә тормошҡа ашһын була, шуға изге теләктәребеҙ араһында үҙебеҙгә ҡуберәк ихласлыҡ һәм бала саҡта булған байрам тойғоһоноң күңелдәребеҙгә әйләнеп ҡайтыуын теләйек.**

**Ләйсән НАФИҠОВА**
**әңгәмәләште.**

✓ *Тупраҡ менән һаҡһыҙ мөғәмәлә иткәндәрҙең үҙҙәрен дә, балаларын да фажиғә һағалай. Ваучерын бер шешә араҡыға алыштырыусылар холҡондағы кешеләр күбәйҙе.*

ВӘЛИДИ ХАҠЫНДА ҺҮҘ



**Әхмәтзәки Вәлиди тураһындағы иҫтәлектәрҙе тыуған илгә ҡайтарыу өсөн күп көс һалған шәхесебеҙ, философия фәндәре кандидаты Әмир ЮЛДАШБАЕВ менән "Вәлиди хаҡында һүҙ" рубрикаһы аҫтында алып барылған әңгәмәләребеҙҙе дауам итәбеҙ.**

# АҠТАМЫРҘАЙ ХАЛҠЫБЫҘ...

## Алтынсы һүҙ: "Унының мираҫы бөгөнгө менән ауаздашмы?"

**Һорау: Әхмәтзәки Вәлиди шәхесе йылдар үткән һайын олпатлана һәм баҙыҡлана торған шәхес. Хатта ки 1990 йылдағы Вәлидигә ҡарағанда, 2013 йылғы Вәлидиҙең донъя сәйәсәте өсөн әһәмиәте ҙурыраҡ кеүек. Ни өсөн тигәндә, Рәсәйҙә федератив мөнәсәбәттәр әле булһа урынлашып бөтмәй. Ошо юҫыҡтан сығып ҡарағанда, Әхмәтзәки Вәлидиҙең ғилми һәм сәйәси мираҫы менән бөгөнгө көн мәсьәләләрендә ниндәй ауаздашлыҡ бар?**

- Кешенең шәхси яҙмышынан тыш, ул ҡалдырған мираҫтың да яҙмышы була. Ысынлап та, вафат булғандан һуң ҡыҫҡа ваҡыт эсендә исеме тарихтан юғалғандар ҙа күп. Шулай уҡ ваҡыт үтеү менән әһәмиәте арта барыусылар ҙа байтаҡ. Мәҫәлән, Платон кеүектәр меңәр йылдар үткән һайын әһәмиәтлерәк була бара. Әлбиттә, мин быны Вәлидиҙе шундай уҡ бейеклеккә ҡуйырға теләүҙән әйтмәйем. Ләкин Әхмәтзәки Вәлиди мираҫы XXI быуатта ла ҙур ҡыҙыҡһыныу уятыусы, бәхәстәр тыуҙырыусы, яңы ғилми тикшеренеүҙәргә этәреүсе сығанаҡ булып ҡаласаҡ. Рәсәй, Урта Азия тарихсылары әле булһа ла унының ғилми мираҫынан үҙенсәлекле юлдар таба, уларҙағы тормош ғалим фекерҙәре артынан тәгәрәй. Рәсәй яҙмышы төрки халыҡтарының, дәүләттәренең яҙмышы менән тығыҙ бәйле. Әммә был бәйләнештәр тоталь глобалләшеү шарттарында ныҡ ҡатмарлаша бара. Беҙҙең эштәргә, үҙ-ара мөнәсәбәткә башҡа бик күп һәм ҡеүәтле геосәйәси көстәр ҡыҫыла. Тарихтың ошондай яңы сифатының әһәмиәтен ғалим һуңғы көндәренә тиклем бик яҡшы аңлай. Был унының хеҙмәттәрендә сағылыш таба һәм унының фекерҙәре, әҫәрҙәре актуаллеген юғалтмай йәшәп килә.

Үкенескә ҡаршы, инҡилаптар дәүерендә милли мөнәсәбәттәр мөхитендә яһалған байтаҡ хаталарҙы хәҙерге реформаторҙар һуңғы 15-20 йыл дауамында тағы ла тупаҫыраҡ итеп ҡабатланы. Бының иң сағыу миҫалы Чечня булды. Ундағы хәл бер ни тиклем кимәлдә 1917-1920 йылдарҙағы Башҡортостанды хәтерләтә. Ныҡ ҡыйырһытылған, Себергә ҡыуылып, кире ҡайтҡан халыҡты көс менән тынысландырырға маташыу Рәсәй мәнфәғәтенән сығып ҡарағанда бик ҙур хата, сөнки тотош Төньяҡ Кавказды юғалтыу ҡурҡынысы барлыҡҡа килде. Был Рәсәй өсөн стратегик яҡтан бик хәүефле.

Башҡортостан, Татарстан һәм башҡа республикаларға килгәндә, Федераль үҙәк менән мөнәсәбәттәрҙе көйләп, халыҡтарыбыҙҙың көнкүрешен, мәҙәниәтен, әхлағын һаҡлау һәм яҡшыртыу өҫтөндә эшләүҙән дә изге бурыс юҡ.

*Төҙәтеү.* *"Аҡтамырҙай халҡыбыҙ" мәҡәләһенең 51-се һанда баҫылған өлөшөндә тәүге бағанала "Марсель Ғафуров" тигәнде "Мадриль Ғафуров" тип уҡырға кәрәк.*

## Етенсе һүҙ: "Халҡыбыҙҙың киләсәгенә ышаныуҙың нигеҙе ниҙә?"

**Һорау: Әхмәтзәки Вәлиди Туған "Башҡорт халҡына хушлашыу хаты"нда хәҙерге көнөбөҙгә күрәҙәлек ҡылып, киләсәгебеҙгә күҙ ташлап, халҡыбыҙҙы аҡтамырға тиңләй. Унының башҡорт халҡының киләсәгенә ҡарата оптимистик ҡарашта булыуын ниндәй дәлилдәр менән нығыта алаһығыҙ? Һеҙҙә лә ундай инаныу бармы?**

- Әхмәтзәки Вәлиди "Хәтирәләр"ендә был хатты фекерҙәштәренә ебәреүе хаҡында телгә ала. Беҙ уны "Башҡорт халҡына хушлашыу хаты" тип, китаптың икенсе өлөшө сыҡмаҫтан алда уҡ, айырым гәзит формаһында нәшер иткәндә шулай атағайныҡ. Мәғәнәһе буйынса ул, ысынлап та, шулай яңғырай, ләкин ғалим уны бөтә халыҡҡа төбәп яҙам, тип әйтмәй.

Киләсәккә ҡарата оптимист булмаҫтай сәбәп юҡ. Башҡортостандың, бөтә Рәсәйҙең киләсәге бар икән, унда йәшәгән халыҡтарҙың да киләсәге бар. Ләкин был булған көнүҙәк мәсьәләләрҙе, ҡырҡыу проблемаларҙы күрмәү тигән һүҙ түгел. Беҙҙең бөтә мең йыллыҡ тарихыбыҙ ер, тупраҡ мәсьәләһе менән тығыҙ бәйле. Әхмәтзәки Вәлиди етәкләгән, Шәйехзада Бабич һәм башҡа күптәр ҡорбан булған милли хәрәкәттең асылы ла тупраҡ мәсьәләһенән ғибәрәт. Мәсьәлә әле лә шулай булып ҡала. Милекте хосусилаштырыу процесы, завод-фабрика-предприятиеларҙан үтеп, уларҙың байтағын пыран-заран иткәндән һуң, тупраҡҡа килеп етә башланы. Был бик етди тарихи мәл. Хәҙер райондарҙағы, ауылдарҙағы һәр бер аңлы-зиһенле кеше был хаҡта уйланырға, мәсьәләнең етдилеген аңлап етмәгән һәр туғанына, дуҫына, танышына аңлатырға бурыслы. Тупраҡ менән һаҡһыҙ мөғәмәлә иткәндәрҙең үҙҙәрен дә, балаларын да фажиғә һағалай. Ваучерын бер шешә араҡыға алыштырыусылар холҡондағы кешеләр күбәйҙе. Ул ҡағыҙ киҫәген дә бит аҡыл менән файҙалана алғандар булды, ләкин һирәк. Ә ер мәсьәләһе күп тапҡырға мөһимерәк һәм ҡурҡынысыраҡ. Был тәңгәлдә Вәлиди "һөйкөмлө шағирыбыҙ" тип атаған Шәйехзада Бабичтың һүҙҙәре бөгөн бик урынлы:

*"Тупраҡ башҡорт бәхетелер,*
*Бәхетебеҙҙең тәхетелер.*
*Тупраҡ алһаҡ, ҡалабыҙ,*
*Бүтәнсә юҡ сарабыҙ.*
*Тупраҡ китһә, һау бул, донъя,*
*Өҙәлмәктер самабыҙ".*

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**яҙып алды.**

*ӘЙҘӘ, ИМАНЛЫ БУЛАЙЫҠ!*

# ҺӘР БЕР ҒӘМӘЛ...
## ниәткә бәйле

**Бисмилләһир-рахмәнир-рахим. Аллаға шөкөр, Ғайса ғәләйһиссәләмдең тыуыуы менән иҫәпләнгән тәҡүим буйынса 2013 йыл да аҙағына килеп етте. Яңы 2014 йылға аяҡ баҫабыҙ. Аллаһы Тәғәлә киләсәк йылдарыбыҙҙы мөбәрәк һәм хәйерле ҡылһа ине.**

Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең (саллаллаһу ғәләйһис сәләм) бер хәҙисендә, әгәр ҙә кешенең ике көнө бер тигеҙ дәрәжәлә булһа, ул ҙур отолошта булыр, тип әйтә. Бында көн генә түгел, бәлки йылдар алышына. Шуның өсөн дә яңы йылға аяҡ баҫҡан ваҡытыбыҙҙа алдыбыҙға яңы бер фекер, яңы пландар, яңы бер ниәт ҡуйырға тейешбеҙ. Сөнки икенсе бер хәҙисендә Бәйғәмбәребеҙ, һәр бер ғәмәл ниәткә бәйле, тип әйтә.

Ислам дине халҡыбыҙға иҫәпһеҙ ниғмәт биргән, 1100 йылдан ашыу дәүерҙә ул милләтебеҙҙең тәрбиә мәктәбе булып торған. Беҙҙе тура юлға күндергәне, хәләлде харамдан айырырға өйрәткәне, ғилемгә юл асҡаны, дөрөҫ тәрбиәне күрһәткәне өсөн беҙ Аллаһы Тәғәләгә рәхмәтле булырға тейешбеҙ. Исламдың рухи тамырҙарын, тәрбиәһен өйрәнергә һәм уға эйәреп йәшәргә ынтылыуыбыҙ ошо рәхмәтебеҙҙең сағылышы буласаҡ та инде. Шулай уҡ дин Ватаныбыҙҙы һаҡлауҙа ла ҙур өлөш индергән. Сөнки тыуған иленә һөйөү ҙә ислам менән нығытыла, "Ватанды һөйөү имандың бер өлөшө", тип әйтелә мөбәрәк бер хәҙистә. Ғаилә тәрбиәһе лә быуаттар дауамында иман, ислам рухында алып барылған. Шуға күрә лә яңы йылға аяҡ баҫҡанда башҡа милләттәр менән дуҫлыҡ ептәрен өҙмәйенсә, динебеҙҙе, рухи ҡиммәттәребеҙҙе өйрәнергә һәм көндәлек тормошобоҙға индерергә бурыслыбыҙ.

Оҙаҡламай Раббиғәл әүүәл айы башлана. Был айҙа кешелеккә нур биреүсе һәм уны наҙанлыҡ һаҙлығынан сығарыусы ғәзиз Бәйғәмбәребеҙ тыуған. Мәүлит шәриф айында беҙ һөйөклө Аллаһ рәсүленең тормошон өйрәнәбеҙ, изге Ҡөрьән Кәрим китаптарын уҡыйбыҙ. Унының өммәтенән булыуыбыҙға ҡыуанып, уға оҡшарға тырышабыҙ.

Иманда, исламда йәшәйек, хәләл ризыҡ менән туҡланайыҡ, меңәр йылдар тапалған дөрөҫ юлдан ситләшмәйек. Балаларыбыҙҙы иманлы, илһөйәр итеп тәрбиәләйек. Меңәр йылдар килгән рухыбыҙҙы дауам итеүселәр булһындар. Динебеҙ менән бергә әкиәттәребеҙҙе лә, хикәйәләребеҙҙе лә, йырҙарыбыҙҙы ла, бейеүҙәребеҙҙә лә, сәнғәтебеҙҙе лә киләһе быуындарға еткерһендәр. Туған телен аңлаусы һәм үҙенең милләтен һөйгән шәхестәр булып үҫһендәр. Тел - бөйөк ниғмәт ул. Аллаһы Тәғәлә "Мин һеҙҙе төрлө милләт итеп яраттым", ти икән, тимәк, телде һаҡлау ҙа иманды һаҡлауҙың бер өлөшө ул. Иманлы булайыҡ, йәмәғәт!

**Нурмөхәмәт НИҒМӘТУЛЛИН,**
**мөфтөй, Башҡортостан мосолмандары Диниә назараты рәйесе.**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР
## Йорт производствоһы

Ҡыҙыл төҫкә буяу өсөн ҡыҙыл тамырҙың киптерелгән һәм төйөлгән тамырын һыуҙа ҡайнатып, уға һелте иретмәһе ҡушҡандар. Һелтене көл ҡайнатып яһағандар. Ҡыҙыл тамыр ҡайнатмаһы менән һелте ҡатнашмаһы сағыу ҡыҙыл төҫ барлыҡҡа килтергән; ошо ҡатнашмаға алдан серетмә һабаҡтарында әсетелгән йөн һалынған. Йөн серетмәле һыуҙа тиҙерәк әсеһен өсөн уға ҡайһы ваҡыт саҡ ҡына әсеүташ өҫтәгәндәр. Ҡайһы бер урындарҙа йөндө ҡыҙыл тамыр төнәтмәһендә ҡайнаталар. Ҡайһы бер ваҡыт йәшел төҫ алыу өсөн серетмә буяуын артышботаҡтары менән алмаштыралар.

Йөндө һары төҫкә буяу өсөн һыйыр теле үләненең һабаҡтары ҡайнатыла, һуңынан уға сирек сәғәткә алдан серетмәлә әсетелгән йөн һалына; буяу һеңгәс, йөн төнәтмәнән алына һәм киптерелә.

Башҡорттарҙың туҡыу станогы - *урын* йәки *көрөҫ тараҡ* бик ябай. Унының нигеҙен үҙ-ара арҡыры таяуҙар менән нығытылған дүрт бағана тәшкил итә. Артҡы, бейегерәк бағаналар араһына *айыубаш* урынлаштырыла һәм уға нигеҙ урала. *Тараҡ* менән *көрөҫ* станок өҫтөндәге арҡыры ағасҡа *ҡалтырса сағырға* эленә. Тараҡ нәҙек ағас сыраҡтарҙан яһала, көрөҫ, буҫтау йәки балаҫ һуғыуға ҡарап, ептән йәки ҡылдан тора. Туҡыма уралған *борғоса* (алғы вал) махсус *тыйғысы* менән нығытыла. Һоҫа, дөйөм ҡабул ителгәнсә, һәр саҡ ағастан яһала.

Туҡыусылыҡ менән башҡорттарҙа тик ҡатын-ҡыҙ ғына шөғөлләнгән. XVIII быуат һуңында, И. Г. Георги әйтеүенсә, уларҙың киндере тар һәм тупаҫ була. Киндерҙе тарманан һәм бик һирәк етендән, *һөлгө, таҫтамалдарҙы* сағыу төҫтәге һатыу ептәренән, шулай уҡ төрлө ашъяулыҡтар, шаршауҙар һ.б. һуғалар. Шул уҡ станокта, бары тик тараҡ менән көрөҫтө генә алмаштырып, буҫтау, балаҫ һуғалар. Йөн балаҫтар (нигеҙҙә кәзә йәки кәзә-һарыҡ йөндәрен тигеҙ итеп ҡушып) һәр ерҙә һуғыла, шул уҡ ваҡытта Урал аръяғында уларҙы күпләп һуҡҡандар һәм ул һәр башҡорттоң өйөндә булған, әммә көнбайышта, киреһенсә, улар бик һирәк осраған. XIX быуат һуңында урыны менән башҡорттар рустарға хас булғанса, сепрәк балаҫтар һуға башлаған. Бигерәк тә улар төньяҡ-көнбайышта киң таралған, көнсығышта һирәк осрай, ә Үҙәк Башҡортостанда һәм көнсығышта бөтөнләй осрамай.

Башҡорттарҙың кәсепселеге бары тик үҙ халҡының ихтыяжын ҡәнәғәтләндереү маҡсатын ғына ала. Башҡорттар етештергән предметтар һатырға сығарылмай, был йорт кәсепселегенең береһе лә, ҡайһы бер райондарҙа септә ҡапсыҡ һуғыуҙан тыш, һөнәр булып тормай. Бары тик бүрәнә йәки таҡта әҙерләү, дегет ҡайнатыу һәм ыҫмала ағыҙыу һөнәр булып һанала һәм Төньяҡ Уралдың үҙәк өлөшөндәге башҡорттарҙың төп йәшәү сығанағы булып тора.

**Һәр бер йылды тематик нарыҡлау йолаһы үҙгәртеп ҡороу йылдарында Башҡортостанда башланып киткәйне, булһа кәрәк. Яҡшы ғәҙәт тиҙ таралып китте, һәр йылды берәй темаға бағышлау йолаһын Рәсәй күтәреп алды һәм был йәмәғәтселек, власть органдары иғтибарын билдәле бер маҡсатҡа йүнәлтеүҙә, ошо маҡсат-ниәттәрҙе бойомға ашырыу өсөн бөтә көстө туплауҙа үҙенсәлекле сараға әүерелде. Быйылғы 2013 йыл Тирә-яҡ мөхитте һаҡлау йылы исеме менән үтте. Әйткәндәй, төрлө тематик йылдар кеүек үк, Тирә-яҡ мөхитте һаҡлау йылы ла бер нисә ҡабат урап килде инде. Экология мәсьәләһенең ил түгел, бөтөн донъя кимәлендә бик киҫкен тороуы бер кемгә лә сер түгел бөгөн. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, беҙҙә экологик мәҙәнилек кимәленең ифрат түбән булып ҡала килеүен үкенес менән билдәләй белгестәр. Нилектән шулай һуң? Кешелектең үҙе ултырған ботаҡҡа үҙе балта сабыуына тиң түгелме ни был? Редакциябыҙҙың түңәрәк ҡорона һөйләшергә саҡырылған профессиональ экологтар - география фәндәре кандидаты, М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының экология һәм тәбиғәттән файҙаланыу кафедраһы доценты Азат Нуриәхмәт улы ҠОТЛӘХМӘТОВ менән география фәндәре кандидаты, Башҡорт дәүләт университеты доценты Инбир Мөхәмәт улы ЯППАРОВ ошо һәм башҡа мәсьәләләр, шулай уҡ Тирә-яҡ мөхитте һаҡлау йылын йомғаҡлау буйынса үҙҙәренең фекерҙәре менән уртаҡлаша.**

# ҮҘЕБЕҘ УЛТЫРҒАН балта

▸ **Һәр бер йылға тематик атама биреп нарыҡлау үҙен аҡлаймы? Әлбиттә, был һәйбәт сара, ләкин ул урыны менән "кампания сире"нә килтермәйме икән - нисек уйлайһығыҙ? Мәҫәлән, йыл үтеп китә, уны икенсе исемдәге йыл алмаштыра. Ә үтеп киткән йыл проблемалары һаман бер урында тороп ҡалыуын дауам итә...**

**Азат Ҡотләхмәтов:** Тематик йылдар үткәреү йолаһы бик кәрәк, тип иҫәпләйем, сөнки иғлан ителгән йылға һәр яҡлап: дәүләт, хөкүмәт, йәмәғәтселек, һәр айырым кеше-граждан тарафынан иғтибар йүнәлтеү, һәр кемде уйланырға мәжбүр итеү, кешелә быйыл ҡуйылған мәсьәлә юҫығында, мәҫәлән, тәртип мәҙәнилеге тәрбиәләү һ.б. ғәмәлдәрҙе, былар диңгеҙҙәге тамсы ише генә тойолһа ла, бик мөһим һәм кәрәкле тип әйтер инем. Ошо саралар, исмаһам, кемдеңдер күңелендә, йөрәгендә осҡон ҡабыҙып, киләсәктә ул тәбиғәткә һаҡсыл ҡарай башлаһа ла файҙа буласаҡ бит. Унан һуң, бындай йылдарҙа маҡсатлы рәүештә барыбер ниндәйҙер эштәр башҡарыла, уларҙы бойомға ашырыуға өҫтәмә аҡса бүленә, төрлө саралар планы, эш программалары ҡабул ителә. Был өлкәлә ошоға тиклем эшләнмәгән эштәр башҡарыла, ҡыҫҡаһы, был ниндәйҙер кимәлдә бурыстарҙы ҡайтарыу йылы ла була, тип ҡабул итәм мин үҙем. Йыл үтеп киткәндә лә проблемалар, эйе, ҡала, сөнки бер йыл эсендә генә әллә нимәләр атҡарып та булмай, бигерәк тә мәсьәләгә беҙҙәгесә мөнәсәбәт булғанда. Беренсенән, быйылғы йыл темаһына ҡағылғанда, экология мәсьәләһенең беҙҙә бик ныҡ сәйәсиләштерелгән булыуы күҙгә ташлана. Икенсенән, һүҙҙең бик күплеге, ә эштәрҙең аҙ булыуы йәнде көйҙөрә. Профессиональ эколог булараҡ, проблемаларҙы эстән беләм. Быны һис тә пафос тип ҡабул итмәгеҙ: ошо эшкә бөтөн ғүмеремде бирҙем, әле отставкала булһам да, ул минең йәшәү рәүешем булыуҙан туҡтағаны юҡ, шуға күрәлер ҙә, аныҡ эш урынына туҡтауһыҙ лығырҙауҙар, аҡыл һатыуҙарға тыныс ҡарауы ҡыйын. Көн-төн тылҡып та эштең бер ҙә алға бармауынан экология темаһы бәҫһеҙләнә, ә тәбиғәтебеҙ - ул хәбәр һата ла, беҙгә өндәшә лә алмай - әкренләп, өнһөҙ генә фәкирләнә, юҡҡа сыға һәм күрәләтә һәләкәткә дусар ителә бара...

**Инбир Яппаров:** Күп йәһәттән Азат Нуриәхмәт улының фекеренә ҡушылам һәм өҫтәп тағы шуны әйтеп китергә теләйем. Дөрөҫ, маҡсатлы йыл булараҡ, ниндәйҙер эштәр башҡарыла ул, тик улар күңелгә ҡәнәғәтлек бирмәй, сөнки ана шул эштәр эргәһендә яңынан-яңы проблемалар сығып тора. Башҡа күп тематик йылдар кеүек үк, экология йылын үткәреү бик кәрәк, уны һис тә "кампанейщина"тип әйтергә ярамай, ләкин ҡайһы берәүҙәр быны тап шулай ҡабул



итә икән, тимәк, беҙ башҡарған эштәрҙе күрһәтә белмәйбеҙ. Халыҡ был өлкәлә ниҙәр эшләнеүе тураһында хәбәрҙар түгел. Әлбиттә, эш экологтарға ғына бәйле булһа, улар әллә күпме эштәр башҡарған булыр ине, ләкин күп нәмә иҡтисадҡа, сәнәғәткә бәйле: халыҡты ашатырға, кейендерергә кәрәк, шул уҡ ваҡытта эколог үҙ талаптарын ҡуя, тирә-яҡ мөхитте бысратаһың, ти, предприятиеларҙың зыянлы матдәләр бүлеп сығарыуын кәметергә ҡуша. Ошо йәһәттән мин был ведомстволарҙың эше бер ҡанат аҫтына алынып, мәҫәлән, төбәк етәксеһе тарафынан көйләнергә тейештер, тип уйлайым.

Маҡсатлы йыл иғлан итеүҙең тағы бер уйланып бөтмәгән яғы, тип әйтер инем: ниндәй темаға йыл иғлан ителеүҙе беҙ кәмендә бер 5-6 йыл алдан белергә тейешбеҙҙер, юғиһә, йыл башланып китә, ә бюджеттан ошо тармаҡ өсөн бүленгән аҡса бик оҙаҡ күсерелмәй, ә саралар үткәрергә, эштәр башҡарырға кәрәк. Шулай итеп, тәүге квартал үтеп тә китә. Аҙаҡ, йыл ахыры яҡынлаша башлаһа, үҙләштереп өлгөрмәгән аҡсаны ҡайҙа итергә белмәйбеҙ. Хәтерләһәгеҙ, совет осоронда биш йыллыҡтар иғлан ителә ине. Икенсе төрлө әйткәндә, был ысын мәғәнәһендә планлы эш өлгөһө булған. Матур пландар ҡабул ителә һәм улар мотлаҡ үтәлә торғайны. Әйткәндәй, Карл Маркстың "Капитал"ында бик яҡшы яҙылған планлы эшләү хаҡында. Беҙ уны оноттоҡ, әлбиттә, ә бына сит илдәрҙә ул һәр бизнесмендың өҫтәл китабына әйләнде.

▸ **Әгәр кеше экология мәсьәләләре менән тейешенсә шөғөлләнмәһә, уны ҡәҙерләмәһә, һаҡламаһа, ахыр сиктә, яңынан аяҡҡа баҫыр өсөн тәбиғәт үҙе кешелекте һәләкәткә дусар итеп, ҡонон ҡайтара, тигән фәлсәфә йәшәй. Һеҙ шуға нисек ҡарайһығыҙ?**

**Азат Ҡотләхмәтов:** Бындай ҡараш бигүк дөрөҫ түгел, әлбиттә. Әгәр ҙә производство эшмәкәрлеге һөҙөмтәһенең тирә-яҡ мөхиткә йоғонтоһо тәбиғәттең үҙ-үҙен аяҡҡа баҫтырырлыҡ тәбиғи көстәре кимәленән артып китһә, тәбиғәттә тарҡалыу процестары башлана: ер - уңдырышһыҙ сүллеккә, йылға-күлдәрҙең һыуы эсергә яраҡһыҙға әйләнә йә ҡороп бөтә. Ә былай, дөйөм алып ҡарағанда, һәр төрлө стихиялы бәләләр: ер тетрәүҙәр, көслө ҡойондар, ташҡын, һыу баҫыуҙар һ.б., ысынлап та, түҙемлеге сигенә еткән тәбиғәттең кешене иҫкәртеүе, сигнал һымаҡ та ҡабул ителә: "Эй, кеше, ни ҡыланаһың, туҡта, юғиһә, мин тағы ла ҡурҡынысыраҡты күрһәтә алам һиңә", - тигән кеүек. Быны кешенең аҡылһыҙ ғәмәлдәренән тәбиғәттең үҙ-үҙен яҡларға ынтылыуы тип тә ҡарарға була. Тәбиғәт кешене үлтермәй, юҡ уның ундай сифаты, ә үҙе һәләкәткә дусар була һәм шуның менән "үс ала" кешелектән. Иҫләгеҙ әле, Силәбе өлкәһендәге Ҡарабаш биләмәһен: планетаның "ҡара нөктәһе" тип йөрөтәләр уны. Йөҙ йыл буйы эшләп торған металлургия заводының "эшмәкәрлек" һөҙөмтәһе шундай: был тирәләге бөтә нәмә - ер, һыу, һауа ҡап-ҡара һәм унда бер ниндәй үҫемлек ҡалмаған, үҫмәй ҙә.

***Әгәр ҙә производство эшмәкәрлеге һөҙөмтәһенең тирә-яҡ мөхиткә йоғонтоһо тәбиғәттең үҙ-үҙен аяҡҡа баҫтырырлыҡ тәбиғи көстәре кимәленән артып китһә, тәбиғәттә тарҡалыу процестары башлана: ер - уңдырышһыҙ сүллеккә, йылға-күлдәрҙең һыуы эсергә яраҡһыҙға әйләнә йә ҡороп бөтә. Ә былай, дөйөм алып ҡарағанда, һәр төрлө стихиялы бәләләр: ер тетрәүҙәр, көслө ҡойондар, ташҡын, һыу баҫыуҙар һ.б., ысынлап та, түҙемлеге сигенә еткән тәбиғәттең кешене иҫкәртеүе, сигнал һымаҡ та ҡабул ителә: "Эй, кеше, ни ҡыланаһың, туҡта, юғиһә, мин тағы ла ҡурҡынысыраҡты күрһәтә алам һиңә", - тигән кеүек. Быны кешенең аҡылһыҙ ғәмәлдәренән тәбиғәттең үҙ-үҙен яҡларға ынтылыуы тип тә ҡарарға була. Тәбиғәт кешене үлтермәй, юҡ уның ундай сифаты, ә үҙе һәләкәткә дусар була һәм шуның менән "үс ала" кешелектән.***

Элек шунда йәшәгән, эшләгән кешеләрҙең 3-сө быуынын тикшереп ҡарағанда уларҙың хромосома кимәлендә үҙгәрештәргә тарыуы һәм әлеге быуындарының аҡыл яғынан бик артта ҡалғанлығы асыҡланған.

**Инбир Яппаров:** Тәбиғәт ҡонон ҡайтара, тигәндән, ысынлап та, әгәр беҙ антропоген ғәмәлдәребеҙ менән мауығып китһәк, бер аҙҙан мотлаҡ шуның эҙемтәләрен күрә башлайбыҙ. Тәүҙә ҡайҙан ниндәй ҡурҡыныс янағанын һиҙмәйбеҙ ҙә әле, аҙаҡ сәбәптәрен эҙләйбеҙ һәм яңынан-яңы проблемалар килеп сығыуын күрәбеҙ. Әле бына яҙҙан бирле Башҡортостанда ҡайын урмандары ауырый башланы. Мәғлүм булыуынса, һуңғы йылдарҙа ҡайын урманы ҡырҡылманы бит, сөнки ағас эшкәртеү сәнәғәте юҡҡа сыҡты, күп райондарҙа халыҡҡа утын да кәрәкмәй башланы - газ яғалар бит инде. Был нимәгә килтерҙе: бына хәҙер уны ҡырҡырға кәрәк буласаҡ, тик инде санитар таҙартыу маҡсатында. Шуны әйтергә итәм: беҙ тәбиғәт байлыҡтарын файҙаланырға тейешбеҙ, ул шуның өсөн тәғәйенләнгән дә, ләкин - тейешенсә генә!

Үткән быуаттың аҙаҡтарында, 90-сы йылдарҙан башлап, ауыл хужалығы юҡҡа сыҡты. Һөрөнтө ерҙәр буш ятып ҡалды, уларҙы урман баҫа башланы. Был бер яҡтан ҡарағанда, һәйбәт һымаҡ. Тик был урман ҡаралмаған, тәрбиәләнмәгән, стихиялы рәүештә үҫә бирә. Ана шундай урманда ҡарағай орлоғо төшһә, ул сәсеп үҫтергән кеүек түгел, ә тәбиғәт закондары буйынса үҫәсәк. Ҡараһаҡ, бөгөн әлеге һөрөнтө ерҙәрҙә ҡарағай өҫтөнә ҡарағай үҫә башлаған. Әгәр ул 3 метр оҙонлоҡҡа етһә, артабан бындай шарттарға яраҡлашыуҙан туҡтай, уға тәрбиә кәрәк, шунһыҙ ул бында артабан үҫә алмай, ауырый башлай. Ә беҙ уны һиҙмәйбеҙ, ваҡытында күрмәй ҡалабыҙ. Ауыл хужалығы бөлгәйне, ниндәй уңдырышлы, матур ерҙәребеҙ ҡарауһыҙ тороп ҡалды. Ер - иң ҙур байлығыбыҙ, уны һаҡлап ҡалыу өсөн бөгөн беҙгә элек колхоздар уңышлы файҙаланған өс баҫыу системаһын (пар ерҙәре, туңға һөрөү, ялға ҡалдырыу) кире ҡайтарырға кәрәктер, тием. БР Ер һәм милек мөнәсәбәттәре министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, республика ерҙәренең 40 проценты - федераль, 44 проценты - Башҡортостан һәм 16 проценты муниципаль милеккә ҡарай. Ошолай итеп ерҙәрҙе бүлгеләү генә лә экология проблемаларын хәл итеүҙә ҙур кәртә булып тора, сөнки был өс хужаның береһе "күрмәй", икенсеһе "ишетмәй", өсөнсөһө белергә лә теләмәй. Ә шулай ҙа, минеңсә, ер кемдеке булыуға ҡарамаҫтан, уға мөнәсәбәт берҙәм контролгә буйһондоролорға тейеш.

▸ **Өҫтәүенә, республикабыҙ биләмәләрендә сит ил компаниялары һәм предприятиелары ла арттандан-арта бара. Берҙәм контроль булмаған өсөн дә ситтекеләр беҙҙең ерҙәрҙән һәм ресурстарҙан мөмкин тиклем аҙыраҡ сығымдар менән мөмкин тиклем күберәк файҙа, килем алырға тырыша, ә экология мәсьәләләренә, йәғни үҙҙәрен байытҡан, туйындырған ер-һыуыбыҙға, халыҡса әйткәндә, ашаған табаҡтарына төкөрөп китә...**

*✓ Хоҡуҡтарыбыҙҙы ҡайғыртҡанда бурыстарыбыҙ хаҡында ла оноторға ярамай. Тирә-яҡ мөхитте һаҡлауҙы һәр кем үҙенән башларға тейеш. Тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш ғаиләлә, унан ары мәктәптә тәрбиәләнә.*

# БОТАҠҠА... сапмайыҡ

**Инбир Яппаров:** Мине иң ныҡ борсоғаны - эсәр һыуыбыҙҙың көндән-көн, йылдан-йыл эсергә яраҡһыҙлана барыуы. Быны Өфө миҫалында ғына ла асыҡ күрергә була: эсәр һыуыбыҙ III категориянан яйлап ҡына IV категорияға күсте. Республикабыҙҙың тәбиғәт парктарының береһе тип ғорурланған Ҡандракүлдең һыуы бөгөн эсергә яраҡһыҙ. Бер ваҡыт 1988 йылда инглиз телендә баҫылып сыҡҡан китаптың тәржемә варианты ҡулға килеп эләкте. Унда шундай мәғлүмәттәргә юлыҡтым: Мәскәүҙе эсәр һыу менән 8 һыуһаҡлағыс тәьмин итә, шуларҙың фәҡәт береһе генә донъя стандарттарына яуап бирә, тип табылған. Шул осорҙа бөтә ил буйынса таҙартыу ҡоролмаларынан сыҡҡан һыуҙарҙың шартлы рәүештә ни бары 2 генә проценты таҙа булған. Был, аңлауығыҙса, 1988 йыл мәғлүмәттәре. Ә бөгөн ана шул күрһәткес күпмегә яҡшырған, тип уйлайһығыҙ? Ни бары 2 процентҡа! Илдәге бөтөн таҙартыу ҡоролмаларынан үткән һыуҙың 4 процентын ғына таҙа тип әйтә алабыҙ. Беҙҙең Башҡортостанда ла шундай уҡ хәл, әлбиттә.

**Азат Ҡотләхмәтов:** Беҙҙең Ҡариҙел йылғаһы, Аллаға шөкөр, таҙараҡ әле ул. Өфөнөң Төньяҡ һыу ҡоролмаһы Черниковканан алып Үҙәк баҙарға тиклем бик ҙур участканы тәьмин итә. Беҙҙең "Водоканал"предприятиеһы Рәсәйҙә иң алдынғыларҙан иҫәпләнә. Тик шуныһы әрнетә: Ҡариҙелдән алынған һыу торбаларҙан ҡулланыусы кранына килеп еткәнсе йылға һыуынан да бысрағыраҡ булып сыға, сөнки торбаларҙың эсе бик бысраҡ, улар тиҫтәләрсә йылдар буйы таҙартылмай. Эсәр һыуыбыҙ ГОСТ талаптарына яуап бирерлек булһын өсөн уны йорттарға килтереүсе торбалар тутыҡмай торған ҡоростан йә иһә бик юғары сифатлы башҡа төрлө таҙа металдан булырға тейеш. Минең бер экспресс-прибор бар, крандан килгән һыуҙы тикшереп ҡарайым: дөрөҫөн әйткәндә, ул эсергә яраҡһыҙ. Республикала иң таҙа һыу ҡайҙа, тип һораһағыҙ, ул Аҫҡын менән Нуриманда, тип әйтә алам.

Ә бына көнбайыш Башҡортостанда эсәр һыу бөтөнләй ҡалманы, тиһәң дә була. Экология министрлығы Туймазыға, мәҫәлән, Ҡандракүл яғынан торба һуҙҙы, хәҙер Октябрьскийға үткәрергә йыйына. Былар бөтәһе лә нефтселәрҙең "хеҙмәт тырышлыҡтары" һөҙөмтәһе. "Башнефть" ойошмаһын Башҡортостан экологияһын һаҡлау өсөн аҡса һалырға мәжбүр итеп ҡара! Зарарлы матдәләр сығанағы булып таҙартыу саралары үткәрелмәгән күпме скважина ултыра унда! Федераль органдар беҙҙең иң ҡеүәтле предприятиеларҙы алды, беҙҙең тирә-яҡ мөхитте иң ныҡ бысратыусылар ҙа улар: экологияға сыҡҡан зарарлы бысраҡтарҙың 70 проценты улар намыҫында. Ғәмәлдәге закондар буйынса, Рәсәй Федерацияһы субъекты булараҡ, беҙҙең республиканың үҙ биләмәһендә тирә-яҡ мөхитте иң ныҡ бысратыусы нефть химияһы һәм нефть эшкәртеүсе һәм башҡа предприятиелар өҫтөнән дәүләт экологик надзор булдырыуға вәкәләтлеге юҡ. Әйткәндәй, хәлдәр ошолай дауам итһә, киләсәктә кешелек эсәр сөсө һыуһыҙ тороп ҡалыуы бик ихтимал. Хоҙай ҡушмаһын, әгәр ошо быуатта һуғыштар була ҡалһа, ул беренсе сираттағы стратегик ресурс - сөсө һыу өсөн барасаҡ. Әле үк, ана, күрмәйһегеҙме - АҠШ Байкалға яҫҡына. Йәнәһе лә, Байкал - Ер йөҙөндәге барлыҡ кешелектең байлығы. Шуға күрә лә беҙ берҙәм булырға тейешбеҙ, айырыуса йәмәғәтселек һәм власть кимәлендә хәл ителәһе мәсьәләләрҙә. Тағы бер мәсьәлә- тирә-яҡ мөхитте һаҡлау өсөн бюджеттан бүленгән аҡса күләме көлгө килмәгәндә лә көлкө тыуҙырырлыҡ: Башҡортостан Республикаһында тирә-яҡ мөхитте һаҡлауға тупланған сығымдар күләме дөйөм бюджеттың ни бары 0,3 (!) процентын тәшкил итә. 0,5 процентта түгел хатта. Ә бөтөн донъяла экологияға аҡса йәлләмәйҙәр: норма буйынса ул бюджеттың 7 процентын тәшкил итергә тейеш. Аҡсаға әйләндергәндә, беҙҙең 0,3 процент йәмғеһе 250 миллион һум була инде. Ошо аҡсаға экологияны һаҡлап буламы?

**▸ Тап Тирә-яҡ мөхитте һаҡлау йылында йәмәғәтселектә бик ҙур ризаһыҙлыҡ тыуҙырған Кроношпан төҙөлөшөнә бәйле янъял килеп тыуыуына ниндәй аңлатма бирер инегеҙ?**

**Азат Ҡотләхмәтов:** Кроношпан тирәһендәге ығы-зығы тәүҙән үк халыҡ менән кәңәшләшмәй эшләүҙән, уның фекерен һанға һуҡмауҙан башланды, тип әйтер инем. Бындай төҙөлөш башланырға тороуы хаҡында халыҡ аҙаҡ ҡына белеп ҡалып, тауыш күтәрҙе. Ҡеүәтле ағас эшкәртеү предприятиеһы булараҡ, ундай комбинат республикаға бик кәрәк тә бит, тик ул бөгөнгө экологик талаптарға тулыһынса яуап биргән хәлдә, әлбиттә. Унда әллә ниндәй химия ла булмаясаҡ, ә бына ағас туҙаны булыуы бар, ләкин уны һауаға сығармай, тотоп ҡалырға була. Һәм тағы. Был проект бер ниндәй башҡарыу документацияһыҙ башланырға тора ине, йәғни бындай завод төҙөү өсөн төп проекттың үҙе лә, бер ниндәй экспертиза документтары ла юҡ ине. Хәҙер проект эшләнгән, ул экспертиза үтергә тейеш, ләкин халыҡ барыбер ышанмай. Бындай комбинатты беҙҙең үҙебеҙгә элегерәк үк төҙөргә кәрәк ине, мәҫәлән, Инйәр тирәһендә. Бына әле Инбир Мөхәмәт улы әйтеп китте бит: ялан-ҡырҙарҙы урман баҫа, тип. Тимәк, урман эш ағасы өсөн планлы рәүештә йылына кәмендә 8,5 миллион кубометр күләмендә ҡырҡылып торорға тейеш, ә беҙҙә был күрһәткес ни бары 3 миллион.

**Инбир Яппаров:** Эш барышында ниндәй өҫтәмә сеймал һәм материалдар ҡулланыласаҡ икәнен беҙ әлегә белмәйбеҙ. Әгәр Кроношпан ағас плитәләр етештерәсәк икән (ә уларҙың ҡалдыҡ материалдарҙан эшләнеүе бик ихтимал), ул нисек эшкәртеләсәк һәм нимә менән йәбештереләсәк? Беҙ хәҙер беләбеҙ, ағас плитәләр ошоға тиклем бик ныҡ зыянлы формальдегид менән йәбештерелә ине. Был хаҡта һуңғы йылдарҙа ғына һүҙ килеп сыға башланы. Яңыраҡ ҡына хатта РФ Дәүләт Думаһы депутаты В.Жириновский ҙа, "кабинет стенаһын йөҙләүсе материалдар мине ағыулай", тип "тулап" алды. Әйткәндәй, Кроношпан буйынса, исмаһам, бер генә химик та үҙ фекерен белдермәне.

**Азат Ҡотләхмәтов:** Бөгөнгө көндә фенол-формальдегид ыҫмалаһы ҡулланылмай. Элек, әйе, бына беҙ ултырған ултырғыс, өҫтәлдәр, карауат, диван, ишектәр бөтәһе лә әлеге химик берләшмә нигеҙендә йәбештерелә ине. Ул бөтөн булған бысҡы вағын, юныҫҡыларҙы ныҡ йәбештереп тота. Шундай нигеҙҙә етештерелгән мебель, тәбиғи, һулаған һауабыҙға даими рәүештә зыянлы матдәләр бүлеп сығарҙы, был иһә III кластлы хәүеф сығанағы булып, канцероген фон тыуҙыра ине. Шуға күрә санитар-гигиена табиптарының талаптарына ҡолаҡ һалып, хәҙер ағас эшкәртеү комбинаттары, шул иҫәптән беҙҙәге ике фанера комбинаты ла карбамид ыҫмала ҡуллана башланы. Әле бына Кроношпан хужалары ла фәҡәт карбамид ыҫмалаһы нигеҙендә эшләргә вәғәҙә бирә, ләкин... ҡайҙа гарантия? Капиталистарҙың бит бөтәһе лә шундай: вәғәҙә биргәндә нимә генә эшләмәйҙәр, ә үҙҙәре берәй этлек ҡылырға әҙер генә торалар, сөнки бит уларҙың төп эш прицибы -минималь сығымдар менән максималь килем алыу. Уларҙың халыҡҡа яҡшы булһын тип тырышҡанын берәү ҙә күргәне юҡ бит әле!

**▸ Һәйбәт, таҙа тәбиғи мөхиткә хоҡуҡ - граждандарҙың иң төп конституцион хоҡуҡтарының береһе. Асылда ундай хоҡуҡтан мәхрүмбеҙ. Бының объектив сәбәптәренең ҡатмарлы һәм күп төрлө икәнлеген күреп-белеп торабыҙ, ә бына субъектив сәбәптәр нигеҙҙә һәр кешенең үҙендә, эске мәҙәнилеге һәм психологияһында түгелме икән?**



**Инбир Яппаров:** Хоҡуҡтарыбыҙҙы ҡайғыртҡанда бурыстарыбыҙ хаҡында ла онторға ярамай. Тирә-яҡ мөхитте һаҡлауҙы һәр кем үҙенән башларға тейеш. Дөрөҫөрәге, тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш, тыуған иленә, йортона һөйөү кеүек үк, ғаиләлә, унан ары мәктәптә тәрбиәләнә, тип уйлайым. Педагог булараҡ, шуны әйтәм: бөгөн беҙ баланы тәбиғәттән айырабыҙ. Үҙемдең мәктәп йылдарын хәтерләйем: уҡытыусыбыҙ беҙҙе бик йыш тәбиғәткә алып сыға, ағастар, ҡоштар, төрлө тәбиғәт күренештәре менән таныштыра, мауыҡтырғыс хикәйәләр һөйләй, уйларға, төрлө күренештәргә яуаптар табырға өйрәтә торғайны. Әле уҡыусылар бөтөнләй урманға сыҡмай, балаларҙың ғүмере өсөн хафаланыу: йә йығылыр, йә йыланға баҫыр, йә бәрелер һ.б. шундай артыҡ сәбәләнеүҙәр йәш быуындың экологик йәһәттән белемле, юғары мәҙәниәтле булып үҫеүенә ныҡ аяҡ сала. Тәбиғәт серҙәрен төшөндөрөү, һәр үлән, һәр ағасҡа, кейек-ҡоштарға һаҡсыл ҡарарға өйрәтеү ғаилә тәрбиәһендә лә ҙур урын алып тора ине элек. Бала саҡта шулай бер тапҡыр атайымдан алған һабаҡ ғүмер буйына онотолмай. Ҡыш көнө малайҙар менән саңғы шыуырға урманға сыҡҡанбыҙ. Шунда һәр беребеҙ саңғы таяғы менән ҡар өҫтөнә исем-шәрифтәребеҙҙе яҙып сыҡтыҡ. Ат егеп, күрше ауылға эшкә йөрөгән атайым ҡайтты ла мине саҡырып алып, ҡарға яҙылған баяғы исемдәрҙе барып юйып ҡайтырға ҡушты. Әрләмәне лә, һуҡманы ла, бары ҡәтғи итеп, ярамай, улым, тине. Эңер төшкән, бер аҙ шөрләтһә лә, юл буйына барып, яҙыуҙарҙы юйып ҡайттым. Ә бит ундай яҙыуҙарҙы үҫеп ултырған ап-аҡ ҡайындарҙың туҙында ла, мәктәп, студент парталарында ла, ял итә торған эскәмйәләрҙә лә, подъезд стеналарында ла күрергә була. Ундай үҫмерҙәргә, тимәк, минең атай кеүек һабаҡ биреүселәр юҡ, ә ҡыҙғаныс... Был факттар ҙа шул уҡ тирә-яҡ мөхитебеҙгә булған ҡараштың формалашыуы тураһында һөйләй бит.

**Азат Ҡотләхмәтов:** Ә һеҙ ошо турала уйланғанығыҙ бармы - йыл һайын, хатта йылына бер нисә тапҡыр өмәләр үткәреп, күпме ҡый-һай йыябыҙ! Бының өсөн күпме кеше, транспорт йәлеп ителә, күпме яғыулыҡ тотонола һәм былар бөтәһе лә... үҙебеҙ бысратҡанды таҙартыу өсөн. Ә бит шул тиклем итеп сүпләмәҫкә, бысратмаҫка ла булыр ине. Беҙ шулай һәр ваҡыт берәй нәмә эшләйбеҙ ҙә шуның эҙемтәләре менән "батырҙарса" көрәшәбеҙ, ә яманлыҡтың тамыры беҙҙең аңһыҙлыҡта, ялҡаулыҡта, тәрбиәһеҙлектә тороп ҡала бирә. Әгәр беҙҙә экологик тәрбиә һәм белем биреү тейешле тәртиптә - ғаиләнән алып, балалар баҡсаһы, мәктәп, вуз баҫҡыстарын үткән хәлдә, беҙҙә бөтөнләй икенсе күренеш күҙәтелер ине, йәғни тәбиғәт ҡосағына сығып ял иткәндән һуң кешеләр үҙ артынан бер генә бөртөк сүп тә ҡалдырып китмәҫ ине. Мин үҙем, мәҫәлән, тап шулай итәм. Хатта башҡалар артынан йыйыштырырға ла тура килә...

***Әгәр беҙ антропоген ғәмәлдәребеҙ менән мауығып китһәк, бер аҙҙан мотлаҡ шуның эҙемтәләрен күрә башлайбыҙ. Тәүҙә ҡайҙан ниндәй ҡурҡыныс янағанын һиҙмәйбеҙ ҙә әле, аҙаҡ сәбәптәрен эҙләйбеҙ һәм яңынан-яңы проблемалар килеп сығыуын күрәбеҙ. Әле бына яҙҙан бирле Башҡортостанда ҡайын урмандары ауырый башланы. Мәғлүм булыуынса, һуңғы йылдарҙа ҡайын урманы ҡырҡылманы бит, сөнки ағас эшкәртеү сәнәғәте юҡҡа сыҡты, күп райондарҙа халыҡҡа утын да кәрәкмәй башланы - газ яғалар бит инде. Был нимәгә килтерҙе: бына хәҙер уны ҡырҡырға кәрәк буласаҡ, тик инде санитар таҙартыу маҡсатында. Шуны әйтергә итәм: беҙ тәбиғәт байлыҡтарын файҙаланырға тейешбеҙ, ул шуның өсөн тәғәйенләнгән дә, ләкин - тейешенсә генә!***

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Тирә-яҡ мөхитте һаҡлау мәсьәләһенә арналған йыл үтеп тә китте. Хөрмәтле ҡунаҡтарыбыҙ дөрөҫ әйтә: бер йыл эсендә генә глобаль проблемаға әүерелгән экологияны һаҡлау буйынса әллә ни эш ыратып булмағанда ла, ошо мәсьәләнең бөгөн йәшәү менән һәләкәт араһында айырымасыҡ һыҙатланыш алыуын күҙ алдына килтереү, был йәһәттән хәлдең ни тиклем киҫкен тороуын аңлау ғына ла үҙебеҙ ултырған ботаҡҡа балта сапмаҫҡа булышлыҡ итер ине, бәлки, тигән уйға һала.**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**менән**
**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**әңгәмә ҡорҙо.**

***✓ Совхоздың элекке МТМ-һы, орлоҡ таҙартыу һәм һаҡлау комплексы, мал фермаһы, автопарк урындарында харабалар ғына ята. Эшкә яраҡлы әйберҙәре ҡутарып ситкә һатылған. Кәрәкмәгәндәре туҙырап ята.***




**Байгилде МОТАЛЛАП**

*«–Илаған ирҙе күргәнең бармы?*
*–Булмаҫ илаған ирҙәр!*
*Ир илаған илдә бәрәкәт юҡ.*
*Ир илаған илдең ҡото юҡ!»*
*Ике сәсән әйтешенән.*

# СИКТЕҢ СИГЕНДӘ

**(Хикәйә)**

Иртәгәһенә һыйырҙар һауылғас, бар халыҡ клубҡа ағылды. Беҙ бәләкәй саҡта һинд фильмдарына шулай дәррәү йөрөй торғайнылар. Таяҡ таянған әбей-бабайы ла, доньянан ғарҡ булып, эсеүҙән башҡаны белмәгән ауыл асарбағы ла клубҡа ынғайланы. Һуңлап ҡуймайыҡ тип ашығып атламайҙар. Киреһенсә, мәжбүр иткәндәй, ығышып ҡына ҡыймылдайҙар. Ирҙәр, тәмәке тоҡандырған булып, бергилке тороп алалар, туҡтап, шым ғына нимәләр тураһында һөйләшәләр. Ҡараңғы тәшөүгә, клуб шығырым тулы ине. Урын алып өлгөрмәгәндәр стена буйлап теҙелеште.

Сәхнә уртаһына бер өҫтәл, ике ултырғыс ҡуйылған. Бына алпауыт та пәйҙә булды. Яҫы битле, ҡыпыс күҙле, йыуан ҡорһаҡлы ҡаҙаҡты күрергә йыйынған гәм, алдарына килеп баҫҡан йәш, һомғол буйлы, егеттәрсә һөйкөмлө ирекәйҙе күргәс, гөж килеп алды. "Әртис тә баһа был", тине кемдер. Ауыл башлығы ла эйәргәйне уға. Ул башлап әйтте.

- Йәмәғәт, артыҡ һүҙ ҡатып тороуҙың кәрәге юҡ бында. Клуб тултырып килеп ултырғанһығыҙ икән, йыйындың сәбәбен беләһегеҙ. Демократия заманында йәшәйбеҙ, бер кемде лә ирекһеҙләү юҡ. Һәр кем үҙе өсөн үҙе хәл итә. Әйҙә, ҡунаҡты тыңлайыҡ, - тине лә залға төшөп ултырҙы.

Ҡаҙаҡ тағы ла ғәжәпләндерҙе халыҡты. Ул тап-таҙа уҡ булмаһа ла, башҡортса һөйләшә ине.

- Мин - "НанЖуз" фирмаһының етәксеһемен. Ырымбур далаларының ҡап яртыһы минең ерҙәрем. Ер ул, аҡса кеүек, һәр саҡ әйләнештә булырға, табыш килтерергә тейеш. Ошо хазина һеҙҙә хәрәкәтһеҙ ята, эшкәртелмәй, - тип алыҫтан башланы һүҙен. Ысынлап та, ул кеше башына бирелгән пай ерҙәрен ҡырҡ туғыҙ йылға ҡуртымға алмаҡсы һәм һәр йыл өсөн биш мең һум түләмәксе икән. Ғиләждың һүҙе раҫҡа сыҡты.

Халыҡ шым тыңланы алпауытты. Себен осҡан тауыш ишетелеп торҙо.

- Иртәгә иртә менән күсеп йөрөй торған офисым клуб алдында эш башлай. Тәүлек әйләнәһенә эшләйәсәк. Өс, биш, ун көн торор кәрәк булһа. Уйлашығыҙ, кәңәш ҡороғоҙ, нисек кәрәк, шулай хәл итегеҙ. Аҡсаһын шунда уҡ ҡулығыҙға тоттораbыҙ. Теләгегеҙ булһа, банкыға ла күсерә алабыҙ, - эш кешеһе тейешлеһен ҡыҫҡа, аныҡ һәм аңлайышлы итеп әйтте лә, сығып та китте.

Клуб эсендәге үҙ иркенә ҡуйылған халыҡ, һеңгәҙәгәндәй, тын ҡалып, бергилке ултырҙы. Ер һатыу хилаф эш икәнен ауылдаштарым гәзит-журналдарҙан уҡып та, ишетеп тә белә, әлбиттә. Һуңғы осорҙа ул турала йыш яҙалар һәм һөйләйҙәр бит.

Тынлыҡты фермер Мөхитдин боҙҙо.

- Байҙың һүҙе башҡа. Аҡса менән алдырмаҡсы. Ағай-эне, ерҙе бирергә ярамай. Уйлап ҡарағыҙ әле - ҡырҡ туғыҙ йыл! Ошонда ултырғандарҙан һирәктәр генә иҫәнлектә күрә алыр ҡуртымға бирелгән ерҙен кире халыҡҡа ҡайтарылыуын. Хатта беҙҙең балаларҙың да байтағы быға өмөт итә алмай. Тик өсөнсө быуын - ейән-ейәнсәрҙәребеҙ генә - олоғая башлағанда ер ҡайтарылыр. Ерҙең кирегә ҡайтарылыуына ла, ейән-ейәнсәрҙәребеҙгә уның кәрәге булыуына ла икеләнәм. Әгәр ерҙе ҡуртымға бирһәк, унан мәңгелеккә ҡолаҡ ҡағасаҡбыҙ. Ерһеҙ беҙ кем? Далала ел ынғайына тәгәрләп йөрөгән ҡамғаҡ!

- Түлә ҡаҙаҡ кеүек сумыртып, ерҙе һинә бирәбеҙ, - залдан әсе ҡатын-ҡыҙ тауышы ишетелде.

- Аҡсамдың юҡ икәнен беләһегеҙ, йәмәғәт. Заманында һәр кем, үҙ мөлкәте менән инеп, колхоз төҙөгән бит, бәлки, шулай эшләргәлер беҙгә лә? - Мөхитдин, батып барған кешеләй, һаламға йәбеште. Әйтерһең, ул тоҡтоң ауыҙын асты: китте кемуҙарҙан ҡысҡырыш.

- Колхозын да, совхозын күрҙек. Эт булып ултырабыҙ хәҙер!

- Тағы ла кемделер байытайыҡмы?

- Берәүҙәр эшләһен, икенселәр ашаһынмы?

- Юҡ, колхоз кәрәкмәй! Ҡаҙаҡ ерҙе күтәреп алып китмәй. Бирәйек, ер эшкәртергә, уңыш йыйырға кешеләр кәрәк буласаҡ уға ла, эш күрербеҙ, исмаһам.

Оҙаҡ шаулашты халыҡ. Зал тына биреп ҡалған мәлдән файҙаланып, мин дә үҙ һүҙемде әйтергә йөрьәт иттем. "Ерҙе ситяттарға бирмәгеҙ", тип башлағайным ғына, тағы тауыш ҡупты.

- Һинә аҡыл өйрәтеүе анһат. Себерендә ҡайырып аҡсаһын алаһың, балаларыңды нисек уҡытырға, башлы-күҙле итергә, башҡа сығарырға, тип башың ауыртмай. Мин эскесе ирҙе лә һөйрәйем, баламды ла кеше итәм, тип ҡырҡҡа ярылырҙай булам. Ике йөҙ илле мең минең өсөн төшөмә лә инмәгән байлыҡ. Ҡаршы өгөтләмә, өгөтләмә!.. - Урта йәштәрҙәге ҡатын ярһыуына сыҙай алмай, сеңләп илап ебәрҙе.

Йыйын тағы тынды. Артабан ниндәй хәбәр ишетербеҙ икән, тигәндәй, бергилке шымып ултырҙылар ҙа, таралыша башланылар. Сығыуға ҡарай ауылдаштарым, ауыр йөк артмаҡлағандай, баштарын эйеп талғын ғына атланылар. Ауыл башлығы, Мөхитдин, мин иң аҙаҡҡа ҡалып сыҡтыҡ клубтан. Һүҙ ҡатыусы булманы.

Ырымбур эшҡыуарының күсмә офисы клуб алдында ун көн торҙо. Ауылдаштарым сиратҡа баҫып ерен һатмаһа ла, берәмләп, килеүселәрҙең эшен өҙләктермәй, инеп сығалар ине унда.

Ауылымдың ере лә һатылырмы икән шулай? Тракторҙа, атайымдың эргәһендә ҡушарлап ултырып, ер һөргән, кеше буйындай кукуруз араһында йәшенмәк уйнаған, һалам эҫкерте өҫтөндә аунаҡлап кинонган баҫыу ҡырҙары ла башҡалар ҡулына күсерме, улар менән бергә бала саҡ эҙҙәрем дә һатылып китерме?

Ялым тамамланып, кире Себергә киткәнсе Маратты күрмәнем. Һыуға батҡандай ғәйеп булды ла ҡуйҙы ул. Оҙатырға ла килмәне.

* * *

Үрҙә бәйән ителгән ваҡиғаларҙан һуң өс йыл үтте. Сираттағы ялымда мин тағы аулыма ҡайттым. Рәсих менән Үгеҙташ тауына мендек. Беҙ ҡаҙып ҡуйған бағана шул килеш ултыра. Уға оҙаҡ текләп киткәнмендер, юлдашым:

- Имен. Күҙ-ҡолаҡ булып торам. Бала-сағa ла элекке ише ҡулсыр түгел бит хәҙер.Ҡырға сығып уйын да ҡормайҙар, өйҙә компьютер артында тик ултыралар. Һирәктәр ҙә хәҙер улар. Мәктәп тә туғыҙ класҡа ғына ҡалды. Ҡулы ҡысығандан әйбергә ороноусылар ҙа юҡ. Тимерҙән булһа, әллә ҡасан металл йыйыусыға тапшырып ҡуйырҙар ине. Иҫке ағас бер кемгә лә кәрәкмәй, - тип уйҙарымды бүлде.

Бағанаға текләп торһам да, уйҙарым минең икенсе юҫыҡта ине.

Диуаналарҙың аҫҡы аңы һиҙгерерәкме, әллә башҡа ғилләсәбәпсеме - улар йыш ҡына күрәҙәселек ҡылыу һәләтенә эйә. Рәсихҡа ла тау башына ауыл һағы итеп ошо бағананы ҡуйыу уйы юҡтан килмәгәндер.

Булмышыбыҙға һәм тотош йәшәйешебеҙгә оло афәт янаған осор хәҙер. Күҙгә күренмәгән дәһшәтле яу күнегелгән мөхиттебеҙҙе ҡалдырып, бер туҡтауһыҙ сигенергә мәжбүр итә беҙҙе. Юғалтыуҙарыбыҙҙың иҫәбе лә, һаны ла юҡ. Ҡеүәтле Союз тарҡалды, гәйбәтсе ауыл бисәһендәй, телевизор-радиоһы ла, гәзит-журналдары ла юлбашсыларыбыҙҙы фашларға, гәҙеллек йәмғиәте, тип инанған социализмды ла яманларға тотондо. Беҙ тыңланыҡ, аптыраныҡ, албырғаныҡ, ышандыҡ! Рәсәй һәм рәсәйлеләр булдыҡһыҙ, мәшәү һәм айыу кеүек аңра икән. Нисек машина эшләргә лә, иген игергә лә белмәйҙәр. Тыңланыҡ, аптыраныҡ һәм ышандыҡ!

Быларға күнеп кенә бара инек, башҡорт иленә, уның тарихына, батырҙарына, зыялыларына ябырылдылар. Тағы тыңлайбыҙ һәм түҙәбеҙ. Бөгөн еребеҙгә һәм телебеҙгә яҫҡыналар. Фронт һыҙығы ошо бағанаға килеп терәлгән. Уны ла ҡалдырып сигенһәк - тарих туҙаны булып юҡҡа сығасаҡбыҙ, глобаллашеү тип аталған асмәйел дәжжәлдең бәләкәй теленә лә эләкмәй, йәһәннәмгә осасаҡбыҙ.

- Рәхмәт, Рәсих, - тинем дуҫыма, һиҙгерлегенә ишаралап. Һүҙемде ул үҙенсә аңланы, әлбиттә.

Ә ауылым тағы ла моңһоулана төшкән. Марат та юҡ инде. Ҡатыны менән талашып, ҡыштың саҫҡау һыуығында өйҙән сығып киткән дә, ҡырҙа ҡәбән төбөндә туңып үлгән. Эргәһендә эсеп бөтөлмәгән шешәһе ултырған. Ғәбделхаҡ ағай ҙа киткән. Өҫтөнә оло гонаһ алған - яңғыҙлыҡҡа түҙә алмай, үҙенә ҡул һалған. Ғилаж да - ауылдың ҡото ла - баҡыйлыҡта. Урам буйында үлеп ятҡан, йөрәге туҡтаған.

Совхоздың элекке МТМ-һы, орлоҡ таҙартыу һәм һаҡлау комплексы, мал фермаһы, автопарк урындарында харабалар ғына ята. Әйтерһең дә, дошман бомбаға тотҡан. Эшкә яраҡлы әйберҙәре ҡутарып ситкә һатылған. Кәрәкмәгәндәре туҙырап ята.

Ҡаралтылары ярым емерек, ишек алдында хужа эҙе күренмәгән йорттар ишәйгән. Ауыл урамында техника ла, кеше лә күренмәй. Һирәкләп эт кенә өрөп ҡуя.

Ауыр көрһөнөп ҡуйҙым. Рәсихҡа ҡараһам, ул тын ғына илай. Һыҡтамай ҙа, һыуҡылдамай ҙа. Күҙҙәренән йәштәр генә тама.

- Нишләп илайһың, Рәсих? - тип һорайым ғәжәпләнеп.

- Ауыл үлә, - тине ул. - Һин ҡайтып, ошолайтып күңеләнде баҫып китәһең. Ә беҙҙең балаларыбыҙ ҡайҙа ҡайтыр? Тыуған тупрағым, тыуған төйәгем, тип...

- Күпме эҙләһәм дә, бала саҡ һуҡмаҡтарымды таба алманым мин дә, Рәсих. Һаҡлай алмағанбыҙ уларҙы. Арттан килгән балаларға нимә ҡалыр? Белмәйем яуапты был һорауға.

- Улар ҡайтмаясаҡ. Еребеҙ ҙә кітһә...

-Ике йылдан пенсияға сығам. Ҡайтып, ауылда төпләнергә иҫәбем.

- Бында һиңә нимә бар? Үлергә йөрөгән ауылда.

- Ер алам, булыштырып ҡарайым. Бәлки, башҡа фермерҙар менән берләшеп, ауылды күтәреп булыр. Киләсәк быуын хаҡына.

- Ауыр буласаҡ. Ана, ҡаҙаҡтың кешеләре эш мәлендә техникаһын, эшселәрен алып килеп, һөрөп, сәсеп, урып китәләр ҙә, башҡа ваҡытта күҙҙәрен дә күрһәтмәйҙәр. Вахта менән һаҡсылары ғына баҫыуҙарҙы ҡарап ята. Мал игенгә төшһә, атып һалалар ҙа ҡуялар. Закон улар яғында...

- Тоҙаҡҡа эләккәнһегеҙ икән, аҡсаға алданып.

- Эләктерҙеләр шул. Ниәтең булғас, тотон әйҙә. Һинән була ул. Башың беҙҙең ише түгел - эшләй. Минең еремдә ал. Мин бит тужы алпауытҡа еремде бирмәнем. Погран була тороп, еремде лә бирһәм, мин кем булам, ә?

- Тужы, тиһең, тағы кем бирмәне?

- Ундайҙар байтаҡ ауылда. Ҡаҙаҡ егермеләп кенә пайсының ерен ала алды. Улары ла ҡаҙаҡты судҡа биреп, ерҙәрен кире юллай. Вәғәҙә иткән аҡсаһын түләмәгән дала балаһы. Ә алдағы йыл бөтөнләй сәстермәҫкә итәләр ауылдаштар. Марат мәрхүм дә ерен һатманы. Шул арҡала бисәһе менән аралары боҙолоп, ярты йыл талашып-тартыштылар ҙа, ана, ҡайһылай бөтөп ҡуйҙы ахыры. Уның ере бынан да күренә, - Рәсих тигеҙ шытым биргән баҫыуҙа, утрау булып, шараҡ ҡалған ҡара ергә күрһәтте. - Шунда үлсәтеп алды ла, бағана ҡуйҙы сик билдәләп. Шуға алпауыт оронмай уның еренә. Минеке лә бағана менән билдәләнгән. Ул арғы баҫыуҙа, бынан күренмәй.

- Мараттың да ерен алам, әләйһә.

- Ал, - Рәсихтың йөҙөндә йылмайыу күренде. Миңә лә еңел булып китте.

* * *

Үткәндәрҙе һағыныу кеше асылының бер һыҙатылыр. Хәтирәләргә бирелеү эсте өҙҙөргәс һағыш һәм үкенестәр солғанышына әүерелмәһен, ирҙәрҙе илатмаһын өсөн, үҙенә яҙмышындың хужаһы булыр йәшәү кәрәктер, тим. Беҙҙең быуын, атайҙарыбыҙ ҙа, тар усаҡта бығҡып янырға дусар ителдәр. Ғәлиәхмәт һәм Ғәбделхаҡ ағайҙар, Марат, Вәхит, Рәсих, Дамир, Юнир, Марс һәм башҡалар, һәм башҡалар... Кемдәрелер көлгә ҡалды, ҡайһылары бына һүнәм, бына һүнәм, тип һүнгыс сиккә етеп көскә баҙлай...

Күккә терәлеп тау башында ултырған йәшел-ҡыҙыл һыҙатлы бағанаға йыш бағып торам мин. Башҡаларҙың да, аңҡайып, уға текләп-текләп алғандарына иғтибар иттем.

- Олатай, ҙурайғас мин дә погран булам. Ауылыбыҙҙы һаҡлайым, - эргәмә шым ғына килеп баҫҡан күрше малай шулай тине. Мин ер эшкәртһәм, ул һаҡта торһа, ауылыбыҙ үлмәҫ, бәгерҙәрҙе телгән ир күҙ йәштәре лә тыуған тупрағыма бүтән таммаҫ, аҡһаҡалдар ҡоро киң һәм бәҫле булыр! Ни шағу назад, олатай...

Малайҙы, башынан һыйпап, үҙемә ҡыҫтым...

**(Аҙағы. Башы 50-51-се һандарҙа).**

АФАРИН!

# БАЛАЛАР ТАЛАНТЫН...

## "Сулпылар" күтәреп ала

**Ғәҙәттә, йәш быуынды тәрбиәләү тураһында һүҙ сыҡҡанда баланың шәхес булып формалашыуына ғаилә, мәктәп һәм... урам тәрбиәһе йоғонто яһай, тип раҫлайбыҙ. Ә бына беҙҙең Башҡортостан балалары тормошонда тағы бер тәрбиәсе бар: ул Башҡортостан юлдаш каналының "Тамыр" балалар студияһы. Ул үҙенең тапшырыуҙары, тамашалары, яңы проекттары менән йәш быуынды маҡсатлы итеп тәрбиәләүгә булышлыҡ итә.**



Игорь Киняпин фотоһы.

"Сулпылар" бәйгеһенең гала-концертына килгән балаларҙың ата-әсәләре менән аралашҡанда ла раҫланды был хәҡиҡәт: уларҙың һәр береһе "Тамыр" студияһының эшенә, хәҙерге йәш быуынды тәрбиәләүҙәге ғәйәт ҙур роленә баһа бирҙе. Студияның конкурстарында ҡатнашыусылар ғына түгел, уларҙы тамаша ҡылыусылар ҙа үҙҙәренә һабаҡ, фәһем ала, матур өлгөләрҙә үҙ йәшәйешенә ҡүсерә, күңелендә оло маҡсат үҫтерә.

"Бишенсе класта уҡыусы улыбыҙ Айтуған быйыл беренсе тапҡыр ҡатнашты "Сулпылар" конкурсында, - тип һөйләне Ейәнсура районы Самаҙы ауылынан килгән әсә Йәмилә Ҡарабаева. - Мәләүез ҡалаһында үткән 1-се һайлап алыу турына райондан 20 баланы алып барғайныҡ. Айтуғанды ла, күреп, танышып ҡайтыр, тип алып барҙым, ул 2-се турға, унан 3-сө турға ла үтте һәм бына конкурстың призлы 3-сө урынын яуланы. Көтмәгәндә шулай талантын шәйләп, Айтуғанда йырға ҡыҙыҡһыныу уятты "Сулпылар" конкурсын ойоштороусылар. Быға саҡлы улыбыҙ һүрәт төшөрөү, техника менән мауыға ине. Хәҙер бына йыр менән мауығыу өҫтәлде. Шул ҡәҙәре рәхмәтлебеҙ "Тамыр" каналына..."

Әбйәлил районы Атауҙы ауылынан килгән әсәй Римма Замалетдинова ошоларҙы һөйләне: "Беҙ ҙә улыбыҙ Ниязҙың йырға һәләтен көтмәгәндә астыҡ. Ауыҙ эсенән генә көйләп йөрөй торғайны. "Сулпылар" конкурсының Сибайҙа үткән 1-се турына алып барҙыҡ. 3-сө турҙан да үтеп, 1-се урын яуланы ла ҡуйҙы. Бына хәҙер уның яратҡан шөғөлдәренә - футбол, хоккей уйынына йыр ҙа өҫтәлде. Ниязыбыҙ бик маҡсатлы бала, алдына алғанын ҡуймай. Ғөмүмән, балаларыбыҙ беҙҙә быйыл бик ҡыуандырҙы: өлкән ҡыҙыбыҙ Гөлнур "Урал батыр" республика бәйгеһендә 2-се урынға лайыҡ булғайны. Республикабыҙҙа бына шундай балаларҙы илһөйәр итеп тәрбиәләүгә, таланттарын асыуға булышлыҡ иткән конкурстар, бәйгеләр булыуы ҡыуаныслы..."

Быйыл 21-се тапҡыр үткәрелгән "Сулпылар" конкурсында 230 бала ҡатнашыуы был бәйгенең ысынлап та популярлығы, республикала талантлы балалар күплеге һәм... ата-әсәләрҙең фиҙаҡәрлеге тураһында һөйләй.

- Һәр йылдағы конкурсыбыҙ үҙенсәлекле, сөнки һәр йылда бәйгегә тағы ла талантлыраҡ балалар килә, - тип һөйләне "Тамыр" студияһы етәксеһе Гөлназ Ҡолһарина. - Мәҫәлән, быйылғы конкурсҡа хас булған күренеш - балалар матур йырҙар алып килде. Беҙҙең төп ауырлыҡ ана шул йырҙарҙа инде ул. Профессиональ композиторҙар балалар өсөн йырҙар яҙмай тиерлек, шуға ла беҙҙең конкурста ҡатнашыусыларҙың да репертуары бер төрлөрәк була торғайны элек. Һуңғы ваҡытта "Сулпылар"ҙа ҡатнашыусы балаларҙың ата-әсәһе, туғандары махсус рәүештә йырҙар ижад итеү, уларҙы заказ буйынса яҙҙырыу менән дә шөғөлләнә. Бына, мәҫәлән, Әбйәлилдән Нияз Замалетдинов ғаиләләре менән ижад иткән "Космонавт" тигән яңы йырҙы башҡарҙы финал турында. Ҡайһы бер балалар ололар өсөн яҙылған ретро йырҙарҙы яңыртты - быныһы ла хуплауға лайыҡ. Мәҫәлән, Ейәнсуранан Айтуған Ҡарабаев Илфак Смаков репертуарындағы "Балыҡсы" йырын бик оҫта башҡарҙы...

**Шулай итеп, "Сулпылар" бәйгеһенең гала-концертын Башҡортостан юлдаш каналында 31 ғинуарҙа иртәнге 10.30 сәғәттә ҡарай алаһығыҙ. Тағы ла шул: һәр бала талантлы ул, тик ата-әсә ваҡытында шәйләп, булған мөмкинлектәрҙе файҙаланып, балаһының талантын үҫтереүгә, уны балҡытыуға ярҙам итһен ине.**

**Гөлбаныу ГӘРӘЕВА.**

ӘЙҘӘ, МӘҘӘНИ БУЛАЙЫҠ!

# ЫҒЫ-ЗЫҒЫНАН АРЫНЫП...

## бер-берегеҙҙән хәл һорашығыҙ

**"Мәҙәни булыу" тигәндә, кешенең эске донъяһы торошон, уның ҡылыҡтарын, уның донъяға, үҙенә һәм башҡа кешеләргә ҡарашын күҙ уңында тоторға кәрәктер, моғайын. Ҡыҙыҡһыныуҙарыбыҙҙың, теләк-ниәттәребеҙҙең, маҡсаттарыбыҙҙың эскерһеҙлеге лә - мәҙәнилек билдәһе.**

Хәҙер мәҙәни булыу бигерәк мөһим, сөнки бөгөнгө замандың ығы-зығыһына, кешеләрҙең ҡайҙалыр йүгереүенә, машиналар ҡайҙалыр сабыуына баштар әйләнеп китә, ҡайһы саҡта уларҙы туҡтатып, бер-берегеҙҙең күҙҙәренә ҡарарға, бер-берегеҙгә йылы һүҙҙәр әйтергә онотмағыҙ, тип әйтке килә. Атай-әсәйҙәрегеҙгә, уҡытыусыларығыҙға шылтыратып, хәлдәрен һорашып тороғоҙ - игтибарлы булыу ҙа мәҙәнилектең бер күрһәткесе. Китаптар уҡыу, үҙенде үҫтереү шулай уҡ эске донъяңды байыта. Театр - тере сәнғәт ул, бөгөн интернет, кино уға оло конкурент булып торһа ла, театр йәшәй әле, тамашасыларҙан өҙөлгәнебеҙ юҡ, тимәк, халыҡ ысын сәнғәтте лә, мәҙәнилектең нимә икәнен дә аңлай әле.

Шөкөр, бөгөн шундай ҙур мөмкинлектәр замана, бары тик ялҡауланмаҫҡа, эшләргә генә кәрәк. Егәрле, әүҙем, дәртле, рухлы булығыҙ, йәштәр! Эйе, хәҙер телефон аша ғына йортҡа ризыҡ килтереүҙәрен һорарға, бәпәйенде телефон аша ғына тәрбиәләргә мөмкин, тик был технологиялар беҙҙе мүкләндерә, хәрәкәттә - бәрәкәт, тип бушҡа әйтмәгәндәрҙер бит. Һәр беребеҙ башҡорт мәҙәниәтенең бер өлөшө һәм һәр беребеҙ уның өсөн яуаплылыҡ тойорға өйрәнәйек. Милләтемә ниндәй изгелек эшләйем икән, тип уйлаусылар күберәк булһын. Бөгөн милләт булараҡ беҙ бар икән, уның киләсәге өсөн дә яуаплылыҡ беҙҙең иңдә. Шулай булғас, дәрле, рухлы, яуаплы, ҡыҫҡаһы, мәҙәни булайыҡ!

**Шәһит ХАММАТОВ,**
**М. Кәрим исемендәге**
**Милли йәштәр театры актеры.**

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда, майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# БЕРҘӘМЛЕК КӘРӘК...

## Йөрәктән-йөрәккә тапшырылғаны

**Вадим САФИН, М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты профессоры, психология фәндәре кандидаты, Башҡортостан республикаһының атҡаҙанған фән эшмәкәре, Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы, Башҡортостан республикаһының мәғариф алдынғыһы:** Бик ҡатмарлы һорау бирҙегеҙ. Шулай ҙа, был һорауға яуабым бар минең: иң тәүҙә еребеҙҙе, телебеҙҙе, динебеҙҙе һәм берҙәмлегебеҙҙе һаҡларға кәрәк. Һуңғы йылдарҙа тел тураһында ла, ер тураһында ла, динилек, иманлылыҡ хаҡында ла күп һөйләнелә, тик мәсьәләнең асылына төшөнөргә ынтылыш һиҙелмәй. Бөтөн сығыштар ҙа күҙ буяу рәүешен ала бара һымаҡ. Ә күҙ буяу булған ерҙә бер-береңә ысын-ысыны менән терәк, арҡаҙаш, рухташ булыу хисе тулыһынса берегеп китә алмайҙыр, минеңсә.

Берҙәмлек яҙылған ҡанундар менән яулана торған әйбер түгел, ул йөрәктән-йөрәккә, уйҙан-уйға, күңелдән-күңелгә тапшырыла торған идея кеүек. Һәр кем үҙенә таяныс-терәк эҙләй бөгөн, ләкин таба алмай: барыһы ла үҙ шөғөлөн генә шөғөл итә, үҙ ҡайғы-хәстәре даирәһендә генә урала. Ниндәй ҙә булһа сара ойоштороу өсөн мотлаҡ рәүештә көс түгеү талап ителә: ваҡыт менән урынды, кеше менән кешене тап килтереүе, унан бигерәк, ҡаршылыҡтарҙы еңеп сығыуы ауырыраҡ. Ойошоу өсөн тарҡаулыҡҡа ҡаршы көрәш тә талап ителә. Әүҙем көрәш өсөн радио-телевидение, интернет, матбуғат баҫмалары мөмкинлектәре файҙаланылырға тейеш. Шул саҡта ғына халҡыбыҙҙың берҙәмлеге ишәйеп, кешеләр кешеләрҙә үҙ терәген таныр. Тарҡаулыҡҡа, битарафлыҡҡа ҡаршы көрәш әле лә бара ул, тик етерлек көс туплай алмай. Сәғәттең маятнигын хәрәкәткә килтерер өсөн уны билдәле бер нөктәгә тиклем ҡуҙғатырға кәрәк бит инде. Бына ошо тәүге этәргес булһа, маятник туктауһыҙ эшләйәсәк. Халҡыбыҙҙың берләшеү механизмын да мин ошо миҫал менән сағыштырыр инем.

Тағы, халҡыбыҙ өсөн бик әһәмиәтле эш тип, мин ерҙәрҙе межалау ойошмаһы булдырыу зарурлығын билдәләр инем. Был турала гәзитегеҙҙең бер һанында тарихсы Айтуған Аҡманов әйткәйне инде. Ысынлап та, билдәләнмәгән, һыҙылмаған, теркәлмәгән, тейешенсә бүлеп бирелмәгән ерҙәрҙең һинекеме, минекеме икәнлеге билдәһеҙ: күп һорауҙар тыуҙыра. Быға өҫтәп, милли пай банктар булдырыу зарурлығын да билдәләр инем. Был банктар (дәүләттеке түгел) халыҡҡа машиналар, ашламалар һәм башҡа ауыл хужалығы кәрәк-яраҡтары алырға ярҙам итергә тейеш.

Һүҙемдең аҙағында, Аҡмуллабыҙ әйткәнсә, "уҡыу кәрәк", тиер инем. Бөгөн уҡыуҙың бәҫе төштө. Ә беҙгә үҙ һөнәре буйынса ысын белгес булған, шул уҡ ваҡытта башҡа өлкәләрҙә лә белгән милли рухлы, көрәшсе, универсаль белемле хеҙмәткәрҙәр кәрәк.

**Илгиз ИШБУЛАТОВ яҙып алды.**

ИНТЕРНЕТТАН



# АРАЛАШЫУ ҺӘЛӘТЕНӘ...

## телевизор йоғонто яһай

■ Хәҙерге рәсәйле 1980 йылдарҙа СССР-ҙа йәшәүсенән күпкә айырыла. Рәсәй Фәндәр академияһының Психология университеты ғалимдары ошондай фекергә килгән. 1981 йылдан алып 2011 йылға тиклем илебеҙ кешеләренең психологик портретын тикшереү һөҙөмтәләре күрһәтеүенсә, бөгөнгө кеше ул ваҡытҡа ҡарағанда күпкә ҡатмарлыраҡ, үҙ-үҙен генә ҡайғыртыусан, хатта бер аҙ яуызыраҡ, конфликттарға инеүсәнерәк, әҙәпһеҙерәккә әйләнгән. Алыҫ 80-се йылдар менән сағыштырып ҡарағанда, хәҙерге рәсәйле өс тапҡыр агрессивыраҡ, тупаҫыраҡ, әрһеҙерәк. Эксперттар фекеренсә, һүгенеүҙәр шулай уҡ агрессия күрһәткесе.

■ Туҡланыу продукттары хәүефһеҙлеге буйынса Европа идаралығы (EFSA) аспартам буйынса тикшеренеүҙәрҙе тамамлаған һәм уны хәүефһеҙ тип тапҡан. Шәкәрҙән 200 тапҡыр татлыраҡ булған аспартам диабет менән ауырыусылар һәм үҙ кәүҙәһе ауырлығын контролдә тоторға теләүселәр өсөн тәғәйенләнгән ризыҡтарҙы әҙерләүҙә ҡулланыла. Шәкәрҙе алыштырыусының канцероген сифаттары буйынса бәхәстәрҙә уның зыянлы булыуын билдәләй инеләр. Эксперттар әйтеүенсә, дозаһын күтәргән осраҡта аспартам ысынлап та зыянлы, әммә уға ағылған башҡа ғәйептәр дәлилләнмәгән. Төрлө илдәрҙә уның максималь дозаһы төрлөсә билдәләнә, шулай ҙа ул яҡынса тәүлегенә 100-130 таблетка. Аспартам диетик газлы эсемлектәрҙән, һағыҙҙарҙың составына ла инә.

■ Ғалимдар Wi-Fi сәләмәтлектең ҡаҡшауына килтереүе ихтимал, тип белдерә. Дания ғалимдары балаларҙа һәм бүлмә гөлдәрендә һынауҙар үткәргән. Бер төркөм уҡыусылар Wi-Fi селтәренә тоташтырылған телефондарын яҫтыҡ аҫтына һалып йоҡлаған. Беренсе төндән һуң уҡ балалар баш ауыртыуына, иғтибарҙы туплауы ауыр булыуына зарланған. Тәжрибәнең икенсе өлөшөндә уның бүлмә гөлдәренә тәьсире тикшерелгән. 6 гөлдө 12 көнгә Wi-Fi сығанаҡлы бүлмәгә бикләгәндәр, тағы 6 гөл ябай бүлмәгә урынлаштырылған. Экспериментҡа тәғәйенләнгән ваҡыт үтеүгә, беренсе бүлмәләге гөлдәр һулыған, икенсе бүлмәләге гөлдәр сәскә атыуын дауам иткән. Wi-Fi-ҙың тәьсир итеү механизмы әлегә өйрәнелмәгән, быны өсөн ҙур һынауҙар үткәреү кәрәк буласаҡ. Шулай ҙа ғалимдар хәҙерҙән үк йоҡларға ятҡанда уны һүндерергә һәм кеҫә телефондарын карауаттан 1,5 метр арала тоторға кәңәш итә.

■ Телевизорҙы күп ҡараған балалар әйләнә-тирәһендәге кешеләрҙе аңлау һәләтен юғалта. Эксперимент 1,5 йәштән 3 йәшкә тиклемге балаларҙа үткәрелгән. Уларҙың ата-әсәләре бала телевизор алдында күпме ваҡыт үткәрә, телевизор бүлмәнең ҡайһы урынында тора тигән һорауҙарға яуап биргән. Бүлмәлә телевизор даими тоҡандырып ҡуйылған булһа, бала башҡа кешеләрҙең кәйефен һәм тойғоларын насарыраҡ аңлай икән. Артабан был аралашыуҙа ҙур проблемалар тыуҙыра.

СӘЛӘМӘТЛЕК ҺАБАҠТАРЫ

# ҺЫНАУҘАР...

## еңеүҙәр өсөн ойотҡо

### Тәҡдирме, яҙмышмы?

Әҙәм балаларын бәләҡазалар һағалап ҡына тора шул. "Һәр кемдең дә этәкләүсеһе һәм ярҙамсыһы була, икеһе лә ашығырҙар, ҡайһыныһы алданыраҡ өлгөрә инде..." ти торғайны өләсәйем. Баштан үткәндәрҙе күҙҙән үткәрәм дә, өләсәйем әйткәндәрҙең хаҡ икәненә төшөнәм...

...Бармағым араһы ҡыҫынҡырап тора ине. Бер бәләкәй генә нөктәләй урында ине ҡысытыу. Көн эсендә ҡулым шешә башланы, шеш беләк буйлап өҫкә үрмәләне. Күгелйемкөрән төҫкә инде, бармаҡтарым тултырылған тауыҡ кеүек тырпайып тора. Дауаханаға 40-50 саҡрым юл. Етмәһә, аҡман-тоҡман бураны башланды. Ул ҡасан тымыр ҙа, ҡасан юл төшөр... Әсәйем: "Ҡыҙ бала ҡулһыҙ ҡала инде, уң ҡулы бит әле, етмәһә..."- тип һығыла.

Шул саҡ ишектән Ғәйшә өләсәйем күренде. Ул, ғәҙәттә, өйөнән сығып бармай. Беҙгә лә бик һирәк килә. Ни хәстәр сығаргандыр инде өйөнән. Әммә минең ауыртынып ултырғанды күреү менән әсәйемә: "Нимә буҙлап ултыраң, бар, йәһәт кенә һарыҡ майы индер!" - тип фарман бирҙе. Майҙы тиҙ генә иреттеләр ҙә, шеш өҫтөнә һөртөп яптылар. Утын ағасылай бәйләп-сырмап та ҡуйҙылар. Ҡулым инде иҫ белмәй, ауыртҡанын да тоймайым... Шулай, насип иткәс, был сир ҙә ҡул менән һыпырып алғандай юҡ булды.

### Һаулығың ҡәҙерен һау саҡта бел...

Яҙ етеп, тирә-яҡ йәшәрә, ағастар япраҡ яра башлаһа, тау юлынан юрғалап, Ғәйшә апайым менән Фатима апайым килеп етә. Таҡыясаҡ битенән ыуыҙ ғына япраҡтар йыйып, алмаш-тилмәш бер-берененең аяҡ-ҡулдарын урайҙар, япраҡ һуттарын битйөҙҙәренә ягалар. Иртә яҙҙан ҡайын һәм уҫаҡ япраҡтарын күпләп йыялар, сөнки ҡәҙерен белеп файҙаланғандарға ҙур дауа бит инде ул был үҫемлектәр. Ҡайһы саҡ апайҙарыма аптырап ҡуям. Үҙҙәре шундай шәптәр. Бигерәк тә Ғәйшә апайым. Йәш сағында егеттәр уның менән көрәш майҙанына сығырға ҡурҡҡан, тип һөйләйҙәр. Үҙ күҙҙәрем менән күрергә лә тура килде уның ирҙәрсә ҡыйыулығын. Боларып, ҡатынын туҡмарға торған ажар ирҙе аҡылға ултыртҡанын. Ҡулын шаҡарып, һикәлтәнән бырғағанын. Һис аптырайһы түгел. Нәсиха өләсәйҙең ейәнсәрҙәре бит улар. Сирләләр шыншып ултырғанда, апайымдар тәбиғәт шифаханаһының бер дауаһын да файҙаланмай ҡалдырмайҙар. Иртә яҙҙан ҡара көҙгәсә... Урман-ҡырҙар буйлап йөрөргә тура килгәндә улар аҙым һайын осраған тәбиғәт күренеше, үлән-сәскәләр тураһында әллә күпме мәғлүмәт бирәләр, китап уҡыйҙармы ни...

### Йөрөгән аяҡҡа йүрмә...

Ауыр уйҙарға сумып китеп барғанда юл ыңғайы ғына "Еңгәй, был һин уҡый торған китап", тип, ҡулыма китап тоттороп киттеләр. Япон фәйләсуфы Кацудзо Ниши системаһы тураһында Майя Гогуляндың "Сирҙәрегеҙ менән хушлашығыҙ" тигән китабы ине ул. Өйгә ҡайтыу менән бер тынала уҡып сыҡтым. Система дүрт өлөштән тора. Мин уның берәүһен, "Сәләмәтлектең алтын ҡағиҙәләре" тигәнен генә ҡулландым. Шуны ҡулланып һауыҡтым, тиеү аҙ булыр...

Фәйләсуфтар, ваҡыттың ҡәҙерен белегеҙ, уның бәйһе бар, ти. Ваҡыт һәр кемгә лә тигеҙ бирелә - тәүлегенә 24 сәғәт. Уны арттырып та, кәметеп тә булмай. Шуға, кемдең күпме эш атҡараһы ваҡытҡа түгел, ә дарманына, көс-ҡеүәтенә бәйле. Кемдәр ошо системаны үҙ итә - минең ни әйтергә теләгәнемде шундуҡ төшөнөр...

### Урындыҡҡа мәдхиә

Системаның тәүге ике ҡағиҙәһе: ҡаты мендәр һәм ҡаты түшәк. Ҡәҙерен белмәй ырғытҡайныҡ бит әле иҫкелек ҡалдығы тип урындыҡты (һикене) һәм кейеҙҙе. Зиннәтләһенә, ҡиммәтләһенә алыштырғайныҡ. Ысынлап та, ҡиммәт шул заманса йыһаз-түшәктәребеҙ. Уларҙың ысын хаҡын дауахана юлын, Израиль клиникаларын тапаусылар, умыртҡа бүҫеренән яфаланғандар белә инде...

Ә бит беҙҙең бала саҡтың төп йыһазы булған урындыҡ бөгөнгө бер ниндәй йыһаз менән дә "ярыша" алмай! Ул бит балаларҙың иркен сикләмәй генә ишектән һирпелгән елпеүҙән, иҙәндәге рәнйеүҙәрҙән аралап тора алған! Унан ғәйре, урындыҡ рухи тәрбиә урыны булған. Бала-сағаны үҙ-ара һәм оло быуын менән бәйләп, күпме йомаҡ ҡойолған, әкиәттәр тыңланған, иҫтәлектәр һөйләнгән, затырыу барланған, ғибрәтле ваҡиғалар, тарих бәйән ителгән... Үткәндә киләсәк менән бәйләп, быуындар күсәгилешен тоташтырып торған күпер булған. Нәсәлдә нәҫел итеп кенә ялғаусы түгел... Рух күпере...

Гөлләмә-гөлләмә ауырыуҙарға килтереүсе ниндәй "цивилизация" шарттарында йәшәйбеҙ инде бына. Унитазы ялтырауыҡ һәм ҡиммәтерәк булған һайын, әҙәме шул тиклем кәрһеҙ, тоталҡаһыҙ, сырхауыраҡ, бәйһеҙерәк, быуынһыҙыраҡ...



**Көнһылыу ҠОТЛОБАЕВА.**
**Бөрйән районы.**
**(Дауамы бар).**

ЙОНДОҘҘАР НИ ТИ?

# ЙӘШЕЛ ЙЫЛҠЫ ЙЫЛЫ...

## юртып түгел, сабып килә

**Йылан хакимлығын алыштырыусы Йылҡы йылы беҙгә юртып түгел, сабып килә тиҫлә. Киләһе йылдың символы - ағас, шулай булғас, аттың төҫө йәшел буласаҡ, ти йондоҙнамә. Көнсығыш йондоҙнамәлә генә түгел, бөтөн донъя мәҙәниәтендә ат кешенең ихтирамға лайыҡ, ятраҡтан һәм айырылмаҫ юлдашы. Шул уҡ ваҡытта ул намыҫлылыҡ, изгелек, түҙемлелек, тиҙлек һәм, әлбиттә, матурлыҡ символы.**

Ағас Толпар тояҡтары менән ҡапҡабыҙға шаҡый. Аҡыллы, серле булһа ла хәүефле Йыландан айырмалы, Ат изге күңелле һәм йылдам, һәр төрлө хәйләләрҙе һәм мыштырлауҙы ене һөймәй, маҡсатына табаң елдереп сығып китергә һәр ваҡыт әҙер. Йылҡы - азатлыҡ символы, шуға күрә күптәр был йылды бәйләнештәрҙе сикләп, ирекһеҙләп торған хәлдәрҙән һәм иҫкергән ҡараштарҙан ҡотолдороусы йыл булараҡ өмөттәр бағлап көтә.

Көнсығыш йондоҙнамәһендә Йылҡы йылы сағыу һәм көтөлмәгән ваҡиғаларға бай иҫәпләнә - был тәбиғи: йыл хужаһының үҙе лә бит импульсив, ҡыҙыу, ғорур һәм сикләүҙәрҙе яратмай. Уның үҙбелдеклелеге көтөлмәгән хәлдәргә тарыттыуы ла ихтимал, шуға күрә уны һөйөп-иркәләп тә, кәрәк саҡта, сыбыртҡы күрһәтеп тә ҡулға эйәләштерәләр.

2014 йыл йондоҙнамәһен ентекле өйрәнеп, астрологтар йыл хужаһының күпселеккә ирәүәнләп китеп, ағым ыңғайына йөҙөргә ирек бирмәйәсәген күҙаллай. Яңы йыл һәр кешенең тормошона глобаль үҙгәрештәр алып киләсәк, тип ҡарала һәм беҙҙең ошо хәлдәргә мөнәсәбәтебеҙ холҡобоҙҙағы бигүк яҡшынан булмаған сифаттарыбыҙҙы ла килтереп сығарыуы ихтимал, тиҙәр. Шул уҡ ваҡытта ҡайһы бер планеталар торошо һөйләүенсә, Йылҡы йылы һәр беребеҙгә иҫкергән бик күп ҡалыптарҙан баш тартырға, бер кемгә лә кәрәкмәгән ҡағиҙәләр һәм тыйыуҙарҙан ҡотолорға, донъяға яңыса ҡарарға ярҙам итәсәк, тип көтөлә.

Уҙған йылға ҡарағанда, яңыһы тотороҡло һәм тыныс булмаҫсы, бирһен Хоҙай! Йәмғиәт тормошонда һәм һәр кешенең яҙмышында яңыға табан ынтылыш, прогрессив үҙгәрештәр өҫтөнлөк аласаҡ,

ӘЙҘӘ, СӘЛӘМӘТ БУЛАЙЫҠ!

# АШҠАҘАН ҠУРҠЫП ТОРАЛЫР,

## бауыр-бөйөрҙөң ҡото осалыр...

**Бөгөнгө заманда кеше һаулығын ҡаҡшатыусы факторҙар бик күп: экология торошо эскән һыуыбыҙҙа ла, ашаған ризығыбыҙҙа ла, һулаған һауабыҙҙа ла сағыла. Иҫ киткес тиҙлек һәм мәғлүмәт осоронда стресс баҫымы ла үҙенекен эшләй. Ошондай шарттарҙа үҙебеҙҙе мөмкин тиклем кире йоғонтоларҙан араларға, сәләмәт йәшәү рәүеше булдырырға һәм һәр беребеҙгә үҙ һаулығын нығытыу буйынса ныҡышмалы шөғөлләнергә кәрәк.**

Был йәһәттән иң беренсе сиратта беҙ режим һаҡлауға һәм дөрөҫ туҡланыуға иғтибар итергә тейешбеҙ. Әйтәләр бит: нимә ашайһың, һин - шул, тип. Ауыҙыңа нимә ҡапҡаныңды белергә тейешһең: ашаған аҙыҡтың өстән ике өлөшө кислоталы булһа, өстән бере һелтеле ризыҡ тәшкил итһен. Быларҙың һәр береһе хаҡында айырым һөйләп тормайым, сөнки хәҙер мәғлүмәт сығанаҡтары күп: китап магазинынан белешмәләр һатып алырға ла, интернеттан ҡарап белергә лә мөмкин.

Сирҙәрҙең күбеһе дөрөҫ туҡланмауҙан килеп сыға. Хәҙерге заман кешеһененң эсе тулы лайла булыуын күптәр үҙҙәре белмәйҙәр ҙә әле. Эске ағзаларҙың лайла менән көпләнеүе матдәләр алмашыныуының боҙолоуына килтерә, гастрит, холецистит, панкреатит кеүек процестар башлана. Быға тап ана шундай лайла барлыҡҡа килтерә торған ит, сыр, дөгө, шәрбәт, аҡ икмәк кеүек ризыҡтарҙы йыш ҡулланыу сәбәпсе булып тора. Тимәк, аш һеңдереү эшмәкәрлеген ризыҡ боҙған икән, уны дарыу ҙа, табип та түгел, ә икенсе төрлө ризыҡ дауаларға тейеш, юғиһә, беҙ йәшелсә, шифалы үләндәр хаҡында онотоп китәбеҙ.

Иҫебеҙгә төшөрәйек әле: борон ата-бабаларыбыҙ яҙға аяҡ баҫҡас та ете көн рәттән балтырған, кесерткән, ҡуҙғалаҡ, йыуа һәм башҡа шуның кеүек үләндәрҙән йәшел аштар әҙерләп ашаған. Белмәй эшләмәгән бит улар быны. Еҫле балтырған, мәҫәлән, ҡан әйләнешен яҡшырта, лайланы бөтөрә, шулай уҡ төрлө файҙалы элементтарға ла бай. Бынан тыш, кеше тәүлегенә кәүҙә ауырлығының 1 килограмына 31-32 мл иҫәбенән һыу эсергә тейеш. Минераль һыуҙан "Ессентуки" һыуҙары яҡшы.

Әйткәндәй, әле бына Яңы йыл алдынан бахырҡай ашҡаҙан, бауыр-бөйөрҙәрҙең ҡото осоп торалыр инде ул: ниҙәр генә күрербеҙ, тип... Юғиһә бит, Яңы йыл кисен ҡолап киткәнсә ашап-эсеү менән алыштырғандар байтаҡ арабыҙҙа. Ә ниндәй файҙалы, мауыҡтырғыс итеп үткәрергә була уны: балалар менән уйындар ойоштор, уйна, йырла, бейе (тик айыҡ башҡа, әлбиттә), тышҡа сығып, шыршы майҙанына бар, боҙҙа шыу... Бөтәһе лә кешенең үҙ ҡулында. Күптәр Яңы йыл ҡаршылағандың иртәгәһенә башын да күтәрә алмай, ыңғырашып, тоҙло ҡыяр һыуы эсеп ята, шуға өҫтәп, "еллерәгән" дә төшөрә, әлбиттә. Ә ҡыҫмыр хужабикәләр табындан тороп ҡалған ризыҡ менән аҙна буйы ғаиләһен һыйлай: әрәм була бит... Ә шунда ағыуланып, үҙҙәре әрәм булыу ихтималын уйламай ҙа.

Унан һуң - хәрәкәт тураһында. Беҙ ифрат ялҡауға әйләндек. Хәрәкәттә - бәрәкәт, тип белмәй әйтмәгән халҡыбыҙ. Быны япондар, мәҫәлән, ни өсөн оҙаҡ йәшәй? Иғтибар итһәгеҙ, улар араһында йыуан ҡорһаҡлы, һимеҙ кешеләр юҡ, тип әйтерлек. Беренсенән, улар дөрөҫ һәм сама белеп туҡлана; икенсенән, күп хәрәкәтләнә: был дөйөм алғанда көнөнә буйына 9-10 км ара үтеүгә тин. Ә беҙ бер-ике туҡталыш өсөн дә автобус көтөп торабыҙ. Быйыл ҡыш матур килә, ҡар күп, ғаилә менән саңғыла тәбиғәткә сығырға, һырғалаҡ шыуырға бик яйлы. Был уңайлы мәлде һәм ваҡытығыҙҙы бушҡа үткәрмәгеҙ. Һәм, ғөмүмән, күберәк йәйәү йөрөһәң, араҡы эсмәһәң, тәмәке тартмаһаң, кешегә яҡты йөҙ менән тороп, яҡшы һүҙенде йәлләмәһәң,- сәләмәт йәшәү ана шул инде ул, бөтәһе лә үҙебеҙҙең ҡулда. Әйҙәгеҙ, бер-беребеҙгә иҫәнлек-һаулыҡ теләп кенә ҡалмайыҡ, һәр кемебеҙ шуны үҙебеҙҙән ҡулдан да ысҡындырмайыҡ!

**Марат ИШМӨХӘМӘТОВ,**
**халыҡ табибы.**



ә инде кем дә кем ошо яңылыҡтарҙы ҡабул итергә теләмәһә, "ярыҡ кәритә" янында ултырып ҡаласаҡ. Йыл үтә ныҡ консерватив ҡараштағы булыуҙы, үткәндәргә йәбешеп ятыуҙы бер ҙә генә хупламай. Әйләнә-тирәгеҙгә күтәрелеп ҡарағыҙ: кҮҙ әйәрмәс тиҙлектә бер-бер артлы үҙгәрештәр булып тора, шуға ярашлы, үҙегеҙ ҙә үҙгәрергә тырышығыҙ, донъя яңылыҡтары, фән һәм техника ҡаҙаныштары менән танышып барығыҙ. Йылҡы йылы был өлкәлә һеҙгә ярҙам итеп кенә торасаҡ.

Ағас Ат йылы ғәмәли эш менән шөғөлләнеп, алдыңғы уй-фекер һәм теорияларҙы тормошҡа ашырыусыларҙы, һис шикһеҙ, бүләкләйәсәк. Йылҡының ынтылышы һәм аҡылы яңы асыштарға һәм уйлап табыуҙарға киң юл асасаҡ, ләкин йыл хужаһынан бөтә "бонустарҙы" ла ҡулға төшөрөү өсөн алға ҡыйған маҡсаттарына әленән уҡ ныҡлы әҙерләнеп, ышаныслы аҙымдар яһарға кәрәк буласаҡ. Был йыл шулай уҡ интеллектуаль эшмәкәрлек - фән, журналистика, яҙыусылыҡ, аналитика менән шөғөлләнеүселәргә, һис шикһеҙ, уңыш килтерәсәк, сөнки ағас Ат тотороҡло һәм тәртипкә күнеккән аҡыл эйәһе, тип ҡарала. Шул уҡ ваҡытта уның йылында бәхәс һәм конфликттарһыҙ ҙа булмаҫ, ахыры, сөнки Ат өсөн оппонентына юл биреүе ҡыйын хәл: ул бит ярайһы ғына ныҡыш һәм үҙ һүҙле.

Көнсығыш йондоҙнамәһе буйынса, ағас стихияһының төҫө - йәшел, тинек, шуға күрә киләһе йыл өсөн йәшелдең төрлө төҫмөрсағылыштары көнүҙәк буласаҡ.

Мәғлүм булыуынса, Йылҡы - үлән менән туҡланыусы хайуан, шуға ла байрам өҫтәлегеҙҙә йәшел төҫтәге йәшелсә-емешкә (салат, укроп, кәбеҫтә, ҡыяр, сельдерей, алма, киви, груша һ.б.), шулай уҡ һыйыр, һарыҡ, ҡош ите, балыҡ кеүек ризыҡтарға өҫтөнлөк бирергә тырышығыҙ.

**Фирүзә ИШБИРҘИНА**
**әҙерләне.**

УҢЫШ ҠАҘАН

# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## "Мега тормош". 30 көнлөк программа

### Егерме бишенсе көн

**Беренсе бүлек: аҡыл. Камиллыҡҡа өлгәшеүҙә мантралар ярҙамы**

Һүҙҙең тәрән инандырыу көсөнә һис шик юҡ. Көн буйына нимә хаҡында һөйләйбеҙ һәм уйлайбыҙ - шул ысынбарлыҡҡа әүерелә. Даими рәүештә "тыныслыҡ" тип ҡабатлап, үҙегеҙҙе тәрән тыныслыҡ һәм көсөргәнештән арыныу халәтенә индерә алаһығыҙ. Эшкә барған ыңғайы: "Мин ныҡмын, көслөмөн, энергиям ташып тора", - тип, рух ныҡлығына эйә була алаһығыҙ. Һүҙҙәр аңыбыҙға - кешенең ҡеүәтле шәхси энергияһы тупланған ергә ғәйәт ҙур йоғонто яһай. Бер ваҡытта ла аңдың һәләтен түбән баһаларға ярамай. Бөгөн көн дауамында үҙегеҙгә үҙегеҙ ебәргән ваҡ һәм кире "тәртмә һүҙҙәр"ҙән арыныу ваҡыты етте. "Мин исемдәрҙе ауырлыҡ менән хәтеремдә ҡалдырам" йәки "Таңдан уҡ бер ҙә хәлем юҡ" тип ҡабатлауығыҙҙы туктатығыҙ. Өҫтәл артына ултырығыҙ ҙа, үҙегеҙгә ҡарата ҡулланған барлыҡ кире баһаларығыҙҙы иҫегеҙгә төшөрөгөҙ һәм уларҙы бөтөнләйгә һүҙ һандығынан алып ташлағыҙ.

**Камиллыҡҡа өлгәшеү мантралары:**

а) Энергия өсөн: "Мин әүҙем һәм маҡсаттарыма өлгәшә алам". Бөгөн уҡ ошо йүнәлештә эшләй башлағыҙ. Үҙегеҙҙә һәм башҡаларға әле тере икәнлегегеҙҙе раҫлағыҙ!

б) Идеаль сәләмәтлек өсөн: "Мин сәләмәтмен һәм ныҡмын, бөгөн мин яҡшы формала!"

в) Байлыҡ өсөн: "Мин баймын, мин, ысынлап та, уныш ҡаҙанам!"

**Икенсе бүлек: тән. Стресты кәметеү ысулы**

Ауыр хеҙмәт көнө һуңында стрестан арынырға тырышығыҙ. Профессиональ массаж эшләүсене саҡырығыҙ йәки үҙегеҙгә үҙегеҙ массаж яһағыҙ (4-се көнгә күрһәтмәләрҙе ҡарағыҙ). Энә ҡаҙау сеансын алып ҡарағыҙ йәки саунаға йә булмаһа гидромассажлы бассейнға барығыҙ. Яңы нимәләр һынап ҡарағыҙ, шулай уҡ физик тренингты үтәгән өсөн үҙегеҙгә көсөргәнештән арыныу ваҡытын награда итеп ҡалдырығыҙ.

**Өсөнсө бүлек: характер. Күберәк уҡығыҙ. Белем - көс**

10-сы көндә шәхси камиллашыу өсөн китапханағыҙҙың нигеҙен тәшкил итергә тейешле әҙәбиәт исемлеге бирелгәйне. Уларҙың күпселеге ҡиммәт тә тормай, әммә баһаһы сикһеҙ. Бөгөн сәғәт дауамында Наполеон Хиллдың "Думай и богатей" тип аталған китабын уҡығыҙ. Был һоҡланғыс китап һеҙгә ныҡ тәьсир итер һәм шәхси, финанс уңыш үҫеше юлына баҫтырыр.

Уҡыуҙы тамамлағас, "Уңыш журналы"на Наполеон Хиллдың 13 принцибын яҙығыҙ. Уларҙы өйрәнегеҙ һәм тормошоғоҙҙа нисек ҡуллана алыуығыҙ хаҡында уйлағыҙ. Маҡсаттарығыҙҙы ул өйрәткәнсә билдәләгеҙ һәм хыялығыҙҙы тормошҡа ашырыуға алып барған юлдан тайпылмаҫ өсөн, әүҙем аҙымдар яһағыҙ. Киләһе аҙна дауамында ошо китапты уҡып бөтөгөҙ һәм уның төп мәлдәрен конспект итеп яҙығыҙ, ул һәр ваҡыт һеҙҙең ҡул аҫтында булырға тейеш.



## 30 ДЕКАБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00, 05.00 "Телеканал "Доброе утро".
09.00, 12.00, 15.00 Новости.
09.05 "Контрольная закупка".
09.35 "Женский журнал".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.15 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым (12+).
13.45 "Истина где-то рядом"(16+).
14.00 Другие новости.
14.25 "Понять. Простить" (16+).
15.15 "Они и мы" (16+).
16.10, 03.50 "В наше время" (12+).
17.00 "Наедине со всеми".
18.00 Вечерние новости.
18.40 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Поле чудес".
21.00 "Время".
21.30 "Клуб Веселых и Находчивых". Высшая лига. Финал" (16+).
00.10 "Дьявол носит "Prada". Комедия (16+).
02.10 "Здравствуй, Дедушка Мороз!" Комедия.

### РОССИЯ 1
05.00 "Утро России".
09.00, 12.00 "Непутевая невестка". Мелодрама (12+).
11.00, 14.00, 20.00 "Вести".
11.30, 14.25, 19.40 "Местное время. Вести-Башкортостан".
11.50 "Вести. Дежурная часть".
14.45 "Смеяться разрешается".
15.50 "Любовь в большом городе". Комедия (12+).
17.40 "Любовь в большом городе-2". Комедия (12+).
20.45 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Одинокие сердца". Мелодрама (12+).
00.50 "Васильки для Василисы". Мелодрама (12+).
02.55 "Эльф". Комедия (12+).
04.50 "Комната смеха".
05.50 "Чародеи". Музыкальная сказка.

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Замандаштар". Миңзифа Исҡужина(6+)
11.35 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.05 "Кәмит". Юмор (6+)
12.10 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
17.00 "Юлдаш йыры-2013" (Гала-концерт) (12+)
20.00 "Дарман". Яңы йылға арналған тапшырыу (2012й.) (6+)
22.00 "Башҡорт йыры". Концерт (12+)

### БСТ
**07.00 "Сәләм" (12+)**
**10.00 "Итоги недели" (на баш. яз.).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Городок АЮЯ" (0+).**
**11.00, 06.45 "Замандаштар" (6+).**
**11.15 "Итоги недели" (16+).**
**11.45, 02.00 "Эзель" (16+).**
**12.30, 13.30, 14.30, 22.30, 00.30 Новости (на баш. яз.).**
**12.45 "Весело живем" (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә" (0+).**
**13.45 "Мелодии души". Концерт (12+).**
**14.45 "Автограф. Т.Бабичева" (0+).**
**15.15 "Царь горы" (6+).**
**15.45 "Бауырһаҡ" (6+).**
**16.00 "Шатлык йыры" (0+).**
**16.15 "Учим башкирский язык" (0+).**
**16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**16.45 "КЛИО" (12+).**
**17.45 "Деловой Башкортостан" (0+).**
**18.00 "Мир настоящих мужчин" (12+).**
**18.15 "Полезные новости" (12+).**
**18.45 "Телецентр" (на баш. яз.).**
**19.45 "Сәңгелдәк".**
**20.00 "Телецентр. Главный день".**
**21.00 "Дознание" с Ильдаром Исангуловым (16+).**
**22.00 "Следопыт" (0+).**
**23.00 "Большой чемодан" (6+).**
**23.45 "Зимний вечер". Концерт (12+).**
**01.00 "Единое время" (12+).**
**03.00 Док. фильм "Круизы в мир открытий" (16+).**
**03.30 "Похищение девушки". Спектакль(12+).**
**05.45 "Белые мгновения". Концерт (12+).**

## 31 ДЕКАБРЯ ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
09.00, 12.00, 15.00 Новости.
09.05 "Контрольная закупка".
09.35 "Женский журнал".
09.45 "Модный приговор".
10.40 "В наше время" (12+).
12.20 "Золушка". Сказка.
13.40 "Карнавальная ночь". Комедия.
15.15 "Елки". Комедия (12+).
16.40 "Иван Васильевич меняет профессию". Комедия.
18.10 "Ирония судьбы, или С легким паром!" Комедия.
21.15 "Проводы Старого года".
23.55 Новогоднее обращение Президента Российской Федерации В.В. Путина.
00.00 "Новогодняя ночь на Первом"
03.00 "Дискотека 80-х".

### РОССИЯ 1
08.35 "Девчата". Комедия.
10.20, 05.20 "Лучшие песни-2013". Праздничный концерт из Государственного Кремлевского дворца.
11.50 "Любовь в большом городе-2". Комедия (12+).
13.30, 14.20 "Елки-2". Комедия (12+).
14.00 "Вести".
15.40 "Короли смеха" (12+).
17.25 "Джентльмены удачи". Комедия.
18.55 "Бриллиантовая рука". Комедия.
20.35 "Три богатыря". Комедия.
22.20 "Новогодний парад звезд". Развлекательное шоу.
23.55 Новогоднее обращение Президента Российской Федерации В.В. Путина.
00.00 "Новогодний Голубой огонек-2014".
04.10 "Большая новогодняя дискотека".

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Замандаштар". Азамат Кәримов (6+)
11.35 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.15 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Таныш түгел таныштар" (1 бүлек) (6+)
16.00 "Йондоҙ. Ҡышҡы кистә көҙгө әкиәт" Фильм-концерт (6+)
18.00 "Иң изге теләктәр менән". Яңы йыл йыйынтығы (2009) (6+)
20.00 "Мондан яралған мөхәббәт, йәки ҡышҡы бер кистә" (6+)
22.00 "Рәхмәт". Фильм (6+)
00.30 "Наза" дискотекаһы (2010) (6+)

### БСТ
**07.00 "Сәләм". Специальный выпуск (12+).**
**10.00 "Гора новостей". Прямой эфир.**
**10.30 "Новогодний звон "Сулпылар". Гала-концерт республиканского телеконкурса (0+).**
**12.00 "Колонкай". Детский телевизионный фильм (0+).**
**12.45 "Городок АЮЯ" (0+).**
**13.00 "Бәхетнамә" (0+).**
**13.30 "Итоги года" (на баш. яз.).**
**14.30 "Дарман". Новогодний выпуск (0+).**
**16.00 "Алтын тирмә". Семейная телевикторина(0+).**
**16.45, 05.30 "Ирония судьбы или С легким паром!" Худ. фильм на баш. яз. (12+).**
**20.00 "Итоги года".**
**21.00 "Ургала". Муз. фильм (12+).**
**22.45 "Башҡорт йыры-2013". Гала-концерт (0+).**
**23.50 Новогоднее поздравление Президента РБ Р.З. Хамитова.**
**23.55 Новогоднее обращение Президента Российской Федерации В.В. Путина.**
**00.00 "Башҡорт йыры-2013". Гала-концерт. Продолжение (0+).**
**03.00 "Первая ночь на БСТ" (12+).**

## 1 ЯНВАРЯ СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
06.00 "Две звезды".
07.20 "Золушка". Сказка.
08.45 "Карнавальная ночь". Комедия.
10.00, 12.00 "Новости".
10.10, 12.10 "Ирония судьбы, или С легким паром!" Комедия.
13.25 "Ирония судьбы. Продолжение". Комедия.
15.20 "Иван Васильевич меняет профессию". Комедия.
16.50 "Две звезды". Новогодний выпуск"
19.30 "Церемония вручения народной премии "Золотой граммофон".
22.30 "Аватар". Фэнтези (16+).
01.05 "Шерлок Холмс". Детектив (12+).
02.35 "Мулен Руж". Мюзикл (16+).
04.35 "Хортон". Мультфильм.

### РОССИЯ 1
07.15 "Елки-2". Комедия.
09.00 "Белка и Стрелка. Звездные собаки". Мультфильм.
10.40 "Джентльмены удачи". Комедия.
12.15 "Бриллиантовая рука". Комедия.
14.00 "Вести".
14.10 "Песня года". Часть первая.
16.30 "Юмор года". (12+).
18.05 "Джентльмены, удачи!" Комедия (12+).
19.55 "Первый новогодний вечер".
21.20 "Москва слезам не верит". Мелодрама (12+).
23.55 "Новогодняя жена". Мелодрама (12+).
01.35 "Чародеи". Музыкальная сказка.
04.15 "Комната смеха".
05.05 "Семь стариков и одна девушка". Комедия.

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Замандаштар". Хәким Мортазин (6+)
11.35 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.05 "Кәмит". Юмор (6+)
12.10 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Таныш түгел таныштар" (2 бүлек) (6+)
16.00 "Сәкән һуға йондоҙҙар" (6+)
21.00 "Еңел пар менән". Фильм (12+)
23.00 "Хәтәр мегаполис". Концерт (12+)

### БСТ
**07.00 "Ирония судьбы или С легким паром!" Худ. фильм на баш. яз. (12+).**
**08.30, 03.30 "Новогодний ретро-калейдоскоп" (6+).**
**09.30 "Сорнай" (0+).**
**10.00 "Сәләм". Специальный выпуск (12+).**
**10.55 "Большой чемодан" (12+).**
**11.35 Звездная "Гора новостей" (0+).**
**11.45 "Зеркальце" (6+).**
**12.00 "Сулпан". Детский телевизионный фильм (0+).**
**12.45 "Волшебный хвостик". Фильм-сказка.**
**13.30 "Зимние мелодии". Концерт(12+).**
**14.00 "Иван Васильевич меняет профессию". Худ. фильм на баш. яз. (12+).**
**15.30 "Дарю песню". Концерт.**
**16.45 "Клио". Новогодний выпуск(12+).**
**17.30, 01.15 Новогодний "Попкорм" (16+).**
**18.15 "Рэхмэт" (к/ст. "Башкортостан"). Худ. фильм (12+).**
**20.00 "Любовь и звезды". Муз. фильм (12+).**
**21.30 "Баик-2013". Гала-концерт (0+).**
**02.00 "Знакомые незнакомцы-1". Муз. фильм (12+).**
**04.30 "Галиябану". Спектакль(12+).**
**06.30 "Весело живем".**

## 2 ЯНВАРЯ ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
06.00, 10.00, 12.00 "Новости".
06.10 "Чингачгук - Большой змей". Приключения (12+).
08.00 "Семейный дом"(16+).
10.10 "Ирония судьбы. Продолжение". Комедия.
12.10 "Ледниковый период-4: континентальный дрейф". Мультфильм.
13.45 "Один дома". Комедия.
15.35 "Анжелика, маркиза ангелов". Приключения (12+).
17.30 "Угадай мелодию"(12+).
18.00 "Поле чудес"(16+).
19.10 Музыкальный фестиваль "Голосящий КиВиН" (16+).
21.00 "Время".
21.15 Музыкальный фестиваль "Голосящий КиВиН". Продолжение (16+).
22.45 "Красная звезда" представляет "20 лучших песен года" (16+).
00.45 "Крепкий орешек". Боевик (16+).
03.00 "В раю как в ловушке". Комедия (12+).
04.45 "В наше время"(12+).
05.45 "След сокола". Приключения (12+).

### РОССИЯ 1
06.35 "Снег на голову". Мелодрама (12+).
08.25 "Доярка из Хацапетовки" (12+).
10.30 "Джентльмены удачи". Комедия (12+).
12.30, 14.10 "Москва слезам не верит". Мелодрама (12+).
14.00, 20.00 "Вести".
15.35 "Песня года". Часть вторая.
18.05 "Юмор года". Часть вторая. Ведущие: Сергей Дроботенко, Елена Воробей, Роман Емельянов (12+).
20.20 "Второй Новогодний вечер". Ведущие: Максим Галкин, Владимир Зеленский.
22.05 "Бедная Liz". Комедия (12+).
00.10 "Живой звук".
01.40 "Стреляй немедленно!" Комедия (12+).
03.20 "Люди и манекены". Комедия.
04.45 "Комната смеха".
05.15 "Доярка из Хацапетовки. Вызов судьбе" (12+).

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Замандаштар". Альберт Имамутдинов (6+)
11.35 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.05 Фәрит Яҡшығолов йырлай (6+)
12.15 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Таныш түгел таныштар" (3 бүлек) (6+)
18.00 "Автомобилдән һаҡлан". Фильм (6+)
21.00 "Кис ултырып". "Наза" дискотекаһы (2009) (6+)

### БСТ
**07.00, 03.30 "Новогодний ретро-калейдоскоп" (6+).**
**08.00 "Двенадцать месяцев". Спектакль (6+).**
**09.30 "Сорнай" (0+).**
**10.00 "Сәләм". Специальный выпуск (12+).**
**10.55 "Большой чемодан" (12+).**
**11.35 Звездная "Гора новостей" (0+).**
**11.45 "Ҡарйондоҙ". Фильм-сказка.**
**12.30 "Самое ценное". Фильм-сказка.**
**13.00 "Зимние мелодии". Концерт(12+).**
**13.30 "Көндәлек". Новогодний выпуск(6+).**
**14.00, 00.15 "Операция "Ы", или Новые приключения Шурика". Худ. фильм (на баш. яз.) (12+).**
**15.30 "Дарю песню". Концерт.**
**17.15 "КЛИО" (12+).**
**18.00 "Следопыт". Лучшее (0+).**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 "Еду я в деревню" (0+).**
**19.30 "Дарман" (0+).**
**20.15 "Вопрос + Ответ = Портрет" (0+).**
**21.00 "Урал лото 6 из 40". Прямой эфир (0+).**
**21.15 "Полезные новости" (12+).**
**21.30 Новости.**
**22.00 "Олимпийская мечта" (6+).**
**22.15 "Юлдаш йыры-2013". Гала-концерт (0+).**
**01.45 "Знакомые-незнакомцы-2". Муз. фильм (12+).**
**04.30 "Весело живем". Спектакль(12+).**
**06.15 "Автограф. Фания Чанышева" (6+).**
**06.45 "Замандаштар" (6+).**

## 3 ЯНВАРЯ ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
06.00, 10.00, 12.00 Новости.
06.10 "След сокола". Приключения (12+).
08.00 "Семейный дом" (16+).
10.10 "Морозко". Сказка.
11.40 "Ералаш".
12.10 "Ледниковый период-3: эра динозавров". Мультфильм.
13.50 "Один дома-2". Комедия.
16.00 "Великолепная Анжелика". Приключения (12+).
18.00 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым.
19.10 "Ку! Кин-Дза-Дза". Мультфильм (12+).
21.00 "Время".
21.15 "Три мушкетера". Приключения (12+).
23.00 "Шерлок Холмс: этюд в розовых тонах". Детектив (12+).
00.50 "Крепкий орешек-2". Боевик (16+).
03.00 "Зуд седьмого года". Комедия (12+).
04.40 "В наше время"(12+).

### РОССИЯ 2
11.00, 14.00, 20.00 "Вести".
11.15, 19.40 "Местное время. Вести-Башкортостан".
11.35 "Доярка из Хацапетовки. Вызов судьбе".
12.30 "Праздничный концерт".
14.10 "Золотые ножницы". Мелодрама (12+).
16.00 "Измайловский парк". Большой юмористический концерт (16+).
17.50 "Серебристый звон ручья". Мелодрама (12+).
20.20 "Даша". Мелодрама (12+).
00.05 "Живой звук".
01.40 "Новогодняя засада". Комедия (12+).
03.25 "Горячая десятка" (12+).
04.20 "Люди и манекены". Комедия.
05.45 "Доярка из Хацапетовки. Вызов судьбе" (12+).

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Замандаштар". Урал Ниғмәтуллин (6+)
11.35 "Моңло аҙан". Дини йырҙар (6+)
12.05 "Кәмит". Юмор (6+)
12.10 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Йома" (0+)
14.30 "Һарығолаҡ". Фильм. 1 бүлек (6+)
19.00 "Таһир менән Зөһрә". Яңы йыл фильмы 6+)
21.15 "Уныш джентльмендары". Фильм (6+)

### БСТ
**07.00, 12.30 Новости (на баш. яз.).**
**07.15, 03.30 "Новогодний ретро-калейдоскоп" (6+).**
**08.15 "Как помочь Барби". Спектакль (6+).**
**09.30 "Сорнай" (0+).**
**10.00 "Сәләм". Специальный выпуск (12+).**
**10.55 "Большой чемодан" (12+).**
**11.35 Звездная "Гора новостей" (0+).**
**11.45 "Камыр-батыр". Фильм-сказка.**
**13.00 "Зимние мелодии". Концерт (12+).**
**13.30 "Көндәлек. Миякинский район" (6+).**
**14.00, 00.15 "Кавказская пленница". Худ. фильм (на баш. яз.) (12+).**
**15.30 "Дарю песню". Концерт.**
**16.45 Чемпионат России по хоккею - чемпионат КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Динамо" (Рига). Прямая трансляция.**
**19.30 Дарман (0+).**
**20.15 "Вопрос + Ответ = Портрет" (0+).**
**21.00 "Попкорм". Светская хроника (16+).**
**21.30 Новости.**
**22.00 Уфимское "Времечко".**
**22.30 "Юлдаш йыры-2013". Хит-парад (0+).**
**01.45 "Знакомые незнакомцы-3". Муз. фильм (12+).**
**04.30 "Эх, холостяки, холостяки..." Спектакль (12+).**
**06.15 "Автограф. Каусария Шафикова" (6+).**
**06.45 "Замандаштар" (6+).**

## 4 ЯНВАРЯ СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
06.00, 10.00, 12.00 Новости.
06.10 "Апачи". Приключения.
08.00 "Семейный дом" (16+).
10.10 "Гусарская баллада". Комедия.
12.10 "Ледниковый период-2: глобальное потепление". Мультфильм.
13.45 "Роман с камнем". Приключения (16+).
15.45 "Анжелика и король". Приключения (12+).
17.45 "Угадай мелодию" (12+).
18.10 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым.
19.15 "Zолушка". Мелодрама (16+).
21.00 "Время".
21.15 "Три мушкетера". Приключения (12+).
23.00 "Шерлок Холмс: слепой банкир". Детектив (12+).
00.50 "Крепкий орешек: возмездие". Боевик (16+).
03.00 "Джентльмены предпочитают блондинок". Комедия (16+).
04.30 "Дельго". Мультфильм.

### РОССИЯ 1
09.00, 05.55 "Доярка из Хацапетовки-3" (12+).
10.25 "Субботник".
11.00, 14.00, 20.00 "Вести".
11.15, 14.10 "Уральская кружевница" (12+).
15.05 Шоу "Десять миллионов" с Максимом Галкиным.
16.10 "Кривое зеркало". "Театр" (16+).
18.05 "Судьба Марии". Мелодрама (12+).
20.20 "Сәләми". Мелодрама.
24.00 "Живой звук".
01.25 "Невеста". Мелодрама (12+).
03.00 "Люди и манекены". Комедия.
05.30 "Комната смеха".

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Автограф". Рәшит Низамов (6+)
11.50 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.05 Илнар һәм Юлиә Ҡотдосовтар йырлай (6+)
12.15 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Эш түбәтәйҙә". Фильм-концерт (6+)
18.00 "Форест Гамп". Фильм (12+)
21.00 "Ер менән күк араһында". Фильм-концерт (12+)

### БСТ
**07.00, 12.30, 18.30 Новости (на баш. яз.).**
**07.15, 03.30 "Новогодний ретро-калейдоскоп" (6+).**
**08.00 "Золушка". Спектакль (6+).**
**09.30 "Сорнай" (0+).**
**10.00 "Сәләм". Специальный выпуск (12+).**
**10.55 "Большой чемодан" (12+).**
**11.35 Звездная "Гора новостей" (0+).**
**11.45 "В стране боронзаман". Фильм-сказка.**
**13.00 "Зимние мелодии". Концерт (12+).**
**13.30 "Көндәлек. Аскинский район" (6+).**
**14.00, 00.15 "Джентльмены удачи". Худ. фильм (на баш. яз.) (12+).**
**15.30 "Дарю песню". Концерт.**
**17.15 "КЛИО" (12+).**
**18.00 "Следопыт. Лучшее" (0+).**
**19.00 "Еду я в деревню" (0+).**
**19.30 "Дарман" (0+).**
**20.15 "Вопрос + Ответ = Портрет" (0+).**
**21.00 "Попкорм". Светская хроника (16+).**
**21.30 Новости.**
**22.00 "Олимпийская мечта" (6+).**
**22.15 "Курай" собирает друзей" (12+).**
**01.45 "Машина времени". Муз. фильм (12+).**
**04.15 Марс Гимранов. "Зимние приключения". Спектакль-сказка Уфимского государственного татарского театра "Нур".**
**05.30 "Эх, Сапатера!". Спектакль (12+).**
06.45 "Замандаштар" (6+).

## 5 ЯНВАРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
06.00, 10.00, 12.00 Новости.
06.10 "Братья по крови". Приключения (12+).
08.00 "Семейный дом"(16+).
10.10 "Старик Хоттабыч". Сказка.
11.45 "Ералаш".
12.10 "Ледниковый период". Мультфильм.
13.35 "Ледниковый период: гигантское рождество". Мультфильм.
14.00 "Жемчужина Нила". Приключения (16+).
16.00 "Неукротимая Анжелика". Приключения (12+).
17.35 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым.
18.40 "Легенды "Ретро FM". Юбилейный выпуск.
21.00 "Время".
21.20 "Три мушкетера". Приключения (12+).
23.10 "Что? Где? Когда?" Финал года.
00.50 "Шерлок Холмс: большая игра". Детектив (12+).
02.45 "Как выйти замуж за миллионера". Комедия.
04.15 "Ковбойши и ангелы". Приключения (12+).

### РОССИЯ 1
09.50 "Рождественская "Песенка года". Праздничный концерт с участием звезд эстрады, лауреатов и победителей "Детской Новой Волны" и "Детского Евровидения" разных лет.
11.00, 14.00, 20.00 "Вести".
11.15, 14.10 "Уральская кружевница"(12+).
15.05 "Кривое зеркало" (16+).
17.35 "Любовь для бедных". Мелодрама (12+).
19.30, 20.20 "Сила Веры". Мелодрама (16+).
23.50 "Живой звук".
01.15 "Снегурочка для взрослого сына". Мелодрама (12+).
02.50 "Соломенная шляпка". Комедия.
05.10 "Комната смеха".

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Балҡыш". Нурия Ирсаева (6+)
11.50 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.05 "Кәмит" (6+)
12.10 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Һарығолаҡ". Фильм. 2 бүлек (6+)
18.00 "Йырҙарыбыҙ һөйгән йәрҙәргә". Иҙел Нурғәлин, Юнир Һағынбаев (6+)
20.00 "Ы" операцияһы. Фильм (12+)

### БСТ
**07.00 Новости (на баш. яз.).**
**07.15, 03.30 "Новогодний ретро-калейдоскоп" (6+).**
**08.00 "Тәмле".**
**08.30 "Ледниковый период-1". Мультфильм.**
**09.30 "Сорнай" (0+).**
**10.00 "Большой чемодан" (12+).**
**10.45 "Звездная "Гора новостей" (0+).**
**10.55 "Созвездие талантов" (6+).**
**12.30 "Итоги года" (на баш. яз.) (16+).**
**13.30 "Көндәлек. Бурзянский район" (6+).**
**14.00 "Белое солнце пустыни". Худ. фильм (на баш. яз.) (12+).**
**15.30 "Дарю песню". Концерт.**
**16.45 Чемпионат России по хоккею - чемпионат КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - ЦСКА (Москва). Прямая трансляция.**
**19.30 "Дарман" (0+).**
**20.15 "Спорт. Итоги".**
**21.00 "Урал лото 6 из 40". Прямой эфир (0+).**
**21.15 "Олимпийская мечта" (6+).**
**21.30 "Итоги года" (16+).**
**22.30 "Байыҡ-2012". Гала-концерт(0+).**
**01.45 "Необыкновенный матч". Муз. фильм (12+).**
**04.15 "Тиле йәшлек". Спектакль (12+).**
**06.00 "Үткән ғүмер". Новогодний повтор (12+).**

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры
**"Белмәсйән мажаралары"** (Н.Носов, З.Бураҡаева инсц.), әкиәт. **3, 8 ғинуар** - 11:00, 13:00, 15:00; **4, 5, 6, 7 ғинуар** -11:00, 13:00

**4 ғинуар "Хыялый"** (С.Әбүзәр), лирик комедия
**5 ғинуар "Мөхәббәт ҡарағы"** (Ф.Бүләков), музыкаль комедия
**6 ғинуар "Мулла"** (Т.Миңнуллин), драматик хикәйә
**7 ғинуар "Ҡоҙаса"** (Б.Бикбай, З.Исмәғилев), музыкаль комедия

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры
**"Яңы йылды кем урлаған?"** (Л.Исҡужина), Яңы йыл тамашаһы. **2 ғинуар** - 13:00, 15:00; **3-7 ғинуар** - 12:30, 15:00; **8 ғинуар** - 14:00

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы
**3-7 ғинуар "Яңы йыл олимпиадаһы".** Башлана 10:00, 13:00, 15:00

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ЖУРНАЛИСТАРҘЫҢ ДА...

## үҙ бәйгеһе бар



**Йыл аҙағында һәр һөнәри берләшмәләр араһында йыл йомғаҡтары яһау, иң-индәрҙе билдәләү кеүек матур йола бар. Ошо көндәрҙә журналистар араһында ойошторолған "Матбуғат балы - 2013" республика бәйгеһенең дә һөҙөмтәләре асыҡ булды.**

Һуңғы йылдарҙа журналистар союзы тарафынан төрлө саралар ойоштороло торһа ла, һәр быуын журналистарын бер ҡорға йыйып, ниндәйҙер аралашыу, тәжрибә уртаҡлашыу майҙансығы булдырыу кәрәклеге күптән өлгөрөп еткән мәсьәлә. Ҡасандыр журналистар араһында конкурс булараҡ барлыҡҡа килгән был сара үҙенең форматы икенсерәк, байрамсараҡ йүнәлештә булыуы сәбәпле, әлбиттә, быйыл оло маҡсаттарҙы күҙ уңында ла тотмай ине. "Матбуғат бал"ында үтеп барған йылда ниндәйҙер уңыштарға өлгәшеп, коллегалары араһында ихтирамға лайыҡ булған журналистар билдәләнде.

Төп тематик номинацияларға кандидаттарҙы республика министрлыҡтары һәм ведомстволары етәкселәре һәм белгестәре тәҡдим итте. Ойоштороусылар белдереүенсә, улар үҙҙәренә ҡарылышлы өлкәнә ҡайһы журналист күберәк яҡтыртыуын яҡшы белә. Конкурстың иң юғары баһаһы - "Йыл журналисы" номинацияһына журналистар үҙ коллегаларының тәҡдиме менән ҡатнашты. 40-тан ашыу кеше араһында йыл журналисы тигән исемгә "Юлдаш" радиоһынан Гүзәл Ситдиҡова лайыҡ булды.

"Матбуғат балы - 2013" һөҙөмтәләре күрһәтеүенсә, республика талантлы журналистарға бай һәм улар баш ҡала ла ғына түгел, район гәзиттәрендә лә күп. "Бәләкәй тыуған яҡ" номинацияһында - "Атайсал" гәзитенең баш мөхәррире Хәйҙәр Тапаҡов, "Сәнәғәт һәм инвестициялар" номинацияһында "Учалинская газета"нан Мәүлиә Рәхимова билдәләнде. Электрон матбуғат саралары журналистары "Россия1-Башкортостан" каналынан Марина Попкова - "Иҡтисад һәм финанстар", "БСТ" каналынан Роза Хәбибуллина - "Спорт һәм сәләмәт йәшәү рәүеше", "Вся Уфа" телеканалынан Андрей Савельев - "Сәйәсәт һәм йәмғиәт", "Башинформ" мәғлүмәт агентлығынан Эльмира Сабирова - "Мәҙәниәт һәм сәнғәт", "Российская газета" журналисы Тамара Пересыпкина "Экология һәм сәләмәтлек" номинациялары еңеүселәре булды. "Йыл блогеры" тип Рәис Ғәбитов табылды.

Әйткәндәй, "Киске Өфө" гәзите журналисы Ләйсән Нафиҡова "Социаль өлкә һәм мәғариф" номинацияһында еңеү яуланы. Коллегабыҙҙы был еңеүе менән ихлас ҡотлайбыҙ һәм уға тағы ла бейегерәк ижад үрҙәре теләйбеҙ.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ҠАЛАНЫҢ ЙӨҘӨ...

## хатаһыҙ яҙыуҙарҙа ла




**Һәр ҡаланың үҙенең йөҙө була. Һәм уны йышыраҡ бөгөнгө көндәлек тормошобоҙҙоң айырып алғыһыҙ өлөштәре - реклама фасадтары, төрлө ойошмаларҙың атамалары, алтаҡталары ла билдәләй. 2009 йылдан бирле уларҙың ике дәүләт телендә дөрөҫ яҙылышы өсөн дә эштәр туҡтағаны юҡ, шулай ҙа хаталар һаман осрай әле. Өфө ҡала округы хакимиәтендә "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында"ғы законды тормошҡа ашырыу буйынса ҡала Комиссияһының сираттағы ултырышында һүҙ ошолар тураһында барҙы.**

Хакимиәт башлығы урынбаҫары Сынтимер Биктимер улы Баязитов билдәләүенсә, бөгөнгө көндә ҡаланың бөтөн өлкәләрендә лә дәүләт теле сәйәсәтен тормошҡа ашырыу буйынса әүҙем эшмәкәрлек алып барыла. Законды үтәү сиктәрендә төрлө конкурстар, акциялар ойоштороу ҙа ҡаланың тышҡы йөҙөн матурлауҙа яҡшы һөҙөмтәләр бирә. Мәҫәлән, ошо көндәрҙә генә "Грамоталы ҡала" дөйөм ҡала конкурсының район этабына йомғаҡтар яһалды. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының "Башҡорт теле хеҙмәте" был эшкә йөштәрҙе лә йәлеп итеүе менән хуплауға лайыҡ. Ваҡытлы матбуғат сараларында баҫылған тәнҡит материалдары буйынса оператив саралар күрелә, предприятиелар үҙҙәре яҙҙам һорап, терминологик комиссияларға мөрәжәғәт итә - шулай ҙа ойошмаларҙың атамалары, алтаҡталары, реклама ҡулайламаларында һаман да хаталар ебәрелә әле.

Совет районы хакимиәте башлығы урынбаҫары Ольга Ижбулдина районда Законды тормошҡа ашырыу буйынса ағымдағы йылда башҡарылған эштәр менән таныштырҙы. Район комиссияһында 70-кә яҡын белгес методик ярҙам күрһәтә, был эшкә районды барлыҡ башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары йәлеп ителгән. Әйткәндәй, яңы Федераль белем биреү стандарттарына күсеү сәбәпле, Совет районында дәүләт һәм туған телдәрҙе уҡытыуҙы һаҡлап ҡалыу өсөн барлыҡ мөмкинлектәр тыуҙырылған. Белем биреү учреждениелары менән бер рәттән, район биләмәһендә урынлашҡан гәзит-журналдар редакциялары ла хаталар өҫтөндә даими эш алып бара, тип билдәләнде ултырышта. Нәшер итеү эше менән шөғөлләнгән ойошмаларҙың продукцияһын терминологик комиссия һәр квартал һайын тикшереп тора. Райондың ЗАГС бүлендә никахтарҙы теркәү башҡорт телендә, милли йолалар ҡулланып башҡарыла.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ниндәй генә ҡаршылыҡтар булыуға ҡарамаҫтан, тел сәйәсәтен тормошҡа ашырыу йәһәтенән башҡарылған был эштәрҙең йәмғиәтебеҙҙә башҡорт дәүләт теленең үҙенең лайыҡлы урыны бар икәнен күрһәтеүсе бер сара булараҡ әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ. Баш ҡаланың милли йөҙөн булдырыуға, башҡорт теленең артабанғы үҫешенә булышлыҡ итәсәк был йүнәлештәге эштәр киләһе йылда ла алып барыласаҡ.**

Ләйсән ДАЯНОВА.

ИҒТИБАР!

## "АЛТЫНАЙ" АНСАМБЛЕ САҠЫРА!



Бынан ике йыл элек яҡташыбыҙ Нәзир Байегетов Мәскәү ҡалаһында йәшәүсе башҡорт студенттарын һәм башҡорт балаларын йыйып, **"Алтынай" башҡорт бейеү ансамбле** ойошторғайны. Улар **5 ғинуарҙа** Өфө тамашасыһы алдында сығыш яһаясаҡ. Концерт **"Йәшел саулыҡ"** шифаханаһының Ял үҙәгендә үтәсәк. Адресы: **Менделеев урамы, 136-сы йорт.** Матур тамашала көтөп ҡалабыҙ!

ИҒЛАН

Рәсәй ДОСААФ-ының Башҡортостан Республикаһы төбәк бүлексәһе белдереүенсә, 2013 йылдың 10 декабрендә Өфө ҡалаһы Дан бульвары, 6 адресындағы 577,5 квадрат метр майҙанлы бина аукцион формаһында асыҡ һатыу үткән. Овсянников А.М. һәм Солдатенко С.В. аукцион еңеүселәре тип билдәләнгән.

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1435 һижри йыл.*

| Декабрь - Ғинуар (Сәфәр - Рабиғүл әүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш сыға | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 30 (27) дүшәмбе | 9:12 | 10:42 | 14:30 | 16:25 | 17:55 | 19:25 |
| 31 (28) шишәмбе | 9:12 | 10:42 | 14:30 | 16:26 | 17:56 | 19:26 |
| 1 (29) шаршамбы | 9:12 | 10:42 | 14:30 | 16:27 | 17:57 | 19:27 |
| 2 (1) кесе йома | 9:12 | 10:42 | 14:30 | 16:28 | 17:58 | 19:28 |
| 3 (2) йома | 9:11 | 10:41 | 14:30 | 16:29 | 17:59 | 19:29 |
| 4 (3) шәмбе | 9:11 | 10:41 | 14:30 | 16:31 | 18:01 | 19:31 |
| 5 (4) йәкшәмбе | 9:10 | 10:40 | 14:30 | 16:32 | 17:02 | 19:32 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Әбйәлил районы Буранғол ауылында йәшәүсе һөйөклө әсәйебеҙ -

**Ғәбитова Мәүзиғә Ғаффан ҡыҙын**



- оло юбилейы менән ысын күңелдән ҡотлайбыҙ. Бөтә ғүмерен ғаиләһенә, ауылына, районына һәм тыуған Башҡортостанына бағышлаған әсәйебеҙ ҙур һәм данлыҡлы тормош юлы үтте. Ябай китапханасынан башлап, СССР-ҙың халыҡ депутаты дәрәжәһенә тиклем барып етте. Ҡайҙа ғына эшләмәһен, ул иң тәүҙә кеше, йәмғиәт мәнфәғәте тураһында уйланы. Шуның арҡаһында ул ысын халыҡ һөйөүен яуланы. Республикала тәүгеләрҙән булып "Шәжәрә", "Һаумыһығыҙ, ауылдаштар", "Ҡарға бутҡаһы", "Ҡаҙ өмәһе" кеүек байрамдар, төрлө-төрлө ҡыҙыҡлы саралар үткәрҙе. Әсәйебеҙ ауыл Советын етәкләгән осорҙа беҙҙең ауылда тормош гөрләп тороуы тураһында әле лә һағынып иҫкә ала ауылдаштар.

Әсәйебеҙ беҙҙең атайыбыҙ Миҙхәт Әхәт улы менән кеше һоҡланырлыҡ өлгөлө ғаилә ҡороп, беҙҙе - биш баланы - илебеҙҙең лайыҡлы граждандары итеп үҫтерҙе. Хәҙер инде ул беҙҙең ҡайтҡанды һағынып көтөп ала, ейәнейәнсәрҙәрен тәрбиәләүҙә лә үҙенең ҙур өлөшөн индерә.

Ҡәҙерле әсәй! Һине бөтә йөрәктән байрамың менән ҡотлайбыҙ. Оҙон ғүмер, ныҡлы һаулыҡ, бөтмәҫ-төкәнмәҫ бәхет теләйбеҙ.

**Балаларың һәм уларҙың ғаиләләре.**

* * *

Декабрь айында тыуған көндәрен билдәләүселәр - **Дүртөйлө ҡалаһынан** Вероника Зарипова, **Ҡырмыҫҡалы районы** Үтәгән ауылынан Закирә Искәндәрова, **Баймаҡ районы** Ярат ауылынан Хәлиҙә Ғәзелшина, Зөһрә Ҡарамырҙина, Хәҙисә Мырҙаҡаева, Үрге Иҙрис ауылынан Юлай Мостафин, Рәмзиә Мостафина, **Күмертау ҡалаһынан** Нурия Хәлилова, Лилиә Батыршина, **Сибай ҡалаһынан** Алһыу Теләккабулова, **Өфө ҡалаһынан** Нәзирә Насырова, Мөхтәр Сөйөшев, Илһам Яхин, Шәүрә Шәкүрова, Нажия Ғабдрахманова, Әлфиә Мырҙағәлина, Марина Иҫсанова, **Туймазы ҡалаһынан** Нәжибә Нәғимова, Рәсимә Ғәрифйәнова, **Ейәнсура районы** Ишемғол ауылынан Нурвил Ҡыуатов, Малай Муйнаҡ ауылынан Гөлнара Аҡбашева, Аҡдәүләт ауылынан Хәснулла Айсыуаҡов, **Архангел районы** Архангел ауылынан Айгөл Япарова, **Әбйәлил районы** Буранғол ауылынан Вәсилә Килдийәрова, Аҫҡар ауылынан Зөһрә Йәғәфәрова, **Йылайыр районы** Ҡәҙерша ауылынан Усман Тәүелбаев, **Балтас районы** Штанды ауылынан Әлфиә Хаҡова, **Шаран районы** Шаран ауылынан Гөлсирә Ғәлимова, Рәмилә Халиҡова, **Бүздәк районы** Бүздәк ауылынан Нәфисә Хәснетдинова, Ташлыкүл ауылынан Регина Хәкимова, **Ауырғазы районы** Үрге Ләкәнде ауылынан Рәсимә Йәғәфәрова, Иҫке Ибрай ауылынан Фәүзиә Шәйәхмәтова, Төрөмбәт ауылынан Ғәфүрә Юлмөхәмәтова, Моразым ауылынан Шамил Хәбибуллин, **Туймазы районы** Әгертамаҡ ауылынан Розалиә Сәғитова, **Миәкә районы** Ҡырғыҙ-Миәкә ауылынан Эльвира Суфиянова, **Ғафури районы** Бәләкәй Үтәш ауылынан Әлфиә Рафиҡова, Красноусол ауылынан Зөһрә Абдуллина, **Мәләүез районы** Смаҡ ауылынан Гөлмизан Таштимерова, **Ишембай районы** Әхмәр ауылынан Гөлнур Солтанморатова, **Благовещен ҡалаһынан** Раушания Миниәхмәтова, Неля Сәлимова, **Стәрлетамаҡ районы** Рощинский ауылынан Гөлназ Аҫылгәрәева, **Дыуан районы** Арый ауылынан Жәмил Нуриев, **Хәйбулла районы** Иләс ауылынан Фазылйән Шәрипов, Яңы Ерғән ауылынан Гөлшат Ильясова һәм башҡа уҡыусыларыбыҙҙы ихлас ҡотлайбыҙ! Ныҡлы һаулыҡ, бәхет-шатлыҡтарға күмелгән оҙон ғүмер, бар изге уй-ниәттәрегеҙҙең тормошҡа ашыуын теләйбеҙ.

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

ӘЙҘӘ, РӘХМӘТЛЕ БУЛАЙЫҠ!

# ЙӨКМӘТКЕНЕ КҮТӘРМӘЛӘГӘН...

## авторҙарыбыҙҙы барлайбыҙ

**(Башы 1-се биттә).**

Уйландырыу, тигәндән. Журналиҫка иң кәрәкле сифаттарҙың береһе ул - интуиция, һиҙемләү. Ошондай сифаттарға эйә булмаһаң, уҡыусыңды уйландырыу тураһында һүҙ булыуы ла мөмкин түгел. Әгәр ҙә донъяуи белемең, тәжрибәң юҡ икән, уҡыусыңа ниндәй мәғлүмәт мөһим икәнен һиҙемләмәй ҡалыуың да бар. Һиҙемләү - ул әле яҙылмағанды, буш ҡағыҙ битен уҡый алыу һәләтлеге. Һиҙемләү - үҙ уҡыусыңдың ихтыяжын, заман ағышын күреп-белеп тороу һәләтлеге. Уҡыусыны уйландырыр темаларҙы тормош, заман үҙе тыуҙыра, ә һиҙемләү һәләте булған журналист уларҙы ваҡытында күреп, өйрәнеп, фекер алышыу майҙанына алып сыға һалырға тейеш. Беҙ шулай итергә тырышабыҙ ҙа, йәғни авторҙарыбыҙға ла темаларҙы үҙебеҙ тәҡдим итеп, уларҙы ла үҙебеҙҙең "арбаға ултыртып алабыҙ". Балалар, йәштәр тәрбиәһе буйынса сәмгә тейерлек рухлы һүҙ кәрәк булғанда, мөрәжәғәт уғы, әлбиттә, яҙыусы Мәрйәм Бураҡаеваға төбәлә. Ниндәйҙер үҙенсәлекле тарихи һүҙ әйтергә кәрәккәндә беҙ Спартак Ильясовҡа, Зәкирйән Әминевҡа өндәшә һалабыҙ. Уларҙың торғаны бер "аяҡлы энциклопедия" икәнен беләбеҙ бит инде. Ил-йорт хәбәрҙәре көсәп китһәк инде, Бөрйәндән Таңһылыу Баһаутдинова, Айһылыу Ғарифуллина, Баймаҡтан Гүзәл Иҫәнгилдина, Мәләүездән Лена Абдрахманова, Белореттан Эльза Мөхәмәҙиева, Әбйәлилдән Радик Өмөтҡужин, Сибайҙан Хәйҙәр Тапаков, Хәлил Һөйөндөков ярҙамға килә. Әнүәрә Хәйбуллина-Монасипова менән Марат Ишмөхәмәтов иһә беҙҙең штаттағы халыҡ дауасыларына әйләнгәнен уҡыусыларыбыҙ үҙҙәре шаһит. Тәбиғәт мөғжизәләре тураһында Әғләм Шәриповтан да (Бөрйән районы) ҡыҙыҡлыраҡ, мәғлүмәтлерәк итеп яҙған кешене табып булмаҫ, моғайын. Мәҡәлә һорап шылтыратып та ебәрәбеҙ, иртәгәһенә үк унан "кәстәнәс" килеп тә төшә. Әйткәндәй, һөнәре менән биолог булған авторыбыҙҙың башҡортса шыма, хатаһыҙ, матур итеп тасуирлап яҙыуы һоҡландыра, был сифат күптән инде беҙҙең журналист халҡы араһында ла һирәк күренеш хәҙер.

Гәзитебеҙҙәге башваткыс, башэшләтмәк, башҡатырғыстар оҫтаһы Илдар Ғәбитов тураһында айырым әйтеп үтке килә. "Киске Өфө"нө ижад итә башлағандың тәүге көндәренән үк ул беҙгә үҙ хеҙмәттәшлеген тәҡдим итте. Ул беҙҙе оҙаҡ ҡына: "Кроссвордтар гәзитегеҙгә уҡыусыларҙы йәлеп итәсәк", - тип ышандырырға тырышты. Ваҡыт уның һүҙҙәренең дөрөҫлөгөн иҫбат итте. Илдар Ғәбитовтың башэшләтмәк, башҡатырғыстарының уҡыусыбыҙға кәрәк икәнен тоябыҙ һәм уны ҡыҙыҡлыраҡ итеүҙең төрлө алымдарын уйлап сығарырға тырышабыҙ.

Республикабыҙҙың төрлө райондарынан, ҡалаларынан гәзитебеҙгә яҙышып торған, баҫмабыҙҙың йөкмәткеһен байытыуға үҙ өлөшөн индергән башҡа авторҙарыбыҙға ла - Көнһылыу Ҡотлобаева, Зөһрә Бураҡаева, Таңсулпан Бураҡаева, Риф Мифтахов, Иҙрис Ноғоманов, Флора Бикембәтова, Нурия Ҡунысбаева, Азат Ярмуллин, Рәшит Шәкүр, Тимер Ниәтшин, Мөҙәрис Багаев, Фәрзәнә Аҡбулатова, Рәүеф Бикташев, Сәриә Ғарипова, Заһир Дәүләтбирҙин, Миләүшә Ҡаһарманова, Фәриғә Күсәкова, Сәфәрғәле Йәнтүрин, Самат Мөхәмәтйәнов, Айҙар Күсәев, Клара Хәмизуллина, Миңһылыу Абдуллина, Фирҙәүес Хисамитдинова, Иршат Йыһанбирҙин, Гүзәлиә Йәнтүрина, Мансур Һиҙиәтов, Әкрәм Ҡәйепҡолов, Тамара Ғәниева, Сабир Шәрипов, Рөстәм Ғатауллин, Гөлкәй Сәмерханова, Лариса Абдуллина, Зөлфиә Ханнанова, Фәриҙә Миһранова, Таңһылыу Ғәйнуллина, Рәдис Дусалин, Радик Вахитовтарға сикһеҙ рәхмәтлебеҙ. Ошо исемлектең артабан да дауам итеүен, төрлө тарафтарҙан рухты, сәмде, ғәмде күтәрер фекерҙәр килеп, гәзитебеҙ биттәренә күсеүен теләйбеҙ.

Ә хәҙер авторҙар араһында барған иғлан ителгән һәм иғлан ителмәгән бәйгеләргә йомғаҡ яһап алайыҡ. Белеүегеҙсә, баҫмабыҙҙа күп йылдар күренекле башҡорт яҙыусыһы, хикәйә оҫтаһы **Сәғит Агиш исемендәге хикәйәләр конкурсы бара**. Был бәйге барышында күп яңы исемдәр асылды, өмөтлө хикәйәселәр барлыҡҡа килеүенә шаһит булдыҡ. Конкурс киләһе йылда ла дауам итәсәк. Тик шундай теләгебеҙ бар: авторҙар үҙ әҫәрҙәрендә заман һәм заманға ҡулайлашҡан, аҡыллы, көслө, лайыҡлы йәшәгән башҡорт кешеһе образын - бөгөнгө көн геройын һынландырһын ине. Был, әлбиттә, ҡәтғи шарт түгел. Ә шулай ҙа... Сәхнәлә, китаптарҙа, тормошта бөгөнгө көн геройы, лидерҙар күренмәй. Уларҙы беҙ әҙәби әҫәрҙәребеҙҙә булһа ла тыуҙырайыҡ. Ә тормошта беҙ һәр ваҡыт китаптарҙа яҙылған геройҙарға тиңләшергә тырышабыҙ. Шулай итеп, быйылғы лауреаттар:



**Хәлил Һөйөндөков**, Сибай ҡалаһында йәшәүсе отставкалағы подполковник - 13-20-се һандарҙа баҫылған "Зәлифәкәй", 42-46-сы һандарҙа баҫылған "Мәк сәскәһе" әҫәрҙәре өсөн.



**Байгилде Моталлап (Рәсүл Байгилдин)** - 28-29-сы һандарҙағы "Бөтә ирҙәр ҙә ҡәбәхәт", 50-52-се һандарҙағы "Сиктең сигендә" хикәйәләре өсөн.



**Мәүлит Ямалетдин**, Учалы ҡалаһында йәшәүсе яҙыусы - 7-8-се һанда баҫылған "Ҡансығай", 35-36-сы һандарҙа баҫылған "Тартай" хикәйәләре өсөн.

**Гәзитебеҙҙә иғлан ителмәгән, әммә тойомланған, ишараланған бәйгелә еңеүселәрҙе барлайыҡ:**



**Лена Абдрахманова**, Мәләүез районының "Көнгәк" гәзите журналисы, Ш. Хоҙайбирҙин исемендәге Хөкүмәт премияһы лауреаты, "Тормош һабаҡтары" рубрикаһындағы мәҡәләләре өсөн.



**Спартак Ильясов**, Учалы районында йәшәүсе яҙыусы, тарихсы - 5-11-се һандарҙа баҫылған "Шәректән - ғәрепкәсә, йәғни Урал аша үткән ырыуҙар юлы" яҙмалары өсөн.



**Әмир Юлдашбаев**, 47-52-се һандарҙағы "Вәлиди хаҡында һүҙ" рубрикаһындағы мәҡәләләре өсөн.



**Әғләм Шәрипов**, Бөрйән районының "Шүлгәнташ" ҡурсаулығы ғилми хеҙмәткәре, биология фәндәре кандидаты - "Тәбиғәт мөғжизәләре" исемле рубрикала баҫылған мәҡәләләре өсөн.



**Гөлназ Манапова**, "Киске Өфө" гәзите журналисы, "Монолог", "Диалог" рубрикаһында баҫылған әңгәмәләре өсөн.

***Лауреаттарыбыҙҙы, еңеүселәребеҙҙе, барлыҡ авторҙарыбыҙҙы Яңы йыл менән ҡотлайбыҙ. Күңелдәрегеҙгә рух, ҡот, тәнегеҙгә ныҡлы сәләмәтлек, ижад ҡомары теләйбеҙ.***

**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҠУРЫҢ БӨТҺӘ...

## кеше ҡәҙерен белерһең

Ярлының ярлылығы бөткәс тә, ярлылыҡ әҫәре ҡырҡ йылға етер; байҙың байлығы бөткәс тә, байлыҡ әҫәре ҡырҡ йылға етер.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Аҡыллы әҙәм ҡатын-ҡыҙҙы ла, быяланы ла һынауҙарға дусар итмәҫ.

**(Лопе де Вега).**

Кешелеккә хеҙмәт итмәгән аҡыл бик ҡурҡыныс.

**(Софокл).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер фермерҙың ишәге ҡоҙоҡ эсенә ҡолап төшә. Фермер ни эшләргә белмәйенсә йүгергеләргә тотона, шул уҡ ваҡытта ҡоҙоҡ төбөндәге ишәктең ғазаплы, йәлләткес тауышы уны ҡаушатып, ниндәйҙер сара күрергә ҡамасаулай. Шулай ҙа фермер үҙендә бер көс табып, шундай ҡарарға килә: ишәк ҡарт инде, ҡоҙоҡто ла күптән күмеп ҡуйырға кәрәк ине. Шуға ла хайуанды унан һөйрәп сығарыуға көс әрәм итеп тормаҫҡа, ҡоҙоҡто ишәге-ние менән бергә күмеп ҡуйырға!**

**Фермер ярҙамға күршеләрен саҡыра. Барыһы ла дәррәү көрәккә тотоноп, ҡоҙоҡҡа тупраҡ ырғыта башлай. Ишәк эштең ниҙә икәнен шунда уҡ һиҙенеп, ҡурҡыныс итеп үкерергә тотона. Шунан ҡапыл тынып ҡала. Күпмелер тупраҡ ырғытҡандан һуң, фермер ҡоҙоҡ эсенә күҙ ташлай. Унда күргәндәренән шаҡ ҡата: ишәк һәр ырғытылған тупраҡты өҫтөнән һелкеп төшөрөп, тупраҡ өҫтөнә баҫа бара. Шулай итеп ул бик тиҙ ҡоҙоҡ буйлап өҫкә күтәрелә һәм һикереп сығып, сабып китә. Көрәк тотҡан кешеләр аптырап тороп ҡала...**

**Әйе, һинең тормошоңда ла бындай ауырлыҡ, ҡартәләр осрар, улар әленән-әле өләшләп ебәрелә торор.**

**Өҫтөңә ниндәйҙер "тупраҡ" ырғытылғанда, уны һелкеп ташлап, юғарыға күтәрел - шул саҡта ғына тубыҡтарыңды яҙып, тураһын баҫа алырһың.**

**Барлыҡҡа килгән һәр ауырлыҡ - ул юлыңа ишелеп төшкән таш өйөмө һымаҡ. Туктап ҡалмағанда һәм бирешмәгәндә был таш өйөмөн дә аша сыға алырһың.**

**Өҫтөңә ишерелгән һәр "тупраҡты" һелкеп ташла һәм юғарыға күтәрел!**

**Бәхетле булыу өсөн ошо ябай ғына биш ҡағиҙәне иҫеңдә тот:**

**- Йөрәгеңде нәфрәттән арындыр һәм ғәфү ит.**

**- Йөрәгеңде борсолоуҙарҙан азат ит - уларҙың күбеһе сәбәпһеҙ һәм урынһыҙға килеп тыуа бит.**

**-Ябай ғына итеп йәшәргә тырыш, булғанына шөкөр ит.**

**-Үҙең кешеләргә күберәк бир.**

**-Башҡаларҙан күпте өмөт итмә.**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИКОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**
«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 27 декабрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә. Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 5006
Заказ 4861